ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

3-9 декабрь (аҡъюлай) 2016

№49 (727)

kiskeufa.ru • blog.kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ҆ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Рабиға Ҡушаеваға һәйкәл ҡуяйыҡ!**



6-7

**Шундай һөнәр бар -**



халыҡ именлеген һаҡлау! 8-9

**Башҡортостан филармониялары...**



милли ерлектән айырылманы 11,15

**Селтәр-ҡашмауҙар менән...**

ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙға кот ҡайта



12-13

**ТВ-программа** 14

***Яҙмыш үҙенә буйһондормаҫ элек уны бала кеүек ҡулынан тотоп йөрөтөргә һәм үҙ иркеңә буйһондорорға кәрәк; ә инде яҙмыш һине үҙенә буйһондороп өлгөргән икән, уны яратыу фарыҙ.***

***(Ф. Ницше).***

"КИСКЕ ӨФӨ"НӨ УҠЫЙЫМ...



# ЯРАТҠАН ГӘЗИТЕМДӘ...

## ололар аҡылы, йәштәр ауазы

**Яңыраҡ үҫмер улым: "Атай, ниңә һин һаман ҡағыҙҙа баҫылған, аҙнаһына бер генә сыҡҡан "Киске Өфө"нө алдыраһың ул? Шуны алып килеүҙәрен түҙемһеҙләнеп көтәһең, бер нисә көнгә бүлә-бүлә уҡыйһың. Унан ҡалһа, уҡығандарыңды беҙгә һөйләйһең. Интернеттан ғына бөтә ҡыҙыҡлы мәғлүмәтте белергә лә була бит", - тип һүҙ ҡатты.**

Бәхәс юҡ. Интернет селтәре күпкә мәғлүмәтлерәк тә, хәбәр төрлөлөгө яғынан да ота. Ләкин унда "Киске Өфө"лә булған "күңел" юҡ. Ҡоро факттар менән сыбарланған, бер кемгә лә кәрәкмәгән һәм күп урын алған, күҙҙе бимазалаған реклама менән тулған, уй-фекер тәрәнлеге булмаған интернеттан беҙҙең гәзит күпкә юғарыраҡ баҫҡысты биләй. Яратҡан гәзитемдә ярылып ятҡан фекер тослоғо, битараф күңелде елкендереп ебәрерлек оптимистик мәҡәләләр, рухһыҙҙы рухландырыр тапҡыр һүҙҙәр, халҡымдың бөтә булмышын, тормошон асып биргән тарихи эҙләнеүҙәр, ололар аҡылы, йәштәр ауазы - бына ошолар етмәй миңә виртуаль мәғлүмәти сығанаҡта.

Гәзиттең яңы һанын ҡулға алған һайын уның эсендә һине нимә көткәнен белмәйһең. Ләкин шуныһы хаҡ - һәр һан үҙ уҡыусыһына күпләп мәғлүмәт кенә биреп ҡалмай, ә бихисап фекер донъяһына алып инә, йәшәүгә илһам өҫтәй, төшөнөп етмәгәнде төплө итеп аңлата, теге йәки был ваҡиғаға ҡарата кинәйәле генә төрттөрөп тә ебәрә. Үҙҙәренә өҫтәмә килем килтергән шөғөл табыусыларҙың ысулдарын баҫтырып, эшһеҙлектән йонсоп, аҡсаһыҙлыҡтан интегеп йөрөүселәргә аҡса эшләү юлдарын өйрәтеүе иһә гәзиттең халыҡҡа ни тиклем яҡын булыуы һәм уның тураһында ҡайғыртыуы хаҡында һөйләй.

Ҡағыҙ битендә донъя күргән "Киске Өфө" менән интернет араһында ниндәй ҙур айырма барлығын ҡыштырлатып гәзит уҡырға өйрәнгән кеше генә аңлай торғандыр. Уны бит яйлап, "тәмләп" уҡырға була, уҡығаныңды тәфсирләп уйлап йөрөп, яңынан ҡулға алып күҙ йүгертеп сығырға мөмкин. Ә йоҡо алдынан ҡалған биттәрҙе уҡып сығып, шулар тәьҫирендә әүен баҙарына китеү әйтеп бирә алмаҫлыҡ күңел рәхәтлеге бирә. Бына ни өсөн алдырам, көтәм, уҡыйым мин был баҫманы. "Киске Өфө" үҙ уҡыусыһының нимә көткәнлеген яҡшы аңлай һәм шул юҫыҡта әүҙем эшләп үҙ-ара ныҡлы бәйләнеш булдырыуға өлгәшә. Артабан да гәзиткә үҙ халҡыбыҙ, республикабыҙ өсөн ышанысла дуҫ булып ҡалыуын теләйем, ә гәзит уҡыусыларҙы ошо абруйлы баҫманан айырылмаҫҡа өндәйем.

**Ғәзим СОЛТАНҒОЛОВ.**
**Бөрйән районы.**

*ИҒТИБАР!*

## МӨХТӘРӘМ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!




**1 декабрҙән 11 декабргә тиклем арзан хаҡҡа 2017 йылдың тәүге яртыһы өсөн "Киске Өфө"гә яҙылыу ун көнлөгө иғлан ителә. Ошо арауыҡта республикабыҙ ауылдарында һәм ҡалаларында йәшәүсе һәр кем ДО665 индекслы гәзитебеҙгә - 409 һум 26 тингә, ДО673 индекслыһына (предприятиелар һәм ойошмалар өсөн) - 439 һум 26 тингә, Бөйөк Ватан һуғышы ветерандары һәм I һәм II төркөм инвалидтары 369 һум 42 тингә яҙыла ала.**

Белеүегеҙсә, гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакциябыҙға ебәргән уҡыусыларыбыҙ даими рәүештә беҙҙең бүләктәргә лайыҡ була килә. Декабрҙә 2017 йылдың тәүге яртыһы өсөн "Киске Өфө"гә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргәндәрҙән бер кеше **"Антология поэзии Башкортостана"**, 2 кеше **Рәшит Назаровтың "Ер һәм Йыһан йыры"**, 1 кеше **Ноғман Мусиндың "Алдар батыр"**, 1 кеше **Әхмәр Үтәбайҙың "Сәхрә"**, 2 кеше **Рәйес Түләктең "Мең дә икенсе кис..."**, 3 кеше **"Бураҡаевтар ижады"**, 10 кеше **Гүзәл Ситдиҡованың "Йәннәт баҡсаһы"**, 10 кеше 2017 йылға **"Башҡортса дини календарь"**, 10 кеше **"Шайтан хәйләләре"** һәм тағы ла башҡа китаптарға лайыҡ буласаҡ.

**Әйҙәгеҙ, кем алыҡ!**

12+

БАШ ҠАЛАМ

# ҺӘЙКӘЛДӘРҘӘ...
## рухыбыҙ сағылһын

**Бер нисә йыл элек кенә Өфөлә, республикала башҡорт донъяһын сағылдырған урындар юҡ тип әйтерлек ине. Бөгөн, шөкөр, яйлап ҡына шәхестәребеҙгә һәйкәлдәр, башҡа милли объекттар күренә башлауы ҡыуаныслы.**



Мәҫәлән, хәҙер Мәжит Ғафури исемендәге скверҙа 3х5 метр дәүмәлендәге "Асыҡ китап" һәйкәле ошо ҡасабаның бер биҙәге булып тора. Уға Башҡортостандың халыҡ шағиры Мәжит Ғафуриҙың "Үҙем һәм халҡым" шиғырының дүрт юллығы рус һәм башҡорт телдәрендә яҙылған:

*Бер аҙым алға баҫам да,*
*Әйләнәм мин артыма.*
*Ҡайҙа баҫҡандар икән тип,*
*Күҙ һаламын халҡыма.*

Был юлдар, аҡыллыға - ишара, тигәндәй, ҡала етәкселегенә генә түгел, һәр ҡайһыбыҙға киҫәтеү ҙә булып торғандай: үҙеңде генә уйлама, халҡың хәстәрен дә иңеңә ал.



Шулай уҡ Комсомол - Урман техникумы урамдары сатында атын йүгәнenән тотҡан милли кейемле башҡорт һыны урынлаштырылған.

Һәйкәлдең авторы Хәлит Ғәлиуллин әйтеүенсә, проектты эшләргә башҡорт эпостары этәргес биргән. Скульптор һындарҙы бер ай дауамында быяла пластиғынан яһаған һәм бронза төҫөнә буяған. Тиҙҙән ул Аҡбуҙатҡа һәм балалы инә айыуға һәйкәл башларға ниәтләй. Уның икенсе ат һыны Октябрь проспекты һәм Шафиев урамы сатында ла үҙенең лайыҡлы урынын тапты.

Бындай художество өлгөләре ябай ғына булһа ла, әйтерһең дә, рухты күтәреп, милли сығышыңды онотмаҫҡа саҡырып тора.

**ӘЙТКӘНДӘЙ...**

**Баш ҡаланың Совет районында, "Үҙәк баҙар" туҡталышы эргәһендә "Ҡурайсы" тип аталган яңы артобъект, моғайын да, күптәрҙең иғтибарын үҙенә йәлеп иткәндер. Ул ағас аҫтындағы ташҡа ултырып ҡурай уйнаусыны кәүҙәләндерә ине. Йәйгеһен, йәшеллек уратыуында ул күркәм генә бер күренеште хасил итте итеүгә. Әле ул тимерсыбыҡтарҙан торған һөлдә булып ҡына ҡалған. Ни өсөндөр баш ҡалала ҡурайсы образы йә яланғас малай, йә ошондай осһоҙло объектҡа ғына лайыҡ һимаҡ тойола башлай. Башҡорт халҡының бренды булған ҡурайға һәм ябай ғына үләндән дә донъяла тиңе булмаған көй сығарған ҡурайсыға баш ҡалабыҙҙа һәйкәл торһа, ҡалай дан булыр ине...**

**Земфира ХӘБИРОВА.**

КИЛЕШМӘЙЕМ!

# ЭҪЕ ҺЫУЫҢ ҠАЙНАРМЫ?



**Әйтергә лә түгел, мәрәкә заманда йәшәйбеҙ. Һау булһаҡ, тағы ниҙәр күрербеҙ - униһын юғарыла ғына беләләр.**

Ябай халыҡтың тағы ла ҡайһы еренән аҡса һығырға белмәгән юғары кәнсәләр хәҙер беҙҙең ванна-туалет булмәләренә лә күҙ һала башланы. Унитазға һыу биреүҙе махсус режимға күсереү хаҡында һүҙ барыуын-бармай әлегә, әммә ләкин ваннала йыуынғанда хәҙер плитәлә бер-ике бак һыу йылытып, өҫтәй башларға ла тура килеүе бар, сөнки халыҡ мәнфәғәтен яҡлаусы булараҡ эшләргә тейешле Роспотребнадзор тигән ведомство, киреһенсә, беҙҙең йорттарға килеүсе эҫе һыу температураһын 10 градусҡа кәметеп, 50 градус итеп бирҙермәксе булып ята, имеш. Был хаҡта уның матбуғат хеҙмәтенә һылтанып, "Рәсәй Яңылыҡтар агентлығы" хәбәр итте. Ә Роспотребнадзорға был идеяны күтәреп сығырға РФ Һаулыҡ һаҡлау министрлығы "добро" биргән, йәнәһе. Әй, ҡыҙыҡ та инде, әйтергә лә түгел: юғары кәнсәләрҙәге күпме чиновниктың кеҫәһенә инеп ятасаҡ был экономия! Ябай халыҡ детектив ҡараған һимаҡ күҙәтә түрәләрҙең бындай коррупция ығы-зығыһын. Хәҙер бер ни ҙә гәжәпләндермәй, ярһытмай беҙҙе, тамам күнектек бит. Тик йәл: "кина не будет", ахыры, кем әйтмешләй. Сөнки әле килеп, Һаулыҡ һаҡлау министрлығы Роспотребнадзорҙың был идеяһын яҡламауын белдерҙе.

Баш менән уйлап ҡараһаң, был бик етди мәсьәлә икән дә. Бөтөн донъя һаулыҡ һаҡлау ойошмаһы, киреһенсә, ваҡыт-ваҡыты менән торбалағы эҫе һыу температураһын хатта ки 70 градусҡаса еткереп алырға тәҡдим итә. Бындай шарттарҙа торбаларҙа ояланған патоген микроорганизмдар, айырыуса легионелла исемле әшәке микроб шундуҡ һәләк була икән. Хатта 60 градусҡа ла сыҙамай, тиҙәр. Ә кеҫә ҡайғыртыусы түрәләр был хаҡта уйламай. Ә бәлки, наҙанлыҡтары шул тиклемдер: был хаҡта белмәүҙәре лә ихтимал. Ҡайнар һыуға 10 градус эҫелекте биреп еткермәү коммуналь тарифтарҙы 15-18 процентҡа кәметергә мөмкинлек бирә ул биреүгән, тик был беҙҙең, ябай халыҡтың, түләү ҡағыҙҙарына ғына инмәйәсәк. Киреһенсә, кеше эҫе һыуға талаптарын тейешле кимәлгә еткереү өсөн йылытыу приборҙарын эшкә ҡушасаҡ, ә был газ һәм электр энергияһы ҡулланыуҙы тағы ла арттырасаҡ ҡына.

Әйткәндәй, әлеге ваҡытта ла беҙҙең торбанан аҡҡан эҫе һыуҙың ҡайнарлығы, дөрөҫөн әйткәндә, санитар талаптарға тап килеп бөтмәй һәм 50 градустан артмай, ти белгән кешеләр. Үлсәп ҡараған юҡ, ләкин бынан һуң термометр һатып алырға тура килер: бөгөн беҙгә һәр йәһәттән мәғлүмәтле, аң булырға кәрәк. Шул уҡ ваҡытта аңлы булыу ҙа ҡамасауламаҫ. Үлсәлә, тейешле температура юҡ икән - тикшерт, саҡырт, акт төҙөт. Шул саҡта, бәлки, түләү ҙә кәмерәк килер, торлаҡ-коммуналь хужалыҡ системаһы ла башын мутлыҡҡа тыға алмаҫ ине. Ҡулыбыҙҙан килгәнде эшләмәгәс, беҙҙе көндән-көн нығыраҡ алдайҙар, йүләргә һанайҙар. Йә, шуның менән килешеп йәшәй бирәбеҙме инде хәҙер?..

**Әйткәндәй, гәзитте баҫырға әҙерләгәндә, беҙгә шундай хәбәр килде: Рәсәй Премьер-министры Д. Медведев әлеге мәсьәләгә ҡәтғи мөнәсәбәтен белдереп: "Бындай ҡарарҙың булғаны юҡ. Бәхәс тамам, кешеләрҙе тынысландырығыҙ - һыу эҫе генә түгел, ҡайнар булырға тейеш!" - тип белдерҙе. Бик мәслихәт!**

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР

# ХАЛЫҠ РИЗАЛЫҒЫ МЕНӘН...



Бер ауылда йыйылыш бара. Районда килгән власть вәкиле һүҙ ала:

- Балалар һаны кәмеү сәбәпле, ауылығыҙ мәктәбе ябыла. Юғары даирәләрҙә шулай ҡарар ителде, шуның өсөн һеҙҙең ҡаршы булыу-булмау иҫәпкә алынмай. Әйҙәгеҙ, тауыш бирәйек - кем дә кем ошо ҡарар менән риза, ҡулдарын күтәрә...

Халыҡ дәррәү ҡул күтәрә. Араларынан, исмаһам, береһе:

- Юғарыла хәл ителгәс, ниңә халыҡ ҡул күтәреп тауыш бирергә тейеш һуң? - тип һораһасы!

Ә теге документҡа мотлаҡ "Халыҡ ризалығы менән мәктәп ябылды", тип яҙып ҡуйыласаҡ бит инде. Сөнки бөгөн күп документтар "Халыҡ ризалығы менән" тигән һүҙҙәр менән мөһөрләнә. Тимәк, халыҡ фекере иҫәпкә алынырға тейеш икәнлеге закон менән нығытылған булып сыға түгелме? Мәктәп ябылғанда ла, мәҙәниәт йорто "ҡыҫҡартылғанда ла", ниндәйҙер төҙөлөш эштәре атҡарыр алдынан да, ниҙеләр емерергә кәрәк булғанда ла халыҡ ризалығын алыу беренсе шарт булып тора бит закон буйынса. Ошо хаҡта мыйыҡҡа урап ҡуйыйыҡ әле, йәмәғәт...

**Гөлбаныу ГӘРӘЕВА.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Өфөлә Башҡортостан Дәүләт Йыйылышының 35-се ултырышы булып үтте. Көн тәртибенә 59 мәсьәлә индерелгән, шуларҙың 28-е - республика закондары проекты. Ултырыш мировой судья вазифаларына кандидатуралар ҡарауҙан башланды. Пленар ултырыштың көн тәртибенә Дәүләт Йыйылышының Дәүләт Думаһына закон сығарыу башланғысы тураһындағы ҡарар проекты индерелгән. Новелла "Выждан ирреклеге һәм дини берләшмәләр тураһында"ғы Федераль законға һәм Административ хоҡуҡ боҙоуҙар тураһындағы кодексҡа үҙгәрештәр индереүҙе күҙ унында тота.

✓29 ноябрҙә Республика йортонда Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов "Халыҡ фронты - Рәсәй өсөн" Дөйөм Рәсәй йәмәғәт хәрәкәтенең төбәк штабы рәйестәштәре Эльвира Айытколова, Азат Фазлыев һәм Надежда Крылова, шулай уҡ Дөйөм Рәсәй халыҡ фронтының төбәк бүлексәһе башҡарма комитеты етәксеһе Виталий Брыкин менән осрашты.

✓Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов менән осрашыуҙа Дөйөм Рәсәй халыҡ фронтының төбәк бүлексәһе башҡарма комитеты етәксеһе Виталий Брыкин тораҡ пункттар янындағы законһыҙ сүплектәр менән бәйле хәл тураһында һөйләне һәм Экология йылы тип иғлан ителгән 2017 йылда бындай сүплектәрҙән ҡотолоу буйынса республика программаһын әҙерләргә тәҡдим итте. Быны өсөн аҡсаны тирә-йүнде бысратҡан предприятие һәм ойошмаларҙың штраф түләүҙәренән йүнәлтергә мөмкин. Дөйөм Рәсәй халыҡ фронты иҫәпләүҙәре буйынса, был йылына яҡынса 400 миллион һум тигән һүҙ.

✓Башҡортостан Республикаһы Башлығы Рөстәм Хәмитовтың Указы менән Владимир Нагорный Башҡортостан Башлығы Хакимиәте етәксеһе итеп тәғәйенләнде. Рөстәм Хәмитовтың икенсе Указы менән Сергей Молчанов, икенсе эшкә күсеү сәбәпле, Башҡортостан Башлығы Хакимиәте етәксеһе вазифаһынан бушатылды.

✓Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитовтың Указы менән Ильяс Мөниров Башҡортостан Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары итеп тәғәйенләнде. Ул 2010-2016 йылдарҙа Башҡортостандың Транспорт һәм юл хужалығы буйынса дәүләт комитеты рәйесе булып эшләгәйне.

*✓ Атай баһаһын күтәреүсе, ир кешегә йәшәүгә, эшләүгә дәрт өҫтәп тороусы ла, ғөмүмән, ғаиләне тотоп тороусы, ирен хур итмәй, ҙур итеүсе - ҡатын, әсәй кеше.*



УЙЛЫҒА - УЙ

**Бала саҡта әсәйемдән ишетеп үҫкән мәҡәл-әйтемдәрҙең намыҫыма иң ныҡ тейгәне "Кем эшләмәй, шул ашамай" тигәне була торғайны. Бөтәһе лә ашъяулыҡ тирәләй ашарға йыйылған ваҡытта, ялҡаулығым, булдыҡһыҙлығым арҡаһында, туғандарымдың ашағанын мөлдөрәп, ситтән ҡүҙәтеп торам кеүек күреп, сикһеҙ гәрләнә, ояла торғайным. Үҫә төшкәс, әсәйемдең "боронғолар һүҙе" тип ҡулланған фәһемле һүҙҙәре байый барҙы, ни өйрәтһә лә, һүҙҙәрен һәр ваҡыт мәҡәл-әйтемдәр менән йомғаҡлап, иҫтә ҡалырлыҡ итеп нығытып ҡуйыр ине. Бала саҡ хәтирәләремдең барыһы ла мәҡәләмдең маҡсатына ишара: халҡыбыҙҙың тормош тәжрибәһе кеүек, ауыҙ-тел ижады ла ифрат бай, бала тәрбиәләүҙә уның әһәмиәте баһалап бөткөһөҙ.**

# ИР КҮҢЕЛЕ - БЫЯЛА, ТӨШӨП КИТҺӘ, ЫУАЛА

Юғарыла әйткәнемсә, йәшебеҙ арта барған һайын, әсәйемдең мәҡәл-әйтемдәре лә йәшебеҙгә тура килерлек етдиерәк була бара. "Барыр булмаһағыҙ, егеттәрҙе ымһындырып йөрөмәгеҙ, ир күңеле - быяла, төшөп китһә, ыуала, ә ҡатын күңеле - ҡарындыҡ, күпме һуҙһаң да, ыуалмай ҙа, йыртылмай ҙа ул", тип, ир-егеттәргә ҡарата ихтирам, иғтибар һәм улар абруйын һаҡлауҙы талап итер ине. Ашъяулыҡ янына атайҙан алда килеп ултырыу, урамда ир-аттың юлын ҡыйып үтеү, ир-егет алдына төшөп хәбәр һөйләү боронғолар өсөн оло әҙәпһеҙлек һаналды. Ир-ат алдында ғына түгел, ғөмүмән, әҙәпһеҙ хәбәр һөйләү, кешенең кәмселегенән көләү - тәрбиәһеҙлек билдәһе булып, оло гонаһҡа иҫәпләнде. Был юлдарҙы бәйән иткәндә мин ғаилә тәрбиәһен генә түгел, дөйөм йәмғиәттәге ир-атҡа булған ҡарашты, көслө зат тип иҫәпләнгән ир-егеттәребеҙ холҡондағы сәйер үҙгәрештәрҙә ҡатын-ҡыҙҙың да роле барлығын күҙ унында тотам. Инсафлы ҡыҙ янында егет үҙен һәр ваҡыт контролдә тота, был аксиома, ә тәмәке тартып тороусы "гүзәл" зат менән ҡушылып тәмәке төтәтһә лә, көләш итеп алырға ашыҡмай. Күрәһең, шул ашыҡмауҙан (ашыҡмауҙың да сәбәптәре ҡатын-ҡыҙға бәйләнгән, тимәксемен) килеп сығылыр ҙа инде "гражданский брак" тигәндәре. Тәбиғәт үҙенекен итә, тыныс ҡына йоҡларға ла, ашарға әҙерләүсе, кейем-һалымыңды йыуыусы ла кәрәк бит. Ир-ат та әҙәм балаһы.

- Дәә, ирҙәр кәпәсен кейә башланы бит был ҡатын-ҡыҙ, салбарҙарын да һалдырып алдылар. Ир-атҡа өйләнергә маташа түгелме былар? Донъялар болара күрмәһен инде! - тип борсолоп һөйләшеп ала торғайны йыйылышҡан саҡтарында беҙҙең быуын әсәйҙәре ҡайсаҡ. Әсәйем, ғәҙәттәгесә, ир күңелен быяла менән тиңләп, уның ҡоршап булмаҫ-



лыҡ хәлгә килеүен иҫкәртеп тороусан булды.

Ул ваҡытта әсәйемдең әйткәндәрен беҙгә, үҙ ҡыҙҙарына, ҡәтғи талабы итеп кенә ҡабул итһәм дә, йылдар үткәс, был алтын һүҙҙәрҙең айышына инанасағымды белмәй инем әле. Тыуған ауылыма ҡайтып, ваҡытында өйләнә алмай ҡалған 40-50 йәштәрҙәге "егеттәрҙе" күргән һайын: "Заманында быларҙың быяла күңелдәрен дә ыуалтыусылар булғандыр, юғиһә, ҡыҫҡа ғына ғүмерҙе ғаиләһеҙ, атай булыу бәхетенән мәхрүм булып, былай аҙыптуҙып йөрөмәҫтәр ине",- тип, йөрәгем әрней. Иң әсендергәне лә шул: улар бергәү-икәү генә түгел, тиҫтәләгән. Һәр яҙмыш артында, бер ҡарауға, ябай ғына тарих - төрлө сәбәптәр арҡаһында егет һөйгәненән айырылған. Шуныһы ла гәжәп: һөйгәненән тороп ҡалған ҡыҙ үҙенә барыбер ишен таба, ғаилә ҡороп, уныһы шул ғына йәшәп китә, ә егет ғүмерлеккә яңғыҙ ҡала. Был әсе хәҡиҡәт тә ир-егеттең былайлай күңеленә ҡарата бөгөнгө ҡатын-ҡыҙҙарға ла һаҡ булыуға ишара, минеңсә. Ошоға тиклем мәҡәлдәрҙең беҙҙе иҫкәртеү көсөнә әйә булыуы тураһында уйланғаным юҡ ине әле. Һуңғы ваҡытта ғына күҙ алдымда тарҡалған ғаиләләрҙең бөтәһенең дә айырылышыу сәбәптәре - йәш килен үҫкән ғаиләлә ир-аттың дәрәжәһен, күңел торошон һанламауҙан. Ҡыҙ бала үҫтергән әсәй кеше балаһын йәштән: "Ир күңеле - быяла, төшөп китһә, ыуала" тип, был мәҡәлдең мәғәнәһен төшөндөрөп үҫтерһә, сабырлыҡ та, уның менән бергә бәхет тә үҙенән-үҙе килер, минеңсә.

Ошо урында атайым мәрхүмдең һүҙҙәрен дә иҫкә төшөргә килә: "Тәүфиҡлы булһағыҙ, бәхет үҙе эҙләп килер. Иманлы, тәүфиҡлы булығыҙ. Иман нигеҙе - тәүфиҡ", - тип ҡабатларға яратыр ине. Ғаиләлә ир-егеттәргә ҡарата ихтирам, ололау, сабырлыҡ тәрбиәләүсе, булған һайын бүтәгәнән тәпәш булырға өйрәтеп торған әсәй булғанда, яңғыҙаҡтар ҙа аҙыраҡ булыр һәм айырылышыуҙарға ла урын булмаҫ, моғайын.

Ысынлап та, ҡатындарҙың ирҙәр психологияһын белмәүенән генә түгел, ә үҙен уларҙан өҫтөнөрәк күрергә теләүенән, шул арҡала ирҙе һанға һуҡмауынан айырылышыуҙар йышайҙы һуңғы ваҡытта. Мин белгән тәүге ғаиләнең юҡҡа сығыуы килен кешенең: "Аҡса етмәй. Минекеләр күберәк ярҙам итә, һинекеләр ярҙам итмәй", - тип, туғандарҙы "минеке, һинекеләр"гә бүлеп, көнө-төнө ғаиләм тип эшләп йөрөүсе ирен өҙләкһеҙ игәп тороуынан булһа, икенсеһе: "Урамда йөрөп килерлек мөмкинлегем дә юҡ. Бала ҡарашырға ла эшкинмәйһең", - тип алыҫ рейста аҙналар буйы йөрөгән иренә туҡтауһыҙ зарланып, мыжыуынан килеп сыҡты. Йәш ҡатындың вахтанан ҡайтыусы ирен һәр ваҡыт иҫерек ҡаршылауы арҡаһында өсөнсө ғаилә лә тарҡалды. Эшлекле, ғаиләһе өсөн әҙәлөп торған был ир-егеттәр ҙә, нишләп кенә өйләндем икән, тип уйламағандыр тимә! Өйләнмәй йөрөүсе егеттәргә был "өлгө"нөң тәьҫире тағы ла ҡурҡыныслыраҡ. Егеттәрҙең, өйләнгәс, донъя көтөрлөк ҡыҙҙар юҡлығына баҫым яһауы - ир-ат халҡының да (әлбиттә, ата ялҡау булмаһа) тормош көтөүгә ихласлығы, етди булыуы тураһында һөйләүсе миҫалдыр.

"Үҙе йығылған иламаҫ. Мин һеҙҙе көсләп кейәүгә бирмәнем. Ваҡ-төйәк ғаилә хәбәрегеҙҙе миңә алып килеп һөйләп йөрөмәгеҙ. Ҡашығаяҡ шалтырамай булмаҫ. Ирҙе ир итеп йөшәһән генә, ир була ул. Ирҙе әсендергән генә түгел, һыуындырған да үҙең. Ир бирмәк - йән бирмәк. Барған күлегеҙҙә таштай-ҡомдай батығыҙ!"- ҡыҙҙарын кейәүгә оҙатыр алдынан әйтелгән әсәйемдең был ҡәтғи талабы беҙ, ҡыҙҙары өсөн, закон ине. Тормошта төрләһән күрҙек, кисерҙек, әммә беребеҙ ҙә әсәйебеҙ аманатына хыянат итмәнек. Мин был юлдар менән ғаиләлә әсә кешенең роле ҡатын-ҡыҙ, әсәй, остаз буларaҡ, баһалап бөткөһөҙ икәнен әйтмәксемен. Ҡатын кеше - ғаилә тотҡаһы, тип юҡҡа ғына әйтмәйҙәр. Минең фекеремсә, бала тәрбиәләүҙә атай кеше ҡылыҡ-фиғеле менән генә өлгө булһа, әсәй кеше психолог та, филолог та, дипломат та була белергә тейеш. Атай баһаһын күтәреүсе, ир кешегә йәшәүгә, эшләүгә дәрт өҫтәп тороусы ла, ғөмүмән, ғаиләне тотоп тороусы, ирен хур итмәй, ҙур итеүсе - ҡатын, әсәй кеше. Ир-аттың үҙен тәртипле, ҡыйыу, ихтирамлы ир-егет итеп тойоуы өсөн берҙәнбер сара - ул эргәһендәге аҡыллы, сабыр, итәғәтле ҡатын-ҡыҙ.

Заманалар үҙгәрә тора, әммә боронғолар һүҙенең бәҫе юйылмай, киреһенсә, бөгөнгө көндә уның көсө арта ғына барған кеүек тойола миңә. Әсәйем үҙенән алда йәшәүселәрҙең алтын аҡылына хайран ҡалып, "боронғолар һүҙе" тип һоҡланып һөйләһә, хәҙерге быуынға ла ата-бабаларыбыҙҙан ҡалған тәрбиә ысулдарына һоҡланмау мөмкин түгел.

Әйткәндәй, мәҡәләмде яҙып бөткәс, үҙемде ҡасандан алып борсоған проблеманы хәл иткәндәй булып, урамға сыҡтым. Боролошта элекке уҡыусым Эльмираны осратыуыма шатланып та өлгөрмәнем: "Кисә генә мин һеҙҙең турала иремә һөйләнем", - тигәс, юғалып ҡалдым. Йөҙөмә сыҡҡан аптырауымды, ҡурҡыуымды абайлаған уҡыусым: "Һеҙ өйрәтә торғайнығыҙ бит әле "Ир күңеле - быяла, төшөп китһә, ыуала", тип. Шул турала", - тигәс кенә әсемә йылы йүгерҙе. Йә, Хоҙай! Ошо яҙғандарымды уҡып, боронғолар һүҙен тотоп, фәһем алыусы йәш килендәр, ҡыҙ үҫтереүсе әсәйҙәр артһа, бәлки, тормошобоҙ тағы ла йәмлерәк булыр ине. Иң мөһиме: айырылышыуҙар кәмер, тере етемдәр булмаҫ ине. Амин.

**Нәзиә БИКБОВА,**
**Башҡортостандың атҡаҙанған уҡытыусыһы, хеҙмәт ветераны.**
**Сибай ҡалаһы.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓1 декабрҙә Владимир Путин Федераль Йыйылышҡа йыллыҡ Мөрәжәғәтнамә менән сығыш яһаны. Был - Рәсәйҙең яңы тарихында 23-сө һәм Путин өсөн 13-сө Мөрәжәғәтнамә.

✓Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитовтың Указы менән Рим Ғиләжетдинов республиканың Транспорт һәм юл хужалығы буйынса дәүләт комитеты рәйесе итеп тәғәйенләнде.

✓БР Башлығы Рөстәм Хәмитов һәм Рәсәй Ҡулланыусылар йәмғиәттәренең үҙәк союзы советы рәйесе Дмитрий Зубов хеҙмәттәшлек тураһындағы килешеүгә ҡул ҡуйҙы. Документ Башҡортостандың Ҡулланыусылар кооперацияһын үҫтереүгә йүнәлтелгән. Ул халыҡтың социаль-иҡтисади яҡланғанлығын һәм хеҙмәтләндереү сифатын күтәреүгә, шәхси ярҙамсы һәм фермер хужалыҡтарын үҫтереүгә булышлыҡ иткән шарттар булдырыуға күҙ уңында тота.

✓"Башҡортостан" дәүләт концерт залында "Юлдаш" радиоһы "Йыл йыры-2016" лауреаттарын билдәләне. Гала-концертта башҡорт эстрадаһының 30-ҙан ашыу йәш йондоҙо сығыш яһаны. Был кисҭә радио тыңлаусылар үҙҙәре һайлаған йырҙар яңғыраны. Финалсыларҙың барыһы ла "ЮлдашХит" статуэткаһы менән бүләкләнде. Юлдаштар тамашасыларҙы ла буш ҡалдырманы: "бәхетле" билеттарға эйә булғандар төрлө бүләктәр алды.

✓1 декабрҙә Өфөлә Бөтә донъя СПИД-ҡа ҡаршы көрәш көнө уңайынан "Үҙеңдең ВИЧ-статусыңды бел" темаһына "ҡыҙыу бәйләнеш" ойошторола. Унда ВИЧ-инфекцияны йоҡтороу юлдары, ВИЧ-ты асыҡлау өсөн бушлай ҡан бирергә мөмкин булған хеҙмәттәрҙең һәм үҙәктәрҙең адрестары, ВИЧ-инфекцияға ҡаршы көрәш һәм уны дауалау алымдары, ғаиләлә инфекцияны иҫкәртеү, сирлеләргә психологик ярҙам хаҡында белергә мөмкин. "Ҡыҙыу бәйләнеш" телефоны: (347) 223-22-11, көндөҙгә сәғәт 2-нән киске 5-кә тиклем шылтыратырға мөмкин.

✓Өфөлә ШОС һәм БРИКС илдәре төбәктәренең II бөләкәй эшҡыуарлыҡ форумы үтә. Унда илдең 30 төбәгенән һәм 10 ШОС һәм БРИКС илдәренән меңгә яҡын кеше ҡатнаша. Ойоштороусылар әйтеүенсә, Рәсәй эшҡыуарҙарының сит илдәге партнерҙар менән төбәк-ара хеҙмәттәшлеген үҫтереү өсөн яҡшы мөхит булдырыу, ШОС һәм БРИКС илдәре тауарҙары һәм хеҙмәттәре баҙарын ойоштороу мөмкинлеге Өфөләге фекер алышыуҙың төп темалары буласаҡ.

**"Башинформ"дан.**

✓ Быйыл "Ватан" паркы ысын әкиәт донъяһына әүереләсәк. Унда һырғалаҡ, тауҙар, концерт майҙансығы һәм Ҡыш бабай тирмәһе буласаҡ."Һоҡланғыс Башҡортостан-2017" проекты сиктәрендә төбәктә ошондай биш тирмә асыла.



ҠЫҪҠАСА...

# ӨФӨБӨҘГӘ ҠАСАБАЛАР ӨҪТӘЛӘ

✓ Башҡортостанда халыҡ дружинниктары өсөн социаль түләүҙәр ҡаралған. Был мәсьәлә республика Хөкүмәте ултырышында тикшерелде. Халыҡ дружинниғы һәләк булған осраҡта уның ғаиләһе 250 мең һум күләмендә аҡса ала. Әгәр ул хеҙмәт бурысын үтәгәндә яраланһа, түләүҙең күләме 125 мең һум тәшкил итә. Аҡса республиканың резерв фондынан түләнә, тип хәбәр иттеләр Башҡортостан Хөкүмәтенең матбуғат хеҙмәтендә. Бөгөн төбәктә 300-ҙән ашыу халыҡ дружинаһы иҫәпләнә, уларҙа ете мең самаһы кеше ағза булып тора. Быйыл уларҙың ярҙамы менән 117 енәйәт асылған. Республикала хеҙмәт бурысын үтәгәндә халыҡ дружинниктары менән фажиғәле осраҡтар теркәлмәгән.

✓ Ағиҙел йылғаһы ярында яңы 33 торлаҡ кварталы барлыҡҡа киләсәк. Ҡала округы Советы депутаттары Ленин районында ошо мәсьәлә буйынса халыҡ менән осрашып, асыҡ тыңлауҙар үткәргән. Проектланыусы территорияның дөйөм майҙаны 450 гектар тәшкил итә. Бында 9-25 ҡатлы 68 күп фатирлы йорт төҙөү планлаштырыла. Яңы бистәлә 5 меңдән ашыу балаға иҫәпләнгән 6 мәктәп, 1500 бала һыйҙырышлы 8 балалар баҡсаһы һәм башҡа заманса объекттар төҙөү күҙаллана. Шулай уҡ Ағиҙел буйында төҙөкләндерелгән пляж буласаҡ. Йылға аша Нижегородка яғына сығыу өсөн күпер төҙөләсәк.

✓ Ҡала властары Октябрь революцияһы урамының тарихи йөҙөн һаҡлап ҡалырға ниәтләй. Был урамдың бер өлөшө бөгөн иң популяр экскурсия маршруты булып һанала, әммә унда транспорт көсөргәнеше экскурсияларҙы үткәреүҙе йылдан-йыл ҡатмарлаштыра. Әлегә проект тураһында ентекле мәғлүмәт хәбәр ителмәй, әммә ул Башҡортостандың 100 йыллығына тулыһынса тәртипкә килтереләсәк һәм был эшмәкәрлеккә эре, урта һәм бәләкәй бизнес вәкилдәре, инвесторҙар йәлеп ителәсәк.

✓ Йыл аҙағына тиклем Башҡортостанға тағы ла 17 тиҙ медицина ярҙамы күрһәтеү автомобилдәре ҡайтарыла. Рәсәй Хөкүмәте Рәйесе Дмитрий Медведев тиҙ ярҙам машиналарын һатып алыуҙы өҫтәмә финанслауҙы раҫланы. Бойороҡҡа ярашлы, Рәсәй Сәнәғәт һәм сауҙа министрлығына автомобилдәр һатып алыу өсөн өҫтәмә рәүештә миллиард һум аҡса бүленә. Һөҙөмтәлә 44 төбәккә тағы ла 477 тиҙ ярҙам машинаһы ҡайтарыла. Быйыл Башҡортостан 38 ашығыс ярҙам автомобиле алды. Автомобилдәр заманса стандарттарҙы иҫәпкә алып эшләнгән, ГЛОНАСС системаһы, кондиционерҙар, сигнал-тауыш көсәйтеү ҡоролмаһы ҡуйылған, яһалма тын алдырыу, дефибриллятор, электрокардиограф һәм тиҙ медицина ярҙамы күрһәтеү өсөн башҡа ҡорамалдар менән йыһазландырылған.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# ТОРЛАҠЛЫ БУЛЫУ БӘХЕТ ТӘ БИТ...



**Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов республика Хөкүмәтенең ултырышын үткәрҙе. Сара 2025 йылға тиклем Торлаҡ шарттарын яҡшыртыуға мохтаждарҙы торлаҡ биналар менән тәьмин итеү буйынса программаның концепцияһын тикшереүгә арналды.**

- Торлаҡ мәсьәләһе күптәр өсөн тәүге урында тора. Был - иң мөһиме, бигерәк тә ҡала халҡы өсөн. Беҙҙә 90 мең самаһы ғаилә иҫәпкә алынған, һәм йыл һайын яҡынса өс проценты ғына торлаҡ шарттарын яҡшырта. Сират кәмемәй, - тине төбәк етәксеһе. - Ошо мәсьәләне хәл итеү өсөн беҙгә аҙ тәьмин ителгән граждандар өсөн льготалы кредитлау йәки сығымдарҙың бер өлөшөн ҡаплау сараларын ҡарау зарур.

Башҡортостан Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары Владимир Нагорный белдереүенсә, 2016 йылдың 1 ноябренә 89 меңдән ашыу ғаилә торлаҡ шарттарын яҡшыртыуға сиратта тора. Сиратты кәметеү өсөн 4,5 миллион квадрат метр социаль торлаҡ төҙөргә кәрәк. Әлеге темптар менән барғанда ошо бурысты үтәү 25 йылға һуҙылыуы ихтимал. Республика Хөкүмәте эште бер нисә этапта ойоштороорға тәҡдим итә. Беренсе этапта (2017-2021 йылдар) - 2,3 миллион квадрат, икенсеһендә (2021-2025 йылдар) тағы ла 2,2 миллион квадрат метр торлаҡ төҙөү ҡаралған.

Башҡортостан Башлығы торлаҡ төҙөү өсөн бюджет аҡсаһын һаҡсыллыраҡ тотонорға һәм торлаҡ төҙөлөшө өсөн аҡса туплау программаһын әүҙемерәк индерергә саҡырҙы. Ул яңы торлаҡ программалары буйынса халыҡ араһында аңлатыу эштәре алып барырға ҡушты.

# ЕР УБЫЛДЫ...



**Төрлө хәрәфәттәргә ышаныусылар булһа, был күренеште мотлаҡ ниндәйҙер ҡара көстәр һәм башҡа шундай ырымдарға бәйләр ине. Сөнки Өфөлә ошо көндәрҙә генә ысын мәғәнәһендә ер убыла, йәғни Интернациональ урамында парковкаланған автомобиль кешеләрҙең күҙ алдында ер аҫтына төшөп юғала.**

Шаһиттар белдереүенсә, был урын шунда уҡ һыу менән тула, ә инде килгән ҡотҡарыусылар машинаны сығара алмай. Был осраҡтан һуң баш ҡаланың Һупайлы биҫтәһендәге Гагарин урамы, 24 адресы буйынса ла түңдә ер емерелеп төшә. Рәсми тикшереүҙәр был осраҡта төп сәбәпте һыу торбаларының ярылып, һыу ағыуы һәм ул аҫтан яйлап ҡына ерҙе ашауы - йыуыуы менән бәйләй.

Сираттағы оператив кәңәшмәлә Өфө ҡала хакимиәте башлығы Ирек Ялалов белдереүенсә, ҡалала карст ҡатламы убылыуы һөҙөмтәһендә йылына шундай 10-12 осраҡ булып тора. Торлаҡ йорт эргәһендәге бындай осраҡ - әлегә беренсе тапҡыр күҙәтелгән.

Ирек Ишмөхәмәт улы белдереүенсә, Интернациональ урамындағы соҡорға 400 кубометр самаһы балсыҡ һалынған, шулай уҡ яуаплы хеҙмәттәргә ул ошо территориянан 300 метр радиуста тикшереү үткәреү, шундай осраҡтарҙа кешеләр үҙен нисек тоторға тейешлеге тураһында иҫкәрмә эшләү бурысын йөкмәткән. Тиҙҙән баш ҡалала территорияның карст яткылыҡтары картаһын яңыртыу буйынса инженер-геологик тикшеренеүҙәр башланасаҡ. Бөгөн ҡулланылған карта иһә бынан 20 йыл элек эшләнгән һәм ҡала төҙөлөшө әле уның ингеҙендә алып барыла. Ә инженер-геология тикшеренеүҙәренең заманса ысулдары Өфө территорияһында карст яткылыҡтарының торошо тураһында ентекле һәм аныҡ мәғлүмәт алырға ярҙам итәсәк.

# ТӘРТИП ҺАҠЛАНА...



**Муниципалитетта Хоҡуҡ боҙоуҙарҙы профилактикалау буйынса ҡала ведомство-ара комиссияһының сираттағы ултырышы үтте. Көн тәртибенә ҡалалағы енәйәтселек торошо, уны кәметеү буйынса эшмәкәрлек һәм урамдарҙа, йәмәғәт урындарында енәйәт ҡылыуҙы профилактикалау мәсьәләләре сығарылды.**

Билдәләнеүенсә, йылдың 10 айы һөҙөмтәләре буйынса Өфөлә сәләмәтлеккә ауыр зыян килтереү, урлашыу, мутлашыу, иҡтисади йүнәлештәге енәйәт кеүек төрҙәр күрһәткесе кәмегән. Был маҡсатта Йәмәғәт хәүефһеҙлеге үҙәге хеҙмәткәрҙәре граждандар күп йыйылған 3,2 мең сарала хоҡуҡ һаҡлау органдарына ярҙам күрһәткән. Шулай уҡ 2015 йылдың октябренән алып "Хоҡуҡи тәртип" тип аталған халыҡ дружинаһы эшләй. Быйыл дружинасыларҙың һаны 2,8 мең кешегә тиклем артҡан. Үҙәк хеҙмәткәрҙәре ҡаланың шәхси секторында йәшәүселәр, балиғ булмағандар менән дә даими эш алып бара, ауыр тормош хәл-торошонда ҡалыусыларға, аҙ тәьмин ителгән, имен булмаған ғаиләләргә социаль ярҙам күрһәтә.

Ҡалалағы хәл-торошто контролдә тоторға һәм ваҡиға урынына шунда уҡ килеп етеүгә "Хәүефһеҙ ҡала" автоматлаштырылған видеокүҙәтеү системаһы ярҙам итә. Әлеге ваҡытта шундай 300 камера тәүлек әйләнәһенә эшләй, уларҙың күпселеге киң участканы күҙәтеү мөмкинлегенә эйә.

Бынан тыш, комиссия ағзалары Өфөлә ташландыҡ, хужаһыҙ транспорт средстволарын табыу, һаҡлау һәм утилләштереү буйынса алып барылған эшмәкәрлекте лә анализланы. Был мәсьәлә ҡала өсөн ҙур проблема тыуҙыра һәм үҫә бара. Әгәр 2014 йылда шундай транспорт средстволары 136 булһа, 2015 йылда - 187, бөгөнгә иһә - 314. Улар парковкаларҙа урын алып, ҡар таҙартыу машиналарына ҡамасаулап ҡына ҡалмай, ҡайһы бер осраҡта енәйәт урыны ла булып тора. Әммә аныҡ эшмәкәрлек алгоритмы булмау сәбәпле, уларҙы махсус тукталҡаларға алып барыу мөмкин түгел. Ултырышта был йәһәттән ҡарар сығарылды һәм ул хакимиәттең хоҡуки-норматив акты менән нығытылырға тейеш.

# БАЙРАМДЫ ҠАРШЫЛАП...



**Өфөнөң Ленин майҙанында 30 метрлыҡ Яңы йыл шыршыһы ҡуйылды. Уны Благовещен районынан алып килгәндәр. Алдағы көндәрҙә шыршыны биҙәү, майҙанда иһә боҙ ҡаласығын төҙөү башлана.**

Хәбәр ителгәнсә, баш ҡаланың барлыҡ райондарын Яңы йыл шыршылары һәм боҙ ҡаласыҡтары биҙәйәсәк. Майҙандарҙы байрамса биҙәү эштәре әүҙем бара. Тәүгеләрҙән булып шыршы Конгресс-холл янындағы "Ватан" этно-паркында ҡуйылды. Ҡала хакимиәтенең матбуғат хеҙмәтендә билдәләүҙәренсә, быйыл "Ватан" паркы ысын әкиәт донъяһына әүереләсәк. Унда һырғалаҡ, тауҙар, концерт майҙансығы һәм Ҡыш бабай тирмәһе буласаҡ."Һоҡланғыс Башҡортостан-2017" проекты сиктәрендә төбәктә ошондай биш тирмә асыла. 7 декабрҙә Өфөгә Бөйөк Устюг ҡалаһынан Рәсәйҙең Ҡыш бабайы ҡунаҡҡа килә. Ул баш ҡалабыҙҙа башҡорт Ҡыш бабайы тирмәһен асыуҙа ҡатнаша.

# БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓Быйыл туғыҙ айҙа Өфөлә 14 меңгә яҡын сабый донъяға килгән. Был уҙған йылдың ошо осорона ҡарағанда 4,5 процентҡа күберәк. Республиканың баш ҡалаһында үлем 2,6 процентҡа кәмегән. Халыҡтың тәбиғи үҫеше - 4389 кеше.

✓Декабрҙә Башҡортостанда йәшәүселәрҙе үҙып барған йылдың иң сағыу йондоҙ ямғыры көтә. Өфө планетарийы сайтында хәбәр итеүҙәренсә, Геминидтарҙы 6 декабрҙән 19-на тиклем күҙәтергә мөмкин. Сәғәтенә 100-гә яҡын метеор яуыуы көтөлә. Йондоҙ ямғырын ҡаланан ситтә күҙәтеү яҡшыраҡ. Бының өсөн бер ниндәй ҙә махсус ҡорамалдар талап ителмәй.

✓Яңы йыл каникулдарында Өфө станцияһынан өҫтәмә пассажир поездары тәғәйенләнә. 29 һәм 30 декабрҙә, кире йүнәлештә 6, 7 һәм 8 ғинуарҙа пассажирҙарҙың айырыуса күп булыуы көтөлә. Өҫтәмә поездар Өфөнән Һамарға, Мәскәүгә, Санкт-Петербургка һәм кире йүнәлештә 30-ҙан ашыу рейс яһаясаҡ.

✓Статистар 2016 йылдың туғыҙ айы өсөн халыҡтың аҡсалата килеменең һатып алыу һәләтен иҫәпләгән. Мәҫәлән, Башҡортостанда йәшәүселәр айына 89 килограмм һыйыр ите, йәки 605,1 килограмм икмәк, йәки 1353 килограмм картуф, йәки 755,9 литр бензин һатып алыу мөмкинлегенә эйә булған.

✓3 декабрҙә Өфөнөң Йәштәр һарайы алдында ҙур ит йәрминкәһе ойошторолаа. Ҡырмыҫҡалы, Архангел, Өфө, Шишмә, Ауырғазы, Кушнаренко һәм башҡа район вәкилдәре өфөләргә яңы һуйылған ит тәҡдим итә. Йәрминкә иртәнге сәғәт 10-дан көндөҙгө 4-кә тиклем эшләй.

✓Туғыҙ ай эсендә Өфөләге ҙур һәм уртаса предприятиеларҙа, ойошмаларҙа уртаса айлыҡ хеҙмәт хаҡы 37,8 мең һумдан ашҡан. Уҙған йылдың ғинуар-сентябрь айҙары менән сағыштырғанда 9,2 процентҡа артҡан. Ошо хаҡта мэрияла үткән матбуғат конференцияһында Өфө хакимиәте башлығы урынбаҫары Илдар Хәсәнов хәбәр итте. Журналистар менән осрашыу ҡаланы социаль-иҡтисади үҫтереү йомғаҡтарына арналды.

✓М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры сәхнәһендә "Калигула" трагедияһының премьераһы була. Альбер Камюҙың пьесаһы буйынса спектаклде режиссер Азат Йыһаншин сәхнәләштерә, көйөн композитор Урал Иҙелбаев яҙған. Әҫәр илдә тәүге тапҡыр милли телдә ҡуйыла.

✓ *Баш ҡалала "Каруанһарай" этно-мәҙәни үҙәген төҙөү мәсьәләһе хәл ителгән. Яңы бинала төбәктәге барлыҡ этно-мәҙәни берләшмәләр урынлашасаҡ. Әлеге ваҡытта бина төҙөләсәк урын һайлана.*



*АФАРИН!*

**Ошо көндәрҙә Өфөлә "Урал батыр" эпосын Рәсәй халыҡтары телдәрендә һәм сит телдәрҙә яттан һөйләүселәр республика конкурсы үтте. Етенсе тапҡыр уҙғарылған был конкурсты ЮНЕСКО эштәре буйынса Башҡортостан комитеты, БР Мәғариф министрлығы һәм Башҡортостан социаль технологиялар институты (әйткәндәй, конкурс йыл да ошо институтта уҙа) ойошторҙо. Башҡорт халыҡ эпосын республикала, Рәсәйҙә һәм донъяла таратыуҙы, башҡорттоң һәм Рәсәйҙә йәшәүсе башҡа халыҡтарҙың мәҙәниәтенә, тарихына һаҡсыл ҡараш тәрбиәләүҙе маҡсат итеп ҡуйған конкурста бөтәһе 534 бала ҡатнашты. Улар ике тиҫтәнән ашыу телдә эпостан өҙөктәр һамаҡланы һәм ятлап күрһәтте. Конкурс был талаптар менән генә сикләнмәне. Был юлы ла ойоштороусылар өр-яңы ике һынау уйлап сығарған булып сыҡты.**

# "УРАЛ БАТЫР" ЭПОСЫ...

## тай телендә лә яңғыраны



*"Урал батыр" эпосының 300-ҙән ашыу юлын яттан һөйләүсе Дилүзә Зөфәрова.*




*Бангкок ҡыҙы Яниса Тачабуранакрн*

Башҡортостан Социаль технологиялар институтының гуманитар фәндәр кафедраһы мөдире, конкурстың иң төп ойоштороусыларының, үҫтереүселәренең береһе Рахиль Вельц беҙҙе номинациялар менән таныштырҙы. "Тәүгеһе, йылдағыса, "Урал батыр" эпосын иң оҫта башҡарыусы, тип аталды. Конкурс өсөн яңы номинациялар түбәндәгесә булды: инша-эссе яҙыу һәм ҡобайыр эстәлегенә нигеҙләнеп төҙөлгән өҫтәл һәм компьютер уйындары эшләү. Быйыл тағы бер үҙенсәлекле яңылығыбыҙ бар: беҙҙә сит илдәрҙән килгән кешеләрҙең балаларына Башҡортостан Республикаһы тарихы һәм мәҙәниәте менән таныштырған курс үткәрелде. Беҙ мигранттарға Урал батыр тураһында видео-таҫма күрһәттек. Конкурсанттар эпостан өҙөктәр сәхнәләштерҙе, унан барыһы бергәләп эпос мотивтарына нигеҙләнеп төҙөлгән уйындар уйнаны. Балалар ҙа, беҙ ҙә бик ҡәнәғәт ҡалдыҡ..." - тине педагог.

Конкурс сиктәрендә баһалама төркөм республиканың төрлө төбәктәренән 200-ҙән ашыу инша һәм 100-ләгән уйын ҡабул иткән. Тимәк, урындар билдәләгән саҡта баһалама комиссиялары ағзаларына арыу ғына баш ватырға тура килгәндер, тип уйларға нигеҙ бар ине. Башҡорт телендә һөйләүселәр генә ике секция булып эшләне. Әйткәндәй, Рахиль Яковлевна менән әңгәмәләшерҙән алдараҡ баһалама комиссияһы ағзаларынан бер хәбәр ишеткәйнек: йәнәһе, икенсе йыл башҡорт телендә һөйләү секцияһы булмаясаҡ. "Урал батыр" эпосын башҡорт телендә яттан һөйләү республика конкурсы йыл һайын июнь айында үткәрелеүенә һылтанып, ойоштороусылар конкурс положениеһына үҙгәреш индереләсәге тураһында әйткән. Был, тәбиғи, күптәрҙә ризаһыҙлыҡ тыуҙырған. Берҙән, конкурс положениеһында "Урал батыр" эпосы Рәсәй халыҡтары телдәрендә һөйләнә, тип әйтелә, башҡорт теле шул телдәр араһына инмәй буламы ни улайһа? Унан һуң, конкурста ҡатнашыусы ниндәй генә милләт балаһы булмаһын, ул бит эпосты төп нөсхә телендә ишетергә тейеш! Тимәк... Рахиль Яковлевнаға был турала фекеребеҙҙе белдергәс, ул да: "Башҡорт телендә һөйләүселәр икенсе йыл да конкурста ҡатнаштырылыр, тип өмөтләнәм", - тип ҡуйҙы. Йә, ярай, конкурсҡа атлығып килеп еткән уҡыусы дуҫтарыбыҙ менән танышайыҡ. Беҙҙең иғтибарҙы йәлеп иткән тәүге конкурсантыбыҙ - Баймаҡ районы Йәнйегет ауылында тыуып, буй еткергән, әлеге көндә Өфөлә 48-се башҡорт лицейында 6-сы синыфта белем алыусы, "Урал батыр" эпосының 300-ҙән ашыу юлын яттан һөйләүсе Дилүзә Зөфәрова Урал батырҙың ғәҙеллек, изгелек, яҡшылыҡ яғында көрәшеүенә һоҡланыуын белдерҙе. Киләсәктә ул да донъяны "дейеү-пәрейҙәрҙән" азат итәсәк әле. Тәфтишсе булырға йыйына ҡыҙ.

Беҙҙең икенсе әңгәмәсебеҙ ҙә - Йылайыр ауылынан килеп еткән 9-сы синыф уҡыусыһы Гөлнәзирә Мәхмүтова ла атаһы һымаҡ уҡ хоҡуҡ һаҡсыһы булырға йыйыныуы тураһында әйтте. Ул да ғәҙеллек өсөн көрәшмәксе. Эпосты әнәһенәнебенә тиклем ятлаған. "Эпосты тулыһынса ятлау өсөн күп тапҡырҙар ҡабатлау талап ителә. Сөнки фекерҙәр, уйҙар яңырып тора. Әгәр эпосты ҡабат-ҡабат уҡымаһаң, онотола. "Урал батыр"ҙы ятлаһам ине, тигән теләгемде тормошҡа ашырыуым өсөн ғорурмын, шуға бәхетлемен дә. "Урал батыр" эпосын ятлай-ятлай мин үҙемдең телемә, милләтемә нығыраҡ яҡыная барғанымды тоям. Халҡымдың тарихы, данлы үткәне менән ҡыҙыҡһыныуым артты", - тине Йылайыр ҡыҙы. Уның һүҙҙәрен уҡытыусыһы, Рәсәй Федерацияһының мәғариф алдынғыһы, Йылайыр ауылының Шәйехзада Бабич исемендәге башҡорт гимназияһының башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы Әнисә Әкрәм ҡыҙы Таҡаева ла күтәреп алды: "Гөлнәзирә эпосты рус телендә лә, инглиз телендә лә ятлап ишеттерҙе. Ҡумыҙҙа ла, хатта ҡурайҙа ла уйнай", - тине.

Бүләкләү тантанаһы ваҡытында шығырым тулы залға инергә баҙнат итмәй генә торған ике ҡыҙ менән һөйләшеп киттек. Береһе - Туймазы ҡыҙы Эльвина Кәримова, икенсеһе - 16 йәшлек Бангкок ҡыҙы Яниса Тачабуранакрн икән. Таиланд ҡыҙы "Урал батыр" эпосын инглизсәнән тай теленә тәржемә итеүгә өлгәшеп, конкурста уңышлы ғына сығыш яһаған. AFS уҡыусылар алмашыу программаһы сиктәрендә Мәскәүгә килгән ҡыҙҙы Туймазыға йүнәлткәндәр. Уны был конкурсҡа әҙерләп алып килгән башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы Эльвира Рифҡәт ҡыҙы Хамматова әйтеүенсә, Яниса менән айырым шөғөлләнәләр. Инглиз телендә иркен аралашҡан Янисаға аралашыуҙа синыфташы Эльвина ярҙам итә. Эльвина ярҙамында беҙ ҙә сит ил ҡыҙы менән әңгәмәләшеп алдыҡ. "Урал батыр" эпосын бик яҡын күреүе, Урал батырҙы үҙҙәренең бер батыр короленә оҡшатыуын әйтте Бангкок ҡыҙы. Тимәк, Көньяҡ-Көнсығыш Азияла башҡорт мәҙәниәте менән күпмелер кимәлдә таныш бер кеше буласаҡ, тигән һүҙ. Таиландта беҙҙең "ат туғарыр" белешебеҙ буласаҡ, тимәк.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**"Урал батыр" эпосы ниндәй генә телдә яңғыраһа ла, беҙ быға ҡуш ҡуллап риза ғына. Ләкин бер-беребеҙҙе хөрмәт итәйек, эпосты хөрмәт итәйек", - тигәйне әңгәмә барышында бер конкурсант бала. Хәйер, зирәклек йәшкә ҡарамай шикелле. Беҙгә, ололарға, ҡайһы берҙә балаларҙан үрнәк алырға ла кәрәк түгелме икән?**

**Илгиз ИШБУЛАТОВ.**

*ЙӨҘ ЙЫЛЛЫҠҠА - ЙӨҘ ОБЪЕКТ*

# КАРУАНҺАРАЙ ТӨҘӨЛӘСӘК!



**Республика Башлығы Рөстәм Хәмитовтың "Йөҙ йыллыҡҡа - йөҙ объект" акцияһын йәмәғәтселек күтәреп алды. Ошо арала ғына тәҡдимдәр менән бихисап хаттар, мөрәжәғәттәр килһә, яҡынса исемлеккә уларҙың йөҙҙән ашыуы һайлап алынған да инде.**

Башҡортостандың юбилейына төҙөләсәк объекттарҙың дөйөм суммаһы 23,5 миллиард һум самаһы буласаҡ тип баһалана. Әлеге мәлдә исемлектә юл инфраструктураһының 67 объекты, 18 мәктәп, 10 балалар баҡсаһы, 11 физик культура һәм спорт объекты, ярҙарҙы нығытыу эштәре, Өфөлә Ағиҙел йылғаһы ярын төҙөкләндереү, Октябрьский ҡалаһын һыу менән тәьмин итеү өсөн Стивензя йылғаһындағы комплекслы төҙөлөш эштәрен тамамлау тора.

Шулай уҡ, Башҡортостан Халыҡтары ассамблеяһы рәйесе Зөһрә Рәхмәтуллина белдереүенсә, баш ҡалала "Каруанһарай" этно-мәҙәни үҙәген төҙөү мәсьәләһе хәл ителгән. Яңы бинала төбәктәге барлыҡ этно-мәҙәни берләшмәләр урынлашасаҡ. Бынан тыш, унда йәкшәмбе мәктәптәре өсөн дә бүлмәләр табылыуы мөмкин. Әлеге ваҡытта бина төҙөләсәк урын һайлана.

**Шәрифә САЛАУАТОВА.**

## Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Йыйырсыҡтар

❖ Муйындағы йыйырсыҡтар ҡатын-ҡыҙ йәшенең күрһәткесе, тиҙәр. Муйын тирәһе бит тирәһе кеүек үк, туҡланлырыуға мохтаж. 7-10 көн буйына һәр кис йылытылған үҫемлек майын мамыҡ менән муйынға һөртөп, кизе-мамыҡ туҡыма менән уратып ҡуйығыҙ. Ярты сәғәттән туҡыманы сисеп алығыҙ.

### Хроник бронхит

❖ 1 ҡалаҡ арыҫлан ҡойроғо үләне менән 2 ҡалаҡ кесерткәнде ваҡлап, 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға, 1 сәғәттән һуң һөҙөргә һәм көн дауамында 3 өлөшкә бүлеп эсергә. Төнәтмәне көн һайын яңынан әҙерләргә.

### Гайморит

❖ Йәш кәбеҫтә япрағын төнгөләккә маңлайға өс ҡат итеп һалып бәйләргә.

### Нервы системаһын нығытыу

❖ Нервы системаһын нығытыу өсөн тигеҙ күләмдә арыҫлан ҡойороғо, бесәй үләне тамыры, энәлек сәскәләре алырға һәм 1 ҡалаҡ үләнгә 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға, 1 сәғәт төнәтергә, һөҙөргә һәм көнөнә 3 тапҡыр - ашарҙан алда, 4-енсеһен йоҡлар алдынан 1/4 стакан эсергә.

### Үт бүленһен өсөн...

❖ Ҡайһы саҡта ныҡ итеп ашағандан һуң үт ҡыуығы тирәһе ауырта. Әгәр ҙә патология юҡ икән, эре лимондың яртыһының һутын һығырға һәм 1/2 балғалаҡ сода өҫтәп, эсергә.

### Панкреатит

❖ Хроник панкреатит көсәйеп китһә, 1 ҡалаҡ үгәй-инә үләне, 2-шәр ҡалаҡ һырлан (череда) һәм андыҙ тамырын эмаль һауытҡа һалып, ярты литр һыу ҡойорға, ҡайнау хәленә еткерергә, 5 минут талғын утта ҡайнатырға, 2 сәғәт төнәтергә һәм ашарҙан ярты сәғәт алда 0,5-1-әр стакан эсергә. Хәл яҡшырғансы көн һайын яңы төнәтмә яһап эсергә.

**Айбикә ЯҠУПОВА.**

ЙОЛАЛАРЫБЫҘ

# ХАЛЫҠ МЕДИЦИНАҺЫ

Ирҙәр сәсен оҙон итеп үҫтермәй, ҡырып торған. Халыҡ фекеренсә, ҡырыу сәс үҫеүен яҡшыртҡан. Бынан тыш, ҡыҫҡа сәсте тәрбиәләү ҙә уңайлыраҡ, тип иҫәпләнгән.

Төшкән сәсте ташламағандар, ә яндырғандар. Шулай итмәгәндә, йәнәһе, кеше баш ауыртыуы менән яфалана. Тәртип-таҙалыҡ һаҡлау йәһәтенән быының әһәмиәте ҙур.

Еткән тырнаҡ ҡайсы менән түгел, ә үткер бәке менән ҡырҡылған. Был да яҡшы ғәҙәт. Сөнки бәке менән ҡырҡҡанда тырнаҡ төрлө яҡҡа сәсрәмәй. Тырнаҡтарҙы ошолай тәрбиәләүгә баланы иртә өйрәтә башлағандар. Өндәү өсөн ҡурҡытыу ҙа ҡулланылған. Берәйһенең тырнағы аш-һыуға эләгә икән, был кеше, йәнәһе, бирәнгә әйләнә - уның эсе таша.

Ҡаты һыуыҡтарҙа, ел-буранлы көндәрҙә юлға сығыр алдынан биткә ҡаҙ йәки йылҡы майы һөрткәндәр. Был елһенеүҙән һәм бер ни тиклем туңыуҙан һаҡланырға ярҙам иткән. Оҙаҡ ваҡыт физик эш башҡарғанда тән ҡатып китә, һыҙлай. Бынан ҡотолоу өсөн мунса ингәндәр, йыуыныр алдынан тәнгә һары май йәки йылҡы майы һөрткәндәр. Шунан тирләп сабынып алғандан һуң, һабынлап йыуынғандар. Был гигиеник саранан һуң тән йомшарып, һығылмалы булып киткән, борсоған субъектив хис-тойғолар юҡҡа сыҡҡан.

Ауыҙҙы тәрбиәләү ашағас, йоҡонан торғас яҡшылап сайҡауҙан, тештәрҙе онталған ағас күмере йәки ваҡ аш тоҙо менән таҙартыуҙан торған. Ҡайһы бер урындарҙа тештәр икмәк әсеткес менән таҙартылған. Тештәрҙе таҙартыу өсөн терпәкәй үләне тамыры менән дә ышҡығандар. Ауыҙҙан еҫ сыҡмаһын өсөн мәтрүшкә төнәтмәһе менән сайҡағандар.

Элек ҡатын-ҡыҙҙар, бала-саға араһында һағыҙ сәйнәү ғәҙәте таралған булған. Һағыҙҙы ылыҫлы ағас сайырынан йәки ҡайын туҙынан ҡайнатҡандар. И. Лепехин яҙыуынса, башҡорттар бигерәк тә ҡарағас сайырынан әҙерләнгән һағыҙҙы ятраҡан. Халыҡ гигиенаһын белеүселәр һағыҙ сәйнәүҙе файҙалы тип иҫәпләй: теш ите ныгый, тештәр ағара. Унан тештәр ауырыуға бирешеп бармай.

Башҡорт халыҡ медицинаһында косметик саралар ҙа билдәле. Битте һипкел ҡаплаһа, кис ятыр алдынан 10-15 минутҡа ҡатыҡ һөрткәндәр, шунан ул йылы һыу менән йыуылған. Тырнаҡтарға алһыу төҫ биреү өсөн ҡына үләненән әҙерләнгән буяу матдәһе һылланған. Уны әҙерләү өсөн ҡына үләне япрағы менән сәскәһен иҙеп, төнгә әсетергә ҡалдырғандар. Барлыҡҡа килгән масса, төнгә ҡаршы тырнаҡтарға һылап, бәйләп ҡуйылған.

Башҡорт халҡында тән гигиенаһына ла иғтибар ҙур булған. Ашар алдынан ҡул йыуыу мотлаҡ һаналған. Һабынды үҙҙәре лә әҙерләгән, боҙолған туң майҙы ағас көлө һелтеһенә һалып ҡайнатҡандар. Һабын өсөн ҡарағас һәм усаҡ көлө һелтеһе яҡшыраҡ тип иҫәпләнгән.

Нигеҙҙә, ҡара мунса төҙөгәндәр. Аҡ мунсаға ҡарағанда, ҡара мунсала йыуынғанда һөрөм менән ағыуланыу ҡурҡынысы аҙыраҡ. Һирәк булһа ла, аҡ мунсалар ҙа төҙөлгән. Йәйләүҙәрҙә дөйөм йыуыныу өсөн кейеҙ менән ҡапланған ҡыуыштан файҙаланғандар. Йылға, күлдәрҙә һыу инеү ҙә ниндәйҙер кимәлдә тән гигиенаһын һаҡларға ярҙам иткән.

Ҡатын-ҡыҙҙар башты йыуыр өсөн йомшаҡ һыуҙан - ҡар йәки ямғыр һыуын файҙаланған. Сөнки йомшаҡ һыуҙы ҡулланғанда сәс яҡшыраҡ һәм ҡуйыраҡ булып үҫә, ҡысытыу, ҡауаҡлау һымаҡ күренештәр күҙәтелмәй.

**Варис ҒҮМӘРОВ.**
**"Башҡорт халыҡ медицинаһы".**
**(Дауамы бар).**

ШУНДАЙ ТӘҠДИМ БАР

# РАБИҒА ҠУШАЕВАҒА ҺӘЙКӘЛ ҠУЯЙЫҠ!

**Усаҡ йылыһы кеше өсөн бик ҡәҙерле. Һалҡын өйҙә ҡот булмай. Усаҡ тоҡана, яна икән, тормош та көйләнә, йә көйләнәсәк. Сыралы-утынлы өйҙә бераү ҙә өшөмәгән, ризыҡһыҙ ҡалмаған. Ҡатын-ҡыҙ йортта ошо усаҡты һаҡлай, ваҡытында дөрләтә, улай ғына ла түгел, ул үҙе үк - йортҡа яҡтылыҡ һәм йылылыҡ биреүсе. Иртәгәһе көнөн дә мотлаҡ уйлай ул. Ҡатын кешенең хәстәре даими. Ҙур йорт - ватан алдында ҡатын-ҡыҙ бурысы шундай уҡ бөйөк. Оло йорт өсөн хәстәрлек тә улар ғәменән ситтә түгел. Аталары, яҡын туғандары менән берлектә халыҡ өсөн изге эштәр атҡарған улар. Ҡаһарман ир-аҙаматтарҙы бына шундай әсә тәбиәләгән һәм шундай уҡ тоғро хәләл ефете йәнәшәһендә булған. Хан, бейҙәрҙең, юлбашсыларҙың ҡатындары, ҡыҙҙары тураһында мәғлүмәт, әлбиттә, бик аҙ килеп еткән. Шулай ҙа тоҫмалларҙай миҫалдарҙы тарихыбыҙ һаҡлаған.**



Үткән быуат башындағы инҡилаб тарихыбыҙҙы яңы исемдәр менән тулыландырҙы, һәм башҡорт һылыуының эш-ғәмәленең ҙурлығы, бөйөклөгө менән Рәсәй, шәреҡ халыҡтары араһында айырым урын биләгәнен раҫланы. Башҡорт ҡыҙы күп изге башланғыстарҙа тәүге юл ярыусыһы булды: ижтимағи-йәмғиәт тормошонда, ижадта. "Хөрриәт" тигән һүҙ батша Рәсәйенең колониаль иҙеү аҫтында йәшәгән халыҡтар өсөн бәлзәм бәрәбәрендә ине. Алдынғы ҡарашлы ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙ Рәсәйҙә барған ыңғай демократик башланғыстарға әүҙем ҡушылды. Мәхрүмлектәр, ғәҙелһеҙлектәр, кәмһетелеүҙәр кисерҙеләр, ләкин милләтенең оло хыялын тормошҡа ашырыуҙа фиҙаҡәрлек күрһәттеләр. Улар бөгөн дә башҡорт ҡыҙының рухи ныҡлығы кәүҙәләнеше. Шулар араһында ҙур трибунанан ялҡынлы телмәр тотҡан ун алты йәшлек Рабиға Ҡушаеваның исемен оноторлоҡмо ни! 1917 йылдың июлендә үк әле Ырымбурҙа үткәрелгән I Башҡорт йыйынында берҙән-бер делегат ҡыҙ башҡорт ҡатын-ҡыҙы хоҡуҡтарына ҡағылышлы сығышында шулай ти: "Ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙ - милләтебеҙ әсәләре, шуны аңларға ваҡыт!" Башҡорт тарихында тороп ҡалған был ялҡынлы һәм дәлилле сығыш ниндәйҙер шауҡымға, модаға эйәреү түгел, ә халҡы яҙмышын яҡшы яҡҡа үҙгәртеү маҡсатында, ҡатын-ҡыҙға шул осор талабы буйынса мөнәсәбәт итеү, ижтимағи тормошта улар индерәсәк хеҙмәткә ышаныс, уларҙың мөмкинлектәрен асыуҙа юл биреү кеүек яҡты идеялар ята. Синфилыҡ көрәше ҡыҙған Рәсәйҙә ошо хөрриәт идеяһы ҡасанға тиклем дауам итерен фаразлау ҡыйын, шуға ла уны милләт өсөн файҙаланып ҡалырға тырышыу, ил эсендә генә түгел, ә бәлки, донъя кимәлендә башҡорт халҡының тауышын ишеттереү. Был маҡсатҡа белем-ғилем аша ғына өлгәшергә мөмкин булыуын тәрән аңлаған Рабиға Ҡушаева ең һыҙғанып эшкә тотона.

Атаһы Янғол старшинаның тәрбиәһе һөҙөмтәһе, хатта ҡаланан уҡытыусылар алып ҡайтып балаларын уҡытыуы был ғаиләләге мөнәсәбәтте күҙалларға ярҙам итә. Егәрле хужа

ШАҢДАУ



# ҠОБАЙЫР, ЭПОС БАШҠАРЫУСЫЛАРҘЫ...

## "сәсән" тигән оло исем менән атап буламы?

**Миләүшә Ҡаһармановаының "Киске Өфө"нөң 45-се һанында сыҡҡан Бөтә Рәсәй сәсәндәр фестивале тураһындағы мәҡәләһе уйландырҙы. Һәм мин яҙылғандарға ҡушылып, үҙемдең дә фекеремде өҫтәмәксемен.**

Иң тәүҙә шуны әйтке килә. Республикала сәсәндәр мәктәбен булдырыу һәм йыл да "Урал батыр" эпосын яттан һөйләүселәрҙең конкурсын үткәреп тороу, бигерәк тә бөгөн, балаларҙың ғына түгел, өлкәндәрҙең дә башы компьютерҙан сыҡмаған, интернет ағыуынан йәндәрҙең ҡата барған заманында баһалап бөткөһөҙ әһәмиәткә эйә, тип уйлайым. Ләкин, әгәр был мәктәп ысын сәсәнлек өлгөләрен өйрәнеүгә түгел, ә тасуири уҡыу һәм актерлыҡ оҫталығын үҫтереүгә генә ҡоролған икән, ул сағында, минеңсә, исемде алмаштырырға кәрәк. "Сәсән" һүҙен буш ҡыңғырау кимәленә төшөрөү - хилафлыҡ. Алтын менән баҡырҙы бутап, йәштәрҙе аҙаштырып, оло хата яһап ҡуймайыҡ.

Ғәбит, Буранбай кеүек сәсәндәр ҙә быуатҡа бер тыуа торғандыр. Мәҫәлән, "Буранбай сәсән йырлағанда кешеләр үҙ-үҙҙәрен онотҡан: ит турап ултырған кешеләр ҡулын киҫкән, һыуҙан ҡайтып килгән ҡыҙҙар һыуын түккән, бала имеҙгән ҡатындар балаларын осорған, ауыҙына ҡапҡан - ашын төшөргән. Һуғышҡан кешеләрҙең һелтәнгән ҡулдары ҡатып ҡалған. Ауырыуҙар, сирҙәрен онотоп, тороп ултырған..." (Мөхәммәтша Буранғол, "Сәсән аманаты").

Ә Ғәбит сәсән тураһында М. Буранғол былай тип яҙа: "Ул, һөйләгәндә, үҙен-үҙе онота, көләр ерҙә көлә, илар ерҙә илап, әҫәрләнеп тора ла һалҡын һыу эсә, бик оҙаҡ һүҙһеҙ ҡала... Тик уртала туҡтап ҡалып, бүленһә, шул ерҙән ялғап китә алмай, яңынан башлай. Сәбәбен һораһам:

- Мин донъяны онотам... Улар менән яуҙа бергә булам. Ҡобайыр ҡайҙа илтһә, мин шунда. Шуның өсөн баштан төшмәй булмай, - ти ине..."

Бындай сәсәндәрҙе бер нисек тә "башҡарыусы" тип әйтеп булмай, сөнки уларҙың йәне шул заманда, шул ваҡиғаның эсендә йөрөй. Минеңсә, улар әүлиә кимәлендәге кешеләр. Сөнки Йыһанда, ерҙәге хәл-ваҡиғалар юғалмай, күктәрҙә яҙыла бара. Һәм ҡиәмәткәсә һаҡлана. Ҡайһы бер әүлиәләр Аллаһы Тәғәләнең рөхсәте менән унда инеп, ваҡиғаларҙы кино ҡарағандай ҡарай ала. Сәсәндәрҙең дә ҡайһы берҙәре шундай кимәлдә булғандыр, тип уйлайым. Ә, ғөмүмән, бөтә сәсәндәр ҙә Аллаһҡа яҡын кешеләр һәм улар был ерҙә Аллаһы Тәғәлә йөкмәткән бурысты үтәй. Ни өсөн тигәндә, улар халыҡҡа нимә яҡшы, нимә насар икәнен аңлата, хәләл менән харамды айырып күрһәтә, изгелеккә, батырлыҡҡа, ғәҙеллеккә өндәй, ерҙе, тәбиғәтте һаҡларға саҡыра, дөрөҫтө һөйләүҙән ҡурҡмай, фани донъяның байлығына ҡыҙыҡмай. Быларҙан сығып, шуны әйтмәксе булам: сәсәнлектең төп билдәләренең береһе - ул кешенең динилеге, йәғни Аллаһ закондарына буйһоноу, Ул ҡушҡандарҙы үтәп, Ул ҡушҡанса йәшәү. Шунһыҙ сәсән Сәсән булмай.

**Әлфиә БАТТАЛОВА.**

***✓ Башҡорт хандың бөйөклөгөн танып, тарих уның исемен һәм исеме менән аталған халыҡты хәҙерге көнгә тиклем килтереп еткерҙе. Башҡорт хандың бейек таш һыны Рәсәй дәүләт баҡсаһында тора.***

Янғол старшина ауылдаштарына ла ярҙам итеп йәшәгән. Тик революцияға тиклем вафат була. Уның уйҙары, теләк-ынтылыштары улдары һәм ҡыҙҙарының эшмәкәрлегендә сағыла.

1921 йылдың ноябрендә Рабиғаны БАССР Үҙәк Башҡарма Комитетының икенсе сессияһында Советтарҙың IX Бөтөн Рәсәй съезына делегат итеп һайлайҙар. Башҡортостан делегацияһын Совет хөкүмәтенең етәксеһе В.И. Ленин ҡабул итә. Рабиға был осрашыуға башҡорт милли кейемен кейеп барып, аҫаба халыҡтың вәкиле, милләт ҡатын-ҡыҙы, милләт әсәһенең асыҡ образын кәүҙәләндерә. Үҙ позицияһын Рәсәй кимәлендә әйтә һәм дәлилләй белгән ҡатын совет власы өсөн дә бик ҡулай булмағандыр. Яратҡан эшенән, мәғарифтан айырып Мәскәүгә ебәрелеүе, бөтөнләй икенсе өлкәгә эшкә ҡуйыуҙары уның әүҙемлеген ауыҙлыҡлау ҙа була.

Башҡорт милли хәрәкәтендә ҡатнашыусыларҙың яҙмышы фажиғәле. Ҡушаевтар, Йомағоловтар... Мәскәүҙә Рабиғаның үлтерелеүе - асылда шул уҡ ҡоротоу сәйәсәте. Үҙ халҡы өсөн фиҙәкәр Рабиға барыбер тыуған яғына ҡайтыу, ҙурыраҡ эштәр алып барыу менән яныуына шик тотмайбыҙ, сөнки ул республикала күп башланғыстарға нигеҙ һалып китә. 1921 йылдың ноябрендә Рабиғаның инициативаһы менән һәм уның мөхәррирлегендә башҡорт ҡатын-ҡыҙҙары өсөн "Азат ҡатын" тип аталған гәзит сыға башлай. Был гәзит - Башҡортостанда тәүге ҡатын-ҡыҙҙар баҫмаһы. Улай ғына ла түгел, совет иле республикалары өсөн дә өлгө булған ваҡиға. Сөнки Рәсәйҙең күп төбәгендә бындай матбаға һуңғараҡ сыға башлай.

Рабиға Ҡушаева тарихыбыҙҙа тәүге сәйәсмән ҡатын-ҡыҙҙарҙың береһе булып ҡалды. Тарихсы Р. Сөләймәнова был шәхестең тормош юлын өйрәнеп, билдәһеҙ биттәрҙе асыҡлап, бик ҙур эш башҡарҙы. Әммә бөгөн ижтимағи-сәйәси тормошта ҡайнап йәшәгән мәғрифәтселекте үҫтереүҙә, демократик институтты булдырыуҙа үҙ өлөшөн индергән был оло шәхестең иҫтәлеген мәңгеләштереү юҡ кимәлендә. Яҙыусы ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙға был йәһәттән иғтибар ҙурыраҡ, тип әйтә алабыҙ. Һәҙиә Дәүләтшина - Рабиғаның ауылдашы. Улар икеһе лә Хәсән ауылынан. Тәржемәүи хәлендә крәҫтиән ҡыҙы тип алынһа ла, ауылдаштары әйтеүенсә, ул да ауылдың уҡымышлы нәҫеленән, указлы мулла ғаиләһендә тыуа. Тик атаһы вафат булып, етемлекте иртәрәк татый. Рабиға 1901 йылда тыуа, тағы ла дүрт йылдан буласаҡ яҙыусы Һәҙиә ошо уҡ ауылда донъяға килә. Был яҡтағы ваҡиғалар, әлбиттә, художестволы эшләнештә, "Ырғыҙ" романында тороп ҡала.

Эйе, нәфис әҙәбиәт үҙ ҡанундары менән йәшәй, һәм совет әҙәбиәтенең талаптары ла бик ҡәтғи, совет реализмы принциптарынан тыш әҫәр донъя күрмәҫ ине, шуға ҡарамаҫтан, "Ырғыҙ" башҡорт тормошон тасуирлауы, йола, ғөрөф-ғәҙәттәрҙе күрһәтеүе, характерҙар, сюжет үҫеше буйынса тиңе булмаған әҫәр, тарихи хәтер. Тел байлығы - мәңгелек үрнәк. Ырғыҙ буйы шул бай телде бөгөн һаҡлаймы? Л. Соболевтың ҡасандыр: "Һәҙиә Дәүләтшинаның "Ырғыҙ" романын белмәй тороп, башҡорт халҡының тормошон аңлау мөмкин түгел", тиеүе - бөгөн дә көнүҙәк. Талант эйәһенең "Ырғыҙ" романы башҡорт донъяһының визит карточкаһы булып тора.

Егерменсе быуат башында тыуған тағы ла бер арҙаҡлы шәхесебеҙ, Башҡортостандың халыҡ яыусыһы Зәйнәб Биишева Һәҙиә Дәүләтшинанан өс йәшкә генә кесе. Мин атаған ике шәхестән айырмалы, уға оҙон, матур ғүмер кисерергә, ижад итергә насип булды. Беҙ уны Шәреҡ донъяһында тәүге трилогия яҙған әҙибә тип таныйбыҙ, хаҡлы ғорурланабыҙ. Бына нисек була ул күсәгилешлек. Төрки донъяһының яңы киңлеген асты ул донъяға... Әҫәрҙәре ҡат-ҡат бүтән телдәргә тәржемә ителде. Алтмыштан ашыу телгә тәржемә ителгән, тиҙәр әҙәбиәт белгестәре. Ҙур бейеклек был. Донъяны гөрләткән ошо әҫәрҙәр буйынса бөгөнгө заман талабына тура килтереп, лайыҡлы фильмдар ҙа төшөрөлөр, тигән өмөт йәшәй.

Әле телгә алынған өс башҡорт ҡатыны күп йәһәттән - тәүгеләр, милләт бәҫен күтәрер изге эштәрҙең башында тороп, юл ярыусылар. Был мәҡәләлә һәр эштәрен тәфсирләүҙе маҡсат итеп ҡуйманым. Ә талантлы булыу менән бер рәттән, юғары рухлы, әхлаҡлы, сабыр һәм иманлы булып йәшәүҙәрен, ауыр саҡтарҙа эске көстәрен юғалтмауына һоҡланыуымды белдергем килә. Сөнки уларҙың һәр береһе иң яҡын, ғәзиз кешеләрен юғалта (ире йәки балаһы), шулай ҙа һынмайҙар, бөгөлмәйҙәр, милләт, ватан өсөн яналар, ижад итәләр. С. Юлаев исемендәге республика дәүләт премияһы лауреаты Һәҙиә Дәүләтшинаға 1980 йылда Бөрө ҡалаһында бюст ҡуйылды. Өфө һөнәрҙәр һәм сервис колледжы алдында Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы Зәйнәб Биишеваға тантаналы шарттарҙа һәйкәл асылыуы быйылғы йылдың матур бер яңылығы булды. Һәм ул халыҡ тарафынан ҙур ваҡиға тип ҡабул ителде. Һис шикһеҙ, килер быуындар ҙа ғорурланыр. Тик уйға ла һалған нәмә лә бар... Ошо бюстан алыҫ түгел Октябрь проспектында ихата һепереүсегә һәйкәл бар. Ул тулы килеш һынландырылған, тип әйтәйек. Ысынлап та, ихата һепереүсене ҡулһыҙ күҙ алдына килтереү мөмкин түгел. Ләкин беҙҙең яҙыусыларыбыҙ ҙа ҡәләмдәрен талмаҫ ҡулдарында тибрәтте бит. Халыҡ менән мәңге ҡаласаҡ тере һүҙҙәре, гүйә, бармаҡтарҙан тамды һәм рухи мәрйен булып теҙелде... Халыҡ яҙыусыһы монументаль һәйкәлгә лайыҡ түгелме?

Егерменсе быуат беҙгә бына ошондай өс сағыу шәхесте бирҙе, һәр береһе "милләт әсәһе" тип баһаларлыҡ эштәр атҡарҙы, рухи мираҫтары күп быуынға етерлек. Хәйер, әсәнән тыш милләт юҡ. Ә был өс исем телгә алғанда "тәүгеләр" тигән һүҙ йышыраҡ ҡабатланасаҡ, сөнки улар тарихта ҡалыр изге эштәргә нигеҙ һалды. Бөгөн ҡайһы ғына өлкәгә күҙ һалмайыҡ, ҡатын-ҡыҙ эшмәкәрлеге менән яуланған үрҙәр, бейеклектәр менән ғорурлана алабыҙ. Ҡатын-ҡыҙҙар берлеге, ойошмалары, ағинәйҙәр ҡорҙары һ.б. гөрләп эшләй. Р. Ҡушаеваның хыялы тормошҡа ашты. Шул уҡ ваҡытта беҙҙең өҫтә лә бер бурыс бар. Әгәр ҙә ошо оло йөрәкле шәхестең иҫтәлеген мәңгеләштереү өсөн ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙ әүҙемлек күрһәтһә, баш ҡалабыҙҙа уға һәйкәл ҡуйылһа, тарихыбыҙға яҡын килергә ярҙам итер ине. Бындай һәйкәл башҡорт ҡатын-ҡыҙының данлы үткәненә, ғөмүмән, ҡатын-ҡыҙ, әсә тигән исемгә лайыҡлы һәйкәл булыр ине.

**Фәрзәнә АҠБУЛАТОВА.**

*ШАҢДАУ*

# "ТӨНЬЯҠ АМУРҘАРЫ"НЫҢ... серле байрағы"

**"Киске Өфө"нөң 45-се һанында баҫылған "Төньяҡ Амурҙары"ның серле байрағы" (авторы Азат Ярмуллин) мәҡәләһен уҡығандан һуң тыуған фекеремде еткермәксемен. Йәғни байраҡ уртаһына ҡыҫҡартып, йәғни баш хәрефтәре менән генә яҙылған яҙманы логик фекер нигеҙендә асыҡламаҡсымын.**



Ҡағиҙә буйынса, хәрби байраҡҡа хәрби берәмектең - полктың: беренсе - ҡайҙа төҙөлөүе, икенсе - кем тарафынан төҙөлөүе, өсөнсө - ниндәй төр ғәскәренә ҡарауы, дүртенсе - полк номеры һәм бишенсе - тәғәйенләнеше сағылдырылырға тейеш. Байраҡ уртаһындағы "О.Вh.б.п.5О" яҙмаһы, унда "h" хәрефе лә индерелеүенә ҡарағанда, башҡортса булырға тейеш. Ә һүҙҙәр боронғо урыҫ хәрефтәре менән яҙылған. Хәҙер шул хәрефтәрҙең айышына төшөнөп ҡарайыҡ. Баштағы "О" - Оренбург, тимәк, полк Ырымбурҙа төҙөлгән, тигәнде аңлата булыр. Артабан - "Вh". Полк Ырымбур губернаторы Волконский фарманы менән төҙөлә. Ә 1-се һәм 2-се башҡорт полктары батшаның үҙенең указы менән барлыҡҡа килгән була. Шулай итеп, "В" - Волконский, ә "h" - һыбайлы тигәнде аңлатып, ғәскәр төрөн тәшкил итә. Унан килә "б" - башҡорт. "П" - полк, "5" - тәртип һаны, "О" - особый - махсус, йәғни полктың тәғәйенләнеше. Ни өсөн "особый"? Сөнки ул һуғыш барған саҡта төп ғәскәргә өҫтәмә ярҙам рәүешендә булдырылған.

Шулай итеп, тултырып уҡығанда, байраҡ яҙыуы ошолай килеп сыға: "Оренбург. Волконский һыбайлылары. башҡорт. полк. - 5. Особый." Хәҙерге телгә тәржемә иткәндә: Ырымбурҙа Волконский тарафынан төҙөлгән 5-се махсус башҡорт һыбайлы полкы.

**Шамил ХӘЙРУЛЛИН,**
**инженер-төҙөүсе.**
**Миәкә районы.**

*БАШҠОРТ ҠАМУСЫ*



*Йәдкәр БӘШИРОВ*

# БӨЙӨК БАШҠОРТ ИЛЕ

Шуныһы бәхәсһеҙ: Башҡорт берекмәһе эсендә ғәҙеллеккә, сабырлыҡҡа, ярҙамсыллыҡҡа, тыйнаҡлыҡҡа нигеҙләнгән ҡанундар башҡорт халҡы тарафынан тайпылышһыҙ күҙәтелеп, быуындарҙан-быуындарға тапшырылып, был сифаттар XXI быуатҡа тиклем килеп еткән. Башҡорт хандың зирәк аҡылы, абруйы үҙ халҡы эсендә генә түгел, шулай уҡ халыҡ-ара кимәлдә лә шул тиклем юғары булған, күп кенә уғыр ҡәбиләләре уға яҡынларға һәм хандың ҡанаты аҫтына инергә, уның кешеләре булырға тырышҡан.

Һөҙөмтәлә "Башҡорт" исеме ҙур территорияла танылыу яулаған, уғыр ҡәбиләләренең ойошоу символына әүерелгән һәм башҡорт милләте ошо рәүешле ойошҡан. Башҡорт хандың бөйөклөгөн танып, уны ихтирам итеп, тарих уның исемен һәм исеме менән аталған халыҡты хәҙерге көнгә тиклем килтереп еткерҙе һәм, алда әйтеп үтеүебеҙсә, урта быуат юлбашсыһының символы, Башҡорт хандың бейек таш һыны Мәскәү ҡалаһының В.И. Ленин исемендәге милли дәүләт китапханаһында һаҡланған (хәҙер Рәсәй дәүләт милли китапханаһы баҡсаһында тора).

Алда әйтеп китеүебеҙсә, уғыр ҡәбиләләренең нигеҙендә башҡорт халҡының ойошоуы 1-се меңйыллыҡтың аҙағына тура килә. Халыҡтың бер берәмеккә ойошоуындағы этник процеста үҫәргән, түңгәүер (бәжғәр), бөрйән, тамъян ырыуҙары төп ролде башҡарған. Был боронғо башҡорт ҡәбиләләренең тарихы уғырҙарға бәйле, ә тарихтың билдәле бер дәүерендә был ҡәбиләләр бәшәнәк донъяһында, һары ҡыпсаҡтар (половец) тарихында билдәле роль уйнаған. Улар тарихтың бер мәлендә көньяҡтағы Ҡырым ярымутрауында ла көн иткән. Был төбәк ваҡытында Башҡорт хан биләмәһенә лә ингән.

Башҡорт хан исемен халыҡ атамаһы итеп алыусы бер нисә ырыу-ҡәбилә ойоша. Улар башҡорт халҡының боронғо "Урал батыр" эпосында әйтелгәнсә, бер Тәңре, бер саф зәңгәр күк аҫтында берләшә. Башҡорт халҡына исем биргән этноним төрлө сығанаҡтарҙа төрлөсә аталып йөрөтөлә: IX быуаттың тәүге яртыһында башҡорттар иленә сәйәхәт итеүсе Сәлләм Тәржемәндең яҙмаларында уларҙы "башгирд", башкирд", "башджирт", "башгар" тип атаған. Әл Мәсүди (X), әл Балхи, ибн Русте, Вилки Рубрук үҙҙәренең хеҙмәттәрендә башҡорттарҙы "паскатир" (IX-X б.б.) тип атайҙар. Башҡорттар хаҡында шулай уҡ әл Ғәрдизи (XI б.) телгә ала. Ғәрәп сәйәхәтсеһе Әбү Хәмит әл-Ғәрнәти Андолуси башҡорттар илендә 1150-1153 йылдарҙа йәшәп китә. Ул башҡорттар хаҡында шулай яҙа: "Уларҙың үҙ өлкәһе (кешеләре) бар, улар харадж (ер һалымы) түләй. Улар менән Болғар араһында айлыҡ юл ята. Был ерҙе вису, исәт тип атайҙар, икенсе өлкәһе Ару тип атала...". "Башкир", "башкирец" этнонимын беҙ XV-XVI быуаттарҙағы урыҫ сығанаҡтарында ла осратабыҙ, XVII-XX быуат баштарында был этнонимдың варианттары 40-ҡа тиклем барып етә. Был хаҡта бер тарихсы ғына яҙмай.

**(Дауамы бар).**

✓ *Ҡотҡарыусылар көнөнә 20 саҡырыу ала. Уларҙы ҡотҡарыусы ғына тип әйтмәҫ инем, сөнки бер нисә профессияға эйәләр: водитель дә, төүге ярҙам күрһәтеүсе лә, водолаз да, альпинист та.*



# ШУНДАЙ

## халыҡ именлеген

**Оло быуын ғына түгел, хатта йәштәр ҙә "Офицерҙар" киноһын яратып ҡарайҙыр, моғайын. Ундағы легендаға әйләнгән бер фразаны бөгөн дә йыш ишетергә мөмкин: "Шундай һөнәр бар - Тыуған илде һаҡлау". Сираттағы әңгәмәселәребеҙ тыуған илен һаҡлап ҡалыу менән генә сикләнмәйенсә, әле лә халыҡ именлеге һағында тороусы офицерҙар - Өфө ҡала округы хакимиәтенең Граждандарҙы һаҡлау идаралығы етәксеһе Рәсим АБДУЛЛИН менән "Ҡотҡарыу хеҙмәте 112" ойошмаһы директоры Хәким НИҒӘМӘТЙӘНОВ. Мәғлүм булыуынса, был ойошма эшмәкәрлеге 4-се йыл рәттән Волга буйы федераль округындағы халҡы миллиондан ашыу булған ҡалалар араһында хәүефһеҙлекте тәьмин итеү буйынса беренсе урында килһә, Рәсәй буйынса икенсе урында тора. Бөгөн редакция ҡунаҡтарының эше тураһында мәғлүмәт алдыҡ, ҡайһы бер башҡа темаларға ла фекер алыштыҡ.**

**▸ Баштан уҡ шуны асыҡлап үтеү кәрәктер, моғайын: баш ҡала хакимиәтенең Граждандарҙы һаҡлау идаралығы нимә менән шөғөлләнә?**

**Р. Абдуллин**: Ойошманың бурысы - граждандар оборонаһы, халыҡты һәм территорияларҙы ғәҙәттән тыш хәлтороштан һаҡлау, һыу яҡтылыҡтарындағы именлек тураһында хәстәрлек күреү, халыҡты, граждандар оборонаһы объекттарын хәүеф тураһында иҫкәртеү системаларын әҙерлектә тотоу, ҡала округы территорияһында матди-техник, аҙыҡ-түлек, медицина һәм башҡа средстволар запасын булдырыу. Беҙҙең хеҙмәткәрҙәр ҡасан һыу баҫҡанды, ҡасан баш ҡаланың урмандары яна башлағанды көтөп ултырмай, ә күберәк көсөө уларҙы булдырмауға һала, һаҡлыҡ саралары, йәғни профилактика эштәре алып бара. Был йәһәттән, беҙ ҡала хужалығы предприятиелары, Өфө эргәһендәге 23 ауыл халҡы, баҡсасылар менән берлектә эшләйбеҙ. МЧС тигәндә, ниндәйҙер глобаль ҙур ойошманы күҙ алдына килтерһәк, граждандарҙы яҡлау - ул халыҡҡа яҡын, халыҡтың үҙе ҡатнашлығындағы саралар һәм профилактика эштәре, тиергә мөмкин. Урман янғындары булып тора, кемдеҙер газ селтәренә рөхсәтһеҙ тоташып, газ сығыуы һөҙөмтәһендә күпме кеше хәүеф аҫтында ҡала. Шулай уҡ ҡалала күпме нефть химияһы заводтары бар. Ғәҙәттән тыш ваҡиғалар була ҡалғанда үҙеңде нисек тотоу, ниндәй ғәмәлдәр башҡарыу, юғалып ҡалмау өсөн халыҡты һаҡлыҡ сараларына өйрәтергә тейешбеҙ.

**▸ Элегерәк халыҡ телевизорҙан сит илдәге "Ҡотҡарыу хеҙмәте 911" тураһында тапшырыуҙар ҡарап, "Их, беҙҙә лә шундай хеҙмәт булһа икән", тип уфтана ине. Бөгөн 112 номерлы Берҙәм диспетчер хеҙмәте уңышлы эшләй…**

**Х. Ниғәмәтйәнов:** Ул беҙҙең төп хеҙмәттәрҙең береһе булып тора һәм тәүлегенә халыҡтан 4-4,5 мең мөрәжәғәт ҡабул итәбеҙ. Байрам ваҡыттарында шылтыратыуҙар һаны 6-7 меңгә етә. Бер үк ваҡытта 30 каналлы 10 телефон эшләй, сират булһа, 11-се телефон-автомат сиратҡа ҡуя. Мөрәжәғәттәр төрлө-төрлө: көнкүреш мәсьәләләренән алып, тимер юл вокзалына ниндәй автобус менән барырға була, тип тә һорайҙар. Көҙөн йылылыҡ биреү мәсьәләһе буйынса шылтыратыуҙар күп. Диспетчерҙар, йәғни оператив дежурныйҙар шылтыратыуҙарҙы торлаҡ-коммуналь хужалыҡ ойошмаларына тапшыра һәм мәсьәләне контролдә тота. Элек, мәҫәлән, көҙөн йылылыҡ бирелмәһә, партия комитетына шылтыратып, ялыу аша хәл итәләр ине, хәҙер был мәсьәләне лә беҙҙең аша хәл итәләр. Ғөмүмән, Граждандарҙы яҡлау идаралығы әлеге ваҡытта барлыҡ тармаҡтарҙы бәйләп тороусы оператив орган булып тора.

**Р. Абдуллин:** Ысынлап та, бынан бер нисә йыл ғына элек халыҡ төрлө хеҙмәттәргә 01, 02, 03 һандарын йыйып шылтыратһа, хәҙер бер - 112 номерын ғына йыйырға кәрәк. Бының өсөн кеҫә телефонында батарея булһа, симкаһыҙ, аҡсаһыҙ ваҡытта ла шылтыратырға мөмкин. Берҙәм диспетчер хеҙмәте ойошторолғас, халыҡ ябай ғына мәсьәлә буйынса ла, артыҡ уйланып тормай, хоҡуҡ боҙоумы, төтөн сығамы, газ еҫе бармы, берәйһенә тиҙ ярҙам кәрәкме, ҡышын иһә асарбаҡтар буйынса - тота ла 112 номерына шылтырата. Ә оператив дежурныйҙар һәр хәбәрҙе ҡабул итеп, уның үтәлешен контролдә тота. Мәсьәлә, хәл ителгәс, йәғни тәғәйен урынға тапшырылып, уларҙан яуап булғас ҡына контролдән алына.

**▸ Шаяртып, алдап шылтыратыуҙар тураһында ла бик йыш хәбәрҙарбыҙ. Бындай хәл әле лә дауам итәме?**

**Х. Ниғәмәтйәнов:** Хәҙер ундай шылтыратыуҙар кәмене. Быға заманса техника ҡулланылыуы ла, уның алдынғы булыуы ла ҙур роль уйнай, сөнки элек номерҙы асыҡлау тиғән нәмә юҡ ине. Хәҙер иһә һаҡлау системаһы тулыһынса бар: ҡайҙан шылтыраталар, ниндәй телефондан, хатта телефондың завод номерын да асыҡларға мөмкин.

Шаяртыуҙар булмаһа ла, әйтеп киткәнемсә, шылтыратыуҙар төрлө мәсьәләләргә ҡағыла: көнөнә бер нисә тапҡыр "Тиҙ ярҙам" хеҙмәтенә кешеләрҙе өйөнән машинаға алып сығырға ярҙам итәбеҙ. Оптималләштереү һөҙөмтәһеме икән, "Тиҙ ярҙам" хеҙмәтендә күп осраҡта табип үҙе генә йөрөй, ә сирлене носилкаға һалып күтәреп сығарыу өсөн ярҙам кәрәк. Ҡайһы бер осраҡта күрше-күлән дә өйҙә булмай. Шундай осраҡтарҙа күберәген беҙгә мөрәжәғәт итәләр һәм ҡотҡарыусылар барып ярҙамлаша.



**▸ 112 хеҙмәтенән башҡа, идаралыҡтың тағы ниндәй подразделениелары бар?**

**Х. Ниғәмәтйәнов:** "Ҡотҡарыу хеҙмәте 112" үҙе икегә бүленә: беренсеһе - Берҙәм диспетчер, икенсеһе Эҙләү-ҡотҡарыу хеҙмәте. Диспетчерҙар хәбәр алғас, мәғлүмәтте ҡотҡарыусыларға тапшыра һәм төп көс уларға төшә. Ҡотҡарыусылар көнөнә 20 саҡырыу ала. Уларҙы ҡотҡарыусы ғына тип әйтмәҫ инем, сөнки бер нисә профессияға эйәләр: водитель дә, төүге ярҙам күрһәтеүсе лә, водолаз да, альпинист та. Һәм шуның менән башҡа хеҙмәттәрҙән айырылып торалар ҙа инде. Шул уҡ ваҡытта уларҙы фатир ишектәрен асырға ла саҡырталар.

**Р. Абдуллин:** Нимә тип кенә шылтыратмайҙар инде ул: ағас башына менеп төшә алмаған бесәй балаһы булһынмы, вентиляцион люкка ингән ҡошмо, бесәйме - һәр осраҡта ла ярҙам күрһәтәбеҙ. Әле яңы ғына урамда йөрөгән арыҫлан балаһын вольерға алып барып тапшырҙыҡ. Уға теләһә кем яҡын килә алмай бит инде, ни тиһәң дә, йыртҡыс хайуан. Бер яҡтан ҡараһаң, юҡ ҡына нәмә кеүек, ә ышаныс, имидж ошо ваҡ кеүек күренгән ғәмәлдәр аша килә. Бигерәк тә шул ҡотҡарылған йән эйәләрен балаларҙың ҡулына тоттороһаң, уларҙың ҡыуаныһын күреү ҙә бәхет бит ул.

**Х. Ниғәмәтйәнов:** Ҡотҡарыу хеҙмәтенең филиалы булып торған Ғәҙәттән тыш торлаҡ фондыбыҙ янғынынан, башҡа ғәҙәттән тыш хәлдән һуң фатирһыҙ, йорт-ҡыйыҡһыҙ ҡалған кешеләргә ярҙам итә. Уларға ярты йылға ваҡытлыса ошо йорттан торлаҡ бирелә. Бүлмәме ул, койка-урынмы, иң мөһиме - кеше урамда ҡалмай. Ваҡыты ярты йыл тип билдәләнһә лә, торлаҡ комиссияһы йыйылып, кешенең мөмкинлегенә ҡарап, ваҡытты оҙайтыуы ла ихтимал. Ошо йәшәгән ваҡытта кеше бер тин дә түләмәй, бөтөн сығымдарҙы ҡала хакимиәте күтәрә. Кеше шундай ауыр ҡайғы, юғалтыу кисергәндә йәшәү урыны биреү ҙә ҙур ярҙам. Шок торошонан сыҡҡас, улар яйлап үҙ хәленә ҡайта, проблеманан сығыу юлын эҙләй. Беҙҙең хеҙмәткәрҙәр методик, юридик (ниндәй программалар бар, ҡайҙа сиратҡа торорға мөмкин), медицина, психологик ярҙам күрһәтә. Бынан тыш, төрлө байрамдар ойоштораббыҙ, балаларға тәғәйенләнгән саралар үткәреп тораббыҙ, күңелдәрен күтәрергә тырышабыҙ. Нигеҙҙә, янғын оло йәштәгеләр йәшәгән фатирҙарҙа сыға, шунлыҡтан, фондта оло йәштәгеләр ҙә байтаҡ. Бер кемде лә ла иғтибарһыҙ ҡалдырмайбыҙ, был күренештең ваҡытлыса ғына икәнен аңлатырға тырышабыҙ. Халыҡ та бәләгә тарыусыларға ярҙам ҡулы һуҙырға тырыша, кейемһалым, башҡа кәрәк-яраҡ менән ярҙам итә.

*Ҡотҡарыу хеҙмәтенең филиалы булып торған Ғәҙәттән тыш торлаҡ фондыбыҙ янғынынан, башҡа ғәҙәттән тыш хәлдән һуң фатирһыҙ, йорт-ҡыйыҡһыҙ ҡалған кешеләргә ярҙам итә. Уларға ярты йылға ваҡытлыса ошо йорттан торлаҡ бирелә. Бүлмәме ул, койка-урынмы, иң мөһиме - кеше урамда ҡалмай. Ваҡыты ярты йыл тип билдәләнһә лә, торлаҡ комиссияһы йыйылып, кешенең мөмкинлегенә ҡарап, ваҡытты оҙайтыуы ла ихтимал. Ошо йәшәгән ваҡытта кеше бер тин дә түләмәй, бөтөн сығымдарҙы ҡала хакимиәте күтәрә. Кеше шундай ауыр ҡайғы, юғалтыу кисергәндә йәшәү урыны биреү ҙә ҙур ярҙам. Шок торошонан сыҡҡас, улар яйлап үҙ хәленә ҡайта, проблеманан сығыу юлын эҙләй. Беҙҙең хеҙмәткәрҙәр методик, юридик (ниндәй программалар бар, ҡайҙа сиратҡа торорға мөмкин), медицина, психологик ярҙам күрһәтә.*

**Х. Ниғәмәтйәнов:** Ҡала муниципаль янғынға ҡаршы хеҙмәт бар, уның отрядтары Өфөнән алыҫ булмаған 8 Март, Нуғай, Чесноковка, Цветы Башкирии, Максимовка ауылдарында урынлашҡан. Мәҫәлән, янғын осрағында Һупайлынан Чесноковкаға барып еткәнсе күпме ваҡыт кәрәк, ә ундағы отряд 3 минутта урында була. Барлыҡ эҙләү-ҡотҡарыу, янғын һүндереү отрядтары беренсе ярҙам күрһәтә ала. Бигерәк тә юл-транспорт фажиғәһе ваҡытында секунд-минуттар ҙур роль уйнай, шуға был хеҙмәттәр барыһы ла төүге ярҙам күрһәтә белергә тейеш.

**Р. Абдуллин:** Шулай уҡ уҡытыу-методик үҙәк бар. Унда халыҡтың барлыҡ ҡатламдарын да уҡытабыҙ, граждандар оборонаһы өлкәһе белгестәренең белемен камиллаштырабыҙ. Балалар, мәктәп уҡыусылары араһында ҙур аңлатыу эштәре алып барабыҙ. Мәктәптәрҙә кадет кластары асабыҙ, һөнәр һайлау буйынса йүнәлеш бирәбеҙ.

**▸ Ошо көндәрҙә Псков өлкәһендәге фажиғә буйынса бер фекер мейегә уйылып ҡалды: үҙ-үҙҙәренә ҡул һалыусы 15 йәшлек үҫмерҙәр социаль селтәрҙә онлайн кәңәш һорай, әммә бер генә кеше лә уларҙы тынысландырыусы яуап бирмәй, уларҙы ҡотҡарырға килгән полиция хеҙмәткәрҙәре араһында психолог булмауы ла фажиғәгә бер этәргес булғандыр, моғайын, сөнки үҫмерҙәр менән проблеманы асыҡлап, бергә ҙә диалог алып бармай. Ә һеҙҙә психологтар бармы?**

**Х. Ниғәмәтйәнов:** 112 хеҙмәтендә һәр сменала дежурҙа бер психолог эшләй. Сөнки шундай ваҡыттар ҙа була, кемдер үҙ-үҙенә ҡул һалыу сигенә еткән һәм һуңғы аҙымға барыр алдынан, йәки мүйынын элмәккә тыҡҡас, 112 һандарын йыя. Психолог шунда уҡ уның торошон самалап, һөйләшеүҙәр алып бара. Кешене элмәктән, юғары ҡаттан ташланыуҙан һаҡлап ҡалған осраҡтар бик күп булды. Кәрәк икән,

✓ ***Ысынлап та, халыҡ ҡулланыусы психологияһы менән йәшәй. Ҡайһы берҙә ябай ғына мәсьәлә буйынса ла беҙгә шылтыраталар. Халыҡ кемдер уға нимәләр тейеш тип ҡарамаһын, саҡ ҡына үҙенең хәүефһеҙлеген үҙе лә уйлаһын ине.***

# ҺӨНӘР БАР - hаҡлау!

**Кризис шарттарында мөрәжәғәттәр артамы, әллә, киреһенсә, иҡтисади хәлебеҙ көндәлек проблемаларҙы ла көрсөккә терәйме?**

**Р. Абдуллин:** Статистика буйынса, артыҡ үҙгәрештәр юҡ, бер кимәл һаҡлана. Ғәҙәттән тыш ваҡиғалар ҙа йыл һайын ҡабатланмай бит, йылынан-йыл тура килмәй. 10 йыл элек, мәҫәлән, йәйгеһен һыуҙа 200-250 кеше батып үлә ине, быйылғы эҫе йәйҙә 15 кеше менән ошо фажиғә булды. Был - рөхсәт ителмәгән урындарҙа һыу инеүселәр буйынса статистика. Рөхсәт ителгән пляждарҙа фажиғәле хәлдәр күҙәтелмәне, сөнки уларҙа ҡотҡарыусылар, йәмәғәт ҡотҡарыусылары эшләне. Йәйгеләккә Өфө авиация техник һәм Өфө нефть техник университеттары студенттарын эшкә алабыҙ. Улар үҙҙәрен яҡшы яҡтан күрһәтә, ҡайһы берҙәре йыл һайын килә. Уҡытыу үҙәгендә уҡып, йәмәғәт ҡотҡарыусыһы булып эшләйҙәр.

Яңғындарҙа ла 10-15 йыл элек 120-150 кеше һәләк була ине, был һан да йылдан-йыл кәмей, 60-50-гә ҡала, былтыр иһә 33 кеше һәләк булды. Шулай уҡ эш урынында бәхетһеҙлек осраҡтары булғылай. Уларҙың күбеһе тәҙәлөш майҙандарында күҙәтелә. Улар араһында үлем осраҡтары булғанда, нигеҙҙә, быға хәүефһеҙлек ҡағиҙәләрен һанламау сәбәп булып тора. Хәҙер йорттар 4-5 ҡатлы ғына түгел, бейек итеп һалына. Тәүҙә кеше бөтөн ҡағиҙәләрҙе үтәргә, инструктаж буйынса эшләргә тырыша. Бер ни тиклем ваҡыттан был ғәмәлдәрҙе күҙ йомоп та башҡара алғанын тоя, йәғни автоматик рәүештә эшләй башлай. Әммә бәхетһеҙлек бит бер генә була, мең тапҡыр траптан бер ни булмайынса үтеп йөрөп тә, мең дә беренсеһендә аяғын тайып китеүе мөмкин. Шуға, төп сәбәп хәүефһеҙлек ҡағиҙәләрен һанға һуҡмау һәм үтәмәү. Ер эштәрендә лә шундай уҡ күренеш, ҡарап торһаң, ябай ғына ғәмәлдәр кеүек: торба тишелә, һыу аға, уны алмаштырыр өсөн ерҙе ҡаҙалар, торбаның тишелгән урынын иретеп йәбештереү өсөн хеҙмәткәр соҡорға төшә - шул арала ер ҙә емерелә. Бындай миҫалдарҙы әллә күпме килтерергә мөмкин. Һәр кем үҙ ғүмере өсөн яуаплылыҡты үҙ ҡулына алһын һәм инструктаж ҡағиҙәләрен аныҡ үтәһен ине лә бит ул...

**Кадрҙарҙы һайлағанда ниндәй талаптарҙан сығып эш итәһегеҙ?**

**Х. Ниғмәтйәнов:** Иң мөһиме, әрме хеҙмәтен үткән һәм сәләмәт булһындар. Артабан йыл һайын медкомиссия үткәрелә. Бынан тыш, йылына ике тапҡыр физик әҙерлек буйынса зачет һәм имтихан тапшырыу мотлаҡ.

**Р. Абдуллин:** Кешене өс ай һынау ваҡыты менән эшкә алабыҙ. Кандидаттарҙы ентекле тикшерәбеҙ. Шулай уҡ хеҙмәткәр стресҡа ҡаршы тора алырлыҡ булырға ла тейеш. Мәйет күреп, үҙе иҫтән яҙып төрәрһә, ул ниндәй ҡотҡарыусы инде? Шундай мәлдәрҙә лә иҫәпкә алабыҙ һәм моргҡа алып барып, күнекмәләр, дәрестәр үткәрәбеҙ. Былай егеттәр эштең ауырлығын белеп киләләр. Бында "ҡотҡарыусы" тигән һүҙҙең ғорур яңғырауы ғына түгел, ә ысынлап та, кеше ғүмерҙәрен ҡотҡарыу беренсе урында тора. Хеҙмәткәрҙәр үҙҙәренең ошо бурысын яҡшы аңлай. Юғары профессионализм, класс өсөн өҫтәмә түләүҙәр бар, башҡа дәртләндереү сараларын ҡулланабыҙ.

**Дзержинскийҙың "Чекистың ҡулдары - таҙа, аҡылы - айыҡ, йөрәге ҡайнар булырға тейеш", тигән һүҙҙәре бар. Үҙегеҙҙең хеҙмәт тураһында нимә тип әйтер инегеҙ?**

**Р. Абдуллин:** Ҡотҡарыусы өсөн дә һалҡын ҡанлылыҡ һәм ҡайнар йөрәк кәрәктәр. Сөнки беҙ кемгәләр ярҙам күрһәтеп кенә ҡалмайбыҙ, кешенең бәләһен үҙебеҙҙеке кеүек ҡабул итәбеҙ. Ә түн йөрәктәр кешегә ярҙам итә һалып бармай. Шул уҡ ваҡытта һалҡын ҡанлылыҡ һәм айыҡ аҡыл да кәрәк, сөнки бөтөн күргән-кисергәндәреңде бер йөрәккә генә һыйҙырыу мөмкин түгел, беҙ ҙә кеше бит. Артабан эшмәкәрлекте дауам итергә, артабан йәшәргә кәрәк. Ҡотҡарыусыларҙың да ғаиләһе, ҡатындары, балалары бар. Эштән улар зыян күрергә тейеш түгел. Ҡайһы бер осраҡта ҡотҡарыусылар килеп еткәнсе кеше вафат була, был бик аяныслы. Әгәр тере булһа, беҙ мотлаҡ уның ғүмерен һаҡлап алып ҡалабыҙ. Быйыл көҙгөһөн Благовещенскиҙағы поста тороусы дневальный (улар бит көн, ваҡыт үткәреп кенә ултырмай, һыу акваторияһын ҡарап, тикшереп, күҙәтеп тора) һыуҙан нимәләр ағып килгәнен күреп, бер ҡыҙҙы ҡотҡарҙы. Ул Дуҫлыҡ монументы причалынан нисектер һыуға төшөп киткән дә, аҡҡан, ярай әле кейгән куртҡаһы балонья булған, шундағы һауа уны батырмай һаҡлап ҡалған. Ҡайһы берҙә күперҙән һикерәләр. Пост шуның өсөн дә күперҙәр эргәһендә тора. Уларҙы ла ҡотҡарып ҡалған саҡтар була.



***Ҡотҡарыусы өсөн дә һалҡын ҡанлылыҡ һәм ҡайнар йөрәк кәрәктәр. Сөнки беҙ кемгәләр ярҙам күрһәтеп кенә ҡалмайбыҙ, кешенең бәләһен үҙебеҙҙеке кеүек ҡабул итәбеҙ. Ә түн йөрәктәр кешегә ярҙам итә һалып бармай. Шул уҡ ваҡытта һалҡын ҡанлылыҡ һәм айыҡ аҡыл да кәрәк, сөнки бөтөн күргән-кисергәндәреңде бер йөрәккә генә һыйҙырыу мөмкин түгел, беҙ ҙә кеше бит. Артабан эшмәкәрлекте дауам итергә, артабан йәшәргә кәрәк. Ҡотҡарыусыларҙың да ғаиләһе, ҡатындары, балалары бар. Эштән улар зыян күрергә тейеш түгел. Ҡайһы бер осраҡта ҡотҡарыусылар килеп еткәнсе кеше вафат була, был бик аяныслы. Әгәр тере булһа, беҙ мотлаҡ уның ғүмерен һаҡлап алып ҡалабыҙ. Быйыл көҙгөһөн Благовещенскиҙағы поста тороусы дневальный һыуҙан нимәләр ағып килгәнен күреп, бер ҡыҙҙы ҡотҡарҙы.***

**Зыян күреүселәргә һәр төрлө ярҙам күрһәтелә, ә бына шундай ҡатмарлы, ауыр, әммә изге эш башҡарыусы ҡотҡарыусылар үҙҙәре психологик ярҙам аламы? Улар ҙа бит шундай уҡ кеше, уларҙың да йөрәге таш, организмы тимер түгел, улар ҙа һыныуы мөмкин... Төрлө фажиғәләр психикаһын, сәләмәтлеген яйлап ашайҙыр, моғайын...**

**Х. Ниғмәтйәнов:** Хеҙмәткәрҙәр даими рәүештә МВД-ның республика реабилитация үҙәгендә сәләмәтлеген нығытып тора. Үҙебеҙ ҙә ҡарап, күреп, күҙәтеп йөрөйбеҙ бит, саҡ ҡына үҙгәрештәр күрһәк, шунда уҡ реабилитация үҙәгенә ебәрәбеҙ. Шулай уҡ уларҙың отпускылары ла стажына ҡарап оҙайлыраҡ - 45 көнгә етә. Шулай уҡ отрядта, дүрт сменаның һәр берәһендә табип бар. Психологтарыбыҙ ҙа бик тәжрибәле. Сменаға килгәндә уҡ хеҙмәткәрҙәр ентекле тикшереү үтә. Әгәр табип рөхсәт итмәһә, эшкә индерелмәй һәм уның урынына икенсе сменалағы хеҙмәткәр саҡырыла.

**Р. Абдуллин:** Эшләү өсөн барлыҡ унайлыҡтар: матур, яҡшы бина, яҡшы йыһаз һәм ҡорамалдар, релаксация зоналары, унайлы йоҡо бүлмәләре, кухня бар. Хеҙмәткәрҙәрҙең ниндәй торошта икәнен белеү өсөн даими күнекмәләр үткәрелә, унда физик әҙерлек кенә тикшерелмәй, ә комплекслы тикшереү бара.

**Рәсәйҙең тағы ниндәй төбәктәрендә шундай хеҙмәттәр бар?**

**Р. Абдуллин:** Беҙҙәге кеүек комплекслы хеҙмәт башҡа бер ҡалала ла юҡ, тип әйтә алам. "Ҡотҡарыу хеҙмәте 112", янғынға ҡаршы муниципаль һаҡ, йәмәғәт хәүефһеҙлеге үҙәге - бары тик беҙҙә генә. Уларҙың һәр ҡайһыһы үҙ эшен башҡара, шул уҡ ваҡытта ҡала округы хакимиәте башлығы ҡарамағында дөйөм "Хәүефһеҙ ҡала" проектын барлыҡҡа килтерә, шундай көслө, ҡеүәтле, мобиль, оператив төркөмдәр бары тик Өфөлә генә һәм улар ҡала бюджеты иҫәбенә булдырылған, ҡала хакимиәте башлығы Ирек Ишмөхәмәт улы Ялаловтың ҙур көсө.

Ҡаҙанда ла ошондай хеҙмәт булдырырға тырышып ҡаранылар, ләкин килеп сыҡманы. Курскиҙа өлкә хеҙмәте бар, әммә айырма шунда: ул - өлкә хеҙмәте, беҙ - муниципаль.

психолог ҡотҡарыусылар менән бергә ваҡиға урынына бара. Йылы һүҙ - йән аҙығы, тип юҡҡа ғына әйтмәйҙәр инде. Кешегә, бәлки, һөйләшергә, күңелендә йыйылғанды кемгәләр һөйләргә генә кәрәктер. Әгәр таныштары, туған-тыумасаһы, дуҫ-иштәре, ваҡыт юҡ, һуңынан, тип телефон трубкаһын һүндерер ҡуйһа, беҙҙең хеҙмәткәрҙәр бер ваҡытта ла трубканы ташламай, әгәр шылтыратҡандар икән, тимәк, башҡаса шылтыратыр кешеһе булмаған, тимәк, ярҙам кәрәк. Шуға беҙ хеҙмәткәрҙәргә аңлатырға тырышабыҙ: тупаҫлыҡ, тауыш күтәреү ярамай, яуаптар ҡәтғи этикет талаптары буйынса бирелергә тейеш. Кешене һуңғы аҙым яһауҙан ҡотҡарып ҡалыуҙа, әлбиттә, психологтарыбыҙҙың профессионализмы ҙур роль уйнай.

**Хәҙер ни генә булһа ла халыҡ тота ла 112 номерын йыя. Был хеҙмәт халыҡтың яуаплылығын кәметмәнеме?**

**Х. Ниғмәтйәнов:** Дөрөҫ әйтәһегеҙ, ысынлап та, халыҡ ҡулланыусы психологияһы менән йәшәй. Ҡайһы берҙә ябай ғына мәсьәлә буйынса ла беҙгә шылтыраталар. Мәҫәлән, "Вокзалға нисек барырға?", "Һыуыҡ, мин өшөйөм", "Урманда аҙаштым, ҡайҙа барырға белмәйем". Тайгала булһа, бер хәл, йылға аша ғына, тирә-яҡта машиналар тауышы ишетелеп тора, ә шунда кеше "аҙаштым", тип ҡотҡарыу хеҙмәтенә шылтырата. Тауыш булған яҡҡа сығығыҙ, тиһең, юҡ, уларҙы барып, алып сығырға кәрәк. Өс ҡайын араһында юғалалар. Кешелә яуаплылыҡ кәмене, тиер инем. Йә иһә иртә яҙ йәки дача сезоны бөткәс, кеше яллап, йылға аша дачаларына сығалар ҙа, унда һунға ҡалалар, һуңынан беҙгә шылтыраталар. Ҡағиҙә булараҡ, төнгө 11-ҙән һуң йылғаға катер менән төшөргә ярамай. Тик нишләйһең, балалары илаша, йә һыуыҡ, йә тағы нимә - алып сығырға тура килә. Халыҡ кемдер уға нимәләр тейеш йәки бурыслы тип ҡарамаһын, саҡ ҡына үҙенең хәүефһеҙлеген, имени лереп үҙе хәстәрләргә, уйларға өйрәнһен ине.

**Ошо эшмәкәрлек осоронда бер тапҡыр булһа ла "Нимәгә ошо юлды һайланым икән?" тигән үкенеү булманымы?**

**Х. Ниғмәтйәнов:** 17 йәштән хәрби училищеға инеп, барлыҡ аңлы ғүмеремде Оборона министрлығы сафтарында хеҙмәт итеүгә бағышлағас, үкенеү юҡтыр, тием. Әгәр ниндәйҙер шик йәки үкенеү булһа, йәш саҡта булыр ине. Ә хәҙер беҙ ошо хеҙмәт менән бер йән, бер тәнгә әүерелгәнбеҙ.

**Р. Абдуллин:** 33 йыл янғынға ҡаршы хеҙмәт системаһында эшләнем. Хәҙер инде, система тиһәк, мин күҙ алдына баҫам, мин тигәндә - тотош система күҙ алдына килә, тиергә мөмкин. Бер организм булып үҫешкәнбеҙ, хатта тәүлек әйләнәһенә телефондан һөйләшергә лә, байрамдарһыҙ, ялһыҙ эшләргә лә, табын артынан, спектакль-концерттарҙан тревога буйынса тороп сығып китергә лә өйрәндек. Беҙ генә түгел, хатта ғаилә ағзалары ла ошо йәшәү рәүешен ҡабул итте, күнде.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**"Яҡла. Һаҡла. Ҡотҡар". Был ябай ғына һүҙҙәр түгел. Иң ауыр саҡтарында кеше, үҙе лә һиҙмәҫтән, Юғары көскә мөрәжәғәт итеп, ошо һүҙҙәрҙе бер туктауһыҙ ҡабатлайҙыр, моғайын. Бәлки, уларҙың һүҙҙәрен ишетеп, эргәләренә ҡотҡарыусылар ашығалыр. Юҡҡа ғына Өфө ҡалаһының Граждандарҙы һаҡлау идаралығы ҡарамағындағы хеҙмәттәр өсөн ошо ябай һүҙҙәр тормош рәүешенә әйләнмәгәндер: "Яҡла. Һаҡла. Ҡотҡар".**

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ әңгәмәләште.**

✓ *Этәс: Сыҡ, төлкө! Мин был йылдың хужаһы! Башҡалар кеүек ҡурҡып ҡына китмәҫмен! Мин был йылға хужа булырға килдем!*



ЯҢЫ ЙЫЛ СЦЕНАРИЙЫ

# ТӨЛКӨ, ӘТӘС ҺӘМ ҠАРҺЫЛЫУ

**(Башҡорт халыҡ әкиәтенә эйәреп)**



***Сәхнә уртаға бүленгән, уртала ишек. Бер яҡта - Ҡыш бабайҙың йорт эсе, икенсе яҡта - ҡышҡы урман. Ике яҡ та аҡ ҡарға төрөнгән. Йорт эсендә өҫтәл, ултырғыстар, көҙгө кеүек йорт йыһаздары бар, улар барыһы ла боҙҙан. Тышта биҙәлгән шыршы. Сәхнә асылғанда Ҡыш бабай оло тоғон йөкмәп, ишек төбөндә хушлаша. Ҡарһылыуға һуңғы теләктәрен еткерә.***

**Ҡыш бабай:** Ҡарһылыу, һин урман йәнлектәренә тигән бүләктәрҙе онотоп ҡуйма. Барыһын да барлап, әҙерләп ҡуй. Бер генә йән эйәһе лә онотолоп, бүләкһеҙ ҡала күрмәһен.

**Ҡарһылыу:** Ярай, олатай, борсолма, шулай итермен. Һин үҙең дә ашыҡ, боландар егелгән, түҙемһеҙләнеп һине көтәләр.

**Ҡыш бабай:** Ярар, ҡыҙым! Мин ауыл-ҡалаларҙы урап, балаларҙы ҡотлап йөрөп килгәнсе, имен-аман тороғоҙ!

***Ҡыш бабай ишекте асып сыға. Буран ыжғырған тауыш. Стеналағы экранда һауанан санаға егелгән боландар осоп килеп төшә. Ҡыш бабай китә.***

***Ҡарһылыу күңелле көй аҫтында һандыҡтан бүләктәр сығара. Уларҙы кескәй муҡсаларға һалып, барлап йөрөй. Тышта Төлкө пәйҙә була. Ул тәҙрә аша Ҡарһылыуҙы күҙәтеп тора.***

**Төлкө:** Әһә-ә! Бына ҡайҙа икән бүләктәр ояһы!

***Күҙәтеүҙе дауам итә.***

**Төлкө:** Был хәтлем байлыҡты таратып йөрөргә алйоттор ул был Ҡыш бабай. Ҡарһылыуы ла килешкән, әҙерләп ултыра. Был бүләктәр бары миңә генә булырға тейеш. Ҡулға алырға кәрәк был эште, ни өсөн минең исемем Хәйләкәр әле!

***Төлкө ҡарға ятып аунап, өҫ-башын йолҡҡолап, бахыр ғына төҫ ала һәм ишек шаҡый. Бер шаҡый, ике шаҡый, эстә ишетмәйҙәр. Ахырҙа, асыуланып китеп, ишеккә тибеп ебәрә. Ҡарһылыу килеп аса. Төлкө тиҙ генә мәхлүк хәленә инеп өлгөрә.***

**Төлкө:** Эй, һылыу ҡыҙыҡай, мин бик күп ерҙәр үтеп килгән бер бисара йәнлек. Йәшәр урыным, һыйыныр мөйөшөм юҡ. Бик асыҡтым, өшөнөм. Мине бер төн генә ҡундырып сығарһаңсы...

**Ҡарһылыу:** И-и, бахырҡай! Ҡайһылай туңғанһың, өҫтөңдә лә йоҡа ғына. Әйҙә-әйҙә, түрҙән уҙ!

***Төлкө йүгереп эскә үтә.***

**Ҡарһылыу:** Тик беҙҙә лә артыҡ йылы түгел, был бит Ҡыш бабайҙың йорто.

**Төлкө:** Бара-бара, миңә ышыҡ урын, йылы һүҙ булһа ла етә.

***Төлкө бер урынға ғына ултырып, тәртипле төҫтә Ҡарһылыуҙың бүләктәр айырғанын ҡарап ултыра. Үҙенең күҙҙәре ялт-йолт килә. Ҡарһылыу бер бүләкте алып Төлкөгә күрһәтә.***

**Ҡарһылыу:** Ошо бүләккә, тағы ла матурыраҡ булһын өсөн, ниндәй биҙәк өҫтәргә икән?

**Төлкө:** Яңы ғына яуған ҡар бөртөктәре өҫтәргә кәрәк, Ҡарһылыу. Тышта шундай матур ҡар яуа, алып сыҡ та бүләгеңде, ҡар аҫтында тотоп тор. Шул ваҡыт ул мең төҫлө нағыштар менән баҙырап китер.

**Ҡарһылыу:** Рәхмәт, төлкө, бик аҡыллыһың икән, шулай итәйем әле.

***Ҡарһылыуҙың сығыуы була, Төлкө уның артынса шалтырлатып йоҙаҡты элә. Ҡарһылыу ишекте тартып ҡарай, асылмай, шаҡый.***

**Ҡарһылыу:** Ни эшең был, Төлкө? Ас ишекте!

**Төлкө:** Асмайым да, йөрөмә лә! Әллә күпме бүләктәрҙе бушҡа таратып ултырған иҫәр ҡыҙ һин!

**Ҡарһылыу:** Унда һиңә лә бүләк бар, ас инде ишекте!

**Төлкө:** Бар-бар! Юлыңда бул! Асмайым, көтмә лә!

***Ҡапыл буран ыжғырыуы көсәйеп китә. Ул йорттағы күңелле көйҙө лә баҫа, яйлап сәхнә ҡараңғылана ла, ҡабаттан яҡтыра. Был ваҡытта Ҡарһылыу тышта илап тора. Төлкө өйҙә түр башында сәй эсеп ултыра.***

**Ҡарһылыу**: Ҡыш бабайҙың наказдарын үтәп тә өлгөрмәнем. Ҡалай ғына итәргә икән хәҙер. Күпме балаларҙы, йәнлектәрҙе бүләкһеҙ ҡалдырҙым.

***Илай. Айыу килеп инә.***

**Айыу:** Иҫәнме, Ҡарһылыу! Ниңә былай бойоҡһоң әле? Мин бында күңелле байрам баралыр, балаларыма бүләктәр алып ҡайтайым, тип, йоҡомдо бүлеп килһәм...

**Ҡарһылыу:** Эй, айыуҡай, төлкө хәйлә менән өйөмә инде, йылынды, ашаны, унан ярҙамын тәҡдим итте. Унан мине ҡыуып сығарҙы, бүләктәремде тартып алды. Ҡыш бабай булмағас, бер хәл дә итә алмайым.

**Айыу:** Вәт, хәйләкәр, хәҙер иманын уҡытам мин уның!

***Айыу килеп ишек шаҡый.***

**Төлкө:** Кем бар унда?

**Айыу:** Төлкө-ҡыҙыл ҡойроҡ! Сыҡ, бушат Ҡарһылыуҙың йортон! Ҡойроғоңдо өҙөп алып, шыршыға ҡаҙармын, юғиһә!

**Төлкө:** Сығырмын, мин сыҡтиһәм, башың-күҙең ҡан булыр!

**Айыу *(ҡалтырап төшә):*** Ай-бай, был бит беҙҙең урман төлкөһө түгел. Был бик ҡурҡыныс кейек.

***Айыу сығып ҡаса. Ҡарһылыу битен ҡаплап ултыра. Бүре килеп инә.***

**Бүре:** Иҫәнме, Ҡарһылыу! Ниңә былай бойоҡһоң әле? Мин бында күңелле байрамдыр, һинең тәмле күстәнәстәреңдән ауыҙ итәйем, тип киләм.

**Ҡарһылыу:** Эй, Бүребай, төлкө хәйлә менән өйөмә инде, йылынды, ашаны, унан ярҙамын тәҡдим итте. Унан мине ҡыуып сығарҙы, бүләктәремде тартып алды. Ҡыш бабай булмағас, бер хәл дә итә алмайым.

**Бүре:** Үәт, хәйләкәр, хәҙер иманын уҡытам мин уның!

***Бүре килеп ишек шаҡый.***

**Төлкө:** Кем бар унда?

**Бүре:** Төлкө-ҡыҙыл ҡойроҡ! Сыҡ, бушат Ҡарһылыуҙың йортон! Ҡойроғоңдо өҙөп алып, шыршыға ҡаҙармын, юғиһә!

**Төлкө:** Сығырмын, мин сыҡтиһәм, башың-күҙең ҡан булыр!

**Бүре *(ҡалтырап төшә):*** Ай-бай, был бит беҙҙең урман төлкөһө түгел. Был бик ҡурҡыныс кейек.

***Бүре сығып ҡаса. Ҡарһылыу битен ҡаплап ултыра. Эт килеп инә.***

**Эт:** Иҫәнме, Ҡарһылыу! Ниңә былай бойоҡһоң әле? Мин бына һунарға сыҡтым да, урманда бүләктәр таратылғанын ишетеп, моғайын, Ҡарһылыу мине лә онотмағандыр, тип киләм.

**Ҡарһылыу:** Эй, Алабай, төлкө хәйлә менән өйөмә инде, йылынды, ашаны, унан ярҙамын тәҡдим итте. Унан мине ҡыуып сығарҙы, бүләктәремде тартып алды. Ҡыш бабай булмағас, бер хәл дә итә алмайым.

**Эт:** Үәт, хәйләкәр, хәҙер иманын уҡытам мин уның!

***Эт килеп ишек шаҡый.***

**Төлкө:** Кем бар унда?

**Эт:** Төлкө-ҡыҙыл ҡойроҡ! Сыҡ, бушат Ҡарһылыуҙың йортон! Ҡойроғоңдо өҙөп алып, шыршыға ҡаҙармын, юғиһә!

**Төлкө:** Сығырмын, мин сыҡтиһәм, башың-күҙең ҡан булыр!

**Эт *(ҡалтырап төшә):*** Ай-бай, был бит мин һунар иткән төлкө түгел. Был бик ҡурҡыныс кейек.

***Эт сығып ҡаса. Ҡарһылыу битен ҡаплап ултыра. Әтәс килеп инә.***

**Әтәс:** Кикири-күүк! Иҫәнме, Ҡарһылыу! Бында күңелле байрам баралыр, мине түҙемһеҙләнеп көтәләрҙер, тип киләм. Нимә булып китте?

**Ҡарһылыу:** Төлкө хәйлә менән өйөмә инде, үҙемде ҡыуып сығарҙы. Айыу килде - ҡыуа алманы, бүре килде - ҡыуа алманы, эт килде - ҡыуа алманы. Ҡыш бабайҙы көтөүҙән башҡа сарам юҡ инде.

**Әтәс:** Хәҙер мин ул хәйләкәрҙе дөрөп сығарам! Бөтөн урманды байрамһыҙ ҡалдырырға хаҡы юҡ уның!

**Ҡарһылыу:** Ҡурҡмаҫ ул һинән, Әтәс батыр, уны бик уҫал, тиҙәр.

**Әтәс:** Төлкө! Сыҡ Ҡарһылыу йортонан! Эҙең булмаһын бында!

**Төлкө:** Сығырмын, мин сыҡтиһәм, башың-күҙең ҡан булыр!

**Әтәс:** Сыҡ, төлкө! Мин был йылдың хужаһы! Башҡалар кеүек ҡурҡып ҡына китмәҫмен! Мин был йылға хужа булырға килдем!

***Төлкө эстә йүгермәләп алып китә, бер тәҙрәгә, бер ишеккә бара. Өҫтәл аҫтына, һандыҡ эсенә йәшенеп ҡарай. Әтәс тағы ҡысҡыра, уның тауышы урманды яңғырата.***

**Әтәс:** Кикири-күүүүк! Елкәмдәге салғым менән хәҙер төлкөнө сабып үлтерәм. Әйҙә, төлкө, ҡасып ҡотол!

***Төлкө тамам ҡурҡып, йорттан йүгереп сығып ҡаса. Әтәс уның артынан "Кикири- күүк!" тип ҡысҡырып ҡала.***

**Ҡарһылыу:** Ҙур рәхмәт һиңә, батыр Әтәс! Һин килеп тә өлгөрҙөң, үҙеңде күрһәтеп тә өлгөрҙөң! Һиңә йылды ышанып тапшырырға ла була!

***Шул ваҡыт шаулап йәнлектәр инә. Ҡарһылыу уларға бүләктәр тапшыра. Бергәләшеп шыршы тирәләй йырлап-бейешеп әйләнәләр.***

**Ҡарһылыу:**

Ҡойроғо ураҡ,
Башында тараҡ.
Ул килгәс ҡасты
Иң уҫал ҡараҡ.
Ҙурлайыҡ уны,
Маҡтайыҡ уны,
Ҡош ҡына, тиеп,
Ҡаҡмайыҡ уны.
Әтәстең йылы
Быйыл илемдә.
Иң изге теләк,
Уға телемдә.

***Ҡыш бабай инә.***

**Ҡыш бабай:** Һаумыһығыҙ, йәнлектәр! Һаумы, Әтәс батыр! Һинең эштәреңде ишетеп киләм! Йыл һинеке, шулай булғас, барыһының да именлеге һинең ҡулда! Ышанам һиңә!

**Әтәс:** Рәхмәт, Ҡыш бабай! Рәхмәт, дуҫтар! Мин һеҙҙең ышанысты аҡлау өсөн тырышырмын! Йылыбыҙ тыныс, матур булып үтһен! Барыһы ла үҙ өңөндә, үҙ йортонда бәхетле булһын!

***Байрам дауам итә. Йыр-бейеү, уйындар.***

**Әлиә ИСМӘҒИЛЕВА.**

✓ *Бөгөн профессиональ музыка тигән генә түгел, профессиональ композитор тигән төшөнсә юғалып бара. Бөгөн сәхнәләрҙә композитор йырҙары етешмәй. Профессиональ йырсыны композитор йырҙары ғына үҫтерә ала.*



МИЛЛӘТ БАЛҠЫШЫ

**Стәрлетамаҡ филармонияһы - ошо төбәктә йәшәгән халыктарҙың мәҙәниәтен сағылдырған үҙенсәлекле сәнғәт усағы булараҡ билдәле. Унда төрлө милли ансамблдәр бер сәхнәлә ижад итә. Мәҙәни институт булараҡ, филармониялар бөгөн ниндәй хәлдә? Ысынында һүҙҙә генә булған, шулай ҙа тотош армия һәүәҫкәр йырсыларға йәшел юл асҡан "шоу-бизнес" халыҡҡа профессиональ сәнғәт тәҡдим иткән филармонияға ниндәй уңайһыҙлыҡтар тыуҙыра? Ошо һәм башҡа һорауҙарға 25 йыллыҡ юбилейҙары айҡанлы редакциябыҙға йыйылған стәрлетамаҡтар - "Ашҡаҙар" башҡорт эстрада-фольклор төркөмө солисы, Башҡортостандың атҡаҙанған артисы Ғәзинур ХУЖАХМӘТОВ, Бейеү театры солисы, Башҡортостандың атҡаҙанған артисы Рәил ЛОҠМАНОВ, музыка белгесе, лектор Гөлназ РӘХМӘТУЛЛИНА менән әңгәмәләшәбеҙ.**



# БАШҠОРТОСТАН ФИЛАРМОНИЯЛАРЫ...

## милли ерлектән айырылманы

➔ **Бөгөнгө көндә тотош илдә филармониялар еңел булмаған осор кисерә кеүек. Суверенитет емештәре булған республика филармонияларының хәле нисек бөгөн? 25 йыллыҡ ижад байрамын билдәләгәндә филармония асылған ғына мәлдәге күңел күтәренкелеге тойоламы артистарҙа?**

**Ғ. Хужахмәтов:** Стәрлетамаҡ филармонияһына нигеҙ һалған "Ашҡаҙар" башҡорт эстрада-фольклор төркөмө лә, филармонияның тағы 4 коллективы - Әҙәби-музыкаль лекторий ҙа, Бейеү театры ла, Рус халыҡ музыка ҡоралдары оркестры ла, "Сарби" сыуаш эстрада-фольклор ансамбле лә, һәр ваҡыттағыса, ҙур теләк һәм тырышлыҡ менән эшләп йөрөйбөҙ. Һәр бер коллектив заман талаптарына яуап бирерлек эҙләнеү юлында. "Ашҡаҙар" төркөмөнөң төп бурыстарының береһе - башҡорт халҡының мәҙәниәтен, ғөрөф-ғәҙәттәрен, тарихыбыҙҙы көймөндар аша еткереү. Әлбиттә, филармониялар фестивалдәре үткән ваҡыттарҙа тотош республикаға шаулаған мәлдәр ҙә булды. Республиканың 5 филармонияһында ла яңы бейеүҙәр һалына, яңы йырҙар һайлана ине. Бына ошолай үҙ-ара аралашып йәшәү етмәй бөгөн. Бөтәбеҙ бергә бер ижади майҙанда инек ул мәлдә, ошондай мөхиттә милли сәнғәт тә ышаныслы, һөҙөмтәле үҫеш юлында ине.

**Р. Лоҡманов:** Заманалар ауыр, тип йәшәһәң, бөтөнләй күңел төшөнкөлөгөнә бирелергә була. Бейеү театры 2000 йылға тиклем айырым йәшәне, ә ул асылған ғына мәлдә Хәлил ағай Ишбирҙин Стәрлетамаҡ мәҙәниәт техникумынан, ауылдарҙан бейеүселәр йыйып алып килде. Хатта эш хаҡы алмай эшләгән мәлдәр була торғайны. Күңелдәрҙә рух, халҡыбыҙҙың мәҙәниәтенә тоғро хеҙмәт итергә теләк булһа, ҡалған ваҡ-төйәккә иғтибар итмәйһең ул. Шулай ҙа Ҡаҙан ҡалаһының юғарыраҡ эш хаҡы тәҡдим итеп, бейеүсе егеттәребеҙҙе үҙ яғына ауҙарыуына йән әсей. Рух тигәндән, мин 20 йылға яҡын балалар менән эшләйем, бөгөн ата-әсә балаһы менән туған телендә һөйләшмәүен күреп йөрөйөм. Мин иһә, тәрбиәләнеүселәрем менән тик башҡортса ғына һөйләшәм. Тимәк, талап итеп булһа ла, туған телдә аралашырға кәрәк, сөнки милләтте, тәү сиратта, тел һаҡлай. Туған телдә һөйләшәбеҙ икән, рух та була.

**Г. Рәхмәтуллина:** Башҡортостандағы филармонияларҙың Рәсәйҙә мәҙәниәт менән сәнғәткә бөтөнләй иғтибар булмаған дәүерҙә барлыҡҡа килеүен иҫәпкә алғанда, мин үҙебеҙҙе етди һынауҙар үтеп, хәҙер инде биле нығынған, үҙенең һуҡмағы һалынған сәнғәт усағы итеп ҡарайым. Беҙҙең филармонияны бына Ғәзинур ағай, Рәил ағай һымаҡ шәхестәребеҙ тотоп тора ла инде. Тап улар ундағы дөйөм кәйефте булдыра, йәштәрҙе тәрбиәләй. Әле бына йәштәр филармониянан китә, тинеләр, ләкин тормошон сәхнәнән тыш күҙ алдына ла килтермәгәндәр бер ҡайҙа ла китмәй ул. Әлбиттә, берәү ҙә уҡыу йортонан әҙер артист булып килмәй, уларҙы ошо ижади мөхит үҫтереп ала. Ауырлыҡтарға ҡарамайынса, кимәлебеҙҙе һаҡлайбыҙ, яңынан-яңы программалар әҙерләйбеҙ. Биш төркөм дә үҙ-ара дуҫ һәм татыу йәшәй, һәр беребеҙҙең үҙенә генә тәғәйен эше бар.

➔ **Бөгөнгө көндә филармонияларҙың хәҙерге заман менән бөтөнләй бәйләнеше юҡ һымаҡ. Был ойошмаларҙа профессиональ музыканттар, музыка белгестәре эшләй, әммә улар йәмғиәткә ҡыҙыҡ түгел, сөнки сәхнәләрҙе шоу-бизнес берәмектәре күптән баҫып алды. Тамашасы ла еңел-елпе йырҙарҙы күберәк тыңлай. Ошондай шарттарҙа филармониялар ҙа үҙгәрергә тейешме?**

**Г. Рәхмәтуллина:** Стәрлетамаҡ филармонияһының ғына түгел, ғөмүмән, республикала эшләгән филармонияларҙың барыһы ла шуныһы менән үҙенсәлекле - улар бер ҡасан да милли ерлектән айырылманы. Бына "Ашҡаҙар" башҡорт эстрада-фольклор төркөмөн генә алығыҙ, улар бөгөн башҡорт йырмоңон һаҡлаусы булараҡ сығыш яһай. "Сарби" сыуаш эстрада-фольклор ансамбле лә республикала берҙән-бер профессиональ ансамбль. Рус халыҡ музыка ҡоралдары оркестры ла үҙ йүнәлешендә шулай уҡ берҙән-бер профессиональ коллектив. Уларҙың һәр береһененң үҙенең тамашасыһы бар.

**Р. Лоҡманов:** Бейеү театрының исеме үк әйтеп тора - ул ғәҙәти генә бейеү ансамбле түгел. Бер актлы ғына булһа ла, 30-45 минутлыҡ хореографик спектаклдәр ҡуйыла ине элек. Уларҙы Хәлил Ишбирҙин әҙерләй ине. Уға, Рима апайға беҙ рәхмәтлебеҙ ошо театр өсөн һәм ул һаман да гөрләп эшләп килә. Тимәк, Бейеү театры - шулай уҡ уникаль күренеш башҡорт сәнғәтендә. Хәлил Ишбирҙиндан һуң театрға Риф Ғәбитов ҙур көс һалды, уны ла юбилей менән ҡотлайбыҙ. Әле лә унең бейеүҙәрен бейейбеҙ. Ситтән саҡырылған балетмейстерҙар менән дә эшләйбеҙ. Ваҡытында 10-12 пар бейеүсе тота инек, тырышһаң, бөгөн дә был һанға еткерергә була. Әле шул беҙҙең бәхетгә һуға - үҙебеҙҙең төп балетмейстер юҡ.

**Г. Рәхмәтуллина:** Унан һуң, беҙҙең артистар йәштәр менән дә эшләй. Мәҫәлән, Рәил Лоҡмановтың "Торатау" халыҡ ансамбле "Байыҡ" Республика балалар бәйгеһендә Гран-при яуланы, был да уларҙың юғары кимәле тураһында һөйләй. Күп кенә артистар Стәрлетамаҡ мәҙәниәт һәм сәнғәт колледжында уҡыта. Ошо йәштәр киләсәктә беҙгә эшкә килмәһә лә, тамашасы булып киләсәк барыбер, сөнки уларҙы үҙебеҙ тәрбиәләйбеҙ. Әҙәби-музыкаль лекторий ҙа классик темаларға мөрәжәғәт иткәндә уны һис кем аңламаҫлыҡ итеп әҙерләмәй. Шул уҡ ваҡытта классик музыкаға нигеҙләнгән программалар ҙа бар һәм уларҙы тамашасы яҡшы ҡабул итә.

➔ **Шулай ҙа тамашасы нимәгә өҫтөнлөк бирә, нимә тыңлай?**

**Ғ. Хужахмәтов:** Ысынлап та, бөгөн профессиональ музыка тигән генә түгел, профессиональ композитор тигән төшөнсә юғалып бара. Бөгөн сәхнәләрҙә композитор йырҙары етешмәй. Һәүәҫкәрҙәр насар, тигәндән әйтмәйем быны, әммә профессиональ йырсыны композитор йырҙары ғына үҫтерә ала. Әле яңы ғына Заһир Исмәғилевтың тыуыуына 100 йыл тулыуға арналған концерт ойоштороҡ, әммә унда хылыҡ ағылып килде, тип әйтеп булмай. Шул уҡ ваҡытта, ни эшләп башҡорт концерттарын аҙ ҡуяһығыҙ, тип мөрәжәғәт итеүселәр ҙә бар.

**Г. Рәхмәтуллина:** Филармонияларҙың төп бурысы ла бит - халыҡҡа профессиональ музыка тәҡдим итеү. Профессиональ йырҙар табыуы еңел түгел шул, ысынлап та. Шуға ла артистар ретро йырҙарға йышыраҡ мөрәжәғәт итергә мәжбүр була.

Тамашасыларға килгәндә, беҙҙең үҙебеҙҙең тамашасыбыҙ бар. Тик бөгөн йәшәү ритмы үҙгәрҙе һәм, элекке кеүек, тамашасы концертҡа үҙе теләп, ҡыҙыҡһынып килмәйәсәк. Шуға ла филармониялар эшен бер аҙ үҙгәртергә лә тейеш бөгөн, йәғни, баҙар иҡтисадына яраҡлашырға бурыслы. Концерт була, шул-шул артист сығыш яһай, тигән иғлан бер туҡтауһыҙ уның күҙенә салынып, ҡолағына ишетелеп торорға тейеш. Концерт администраторҙар тарафынан эшләнһә, зал тула була һәр саҡ. Ирекле һатыуға ҡуйыла икән, аҙыраҡ була, әммә был беҙҙең үҙебеҙҙең тамашасыны асыҡларға мөмкинлек бирә. Быға тиклем бит филармонияның үҙенең сәхнәһе лә булманы. Хәҙер уны башҡорт дәүләт театры менән бүлешһәк тә, концерттар һаны күбәйҙе тип әйтер инем. Бер ижад миҙгеле эсендә һәр коллектив аҙ тигәндә икешәр концерт бирә, ә берләштерелгән тамашалар тураһында әйтеп тораһы ла юҡ. Бейеү театрының концерттарына билет та булмай ҡайһы саҡта.

(Дауамы 15-се биттә).



✓ *"Ун һигеҙенсе быуаттағы күбәләк ырыуы ҡатын-ҡыҙҙарының селтәре өлгөһөндә эшләнем, - тине ул. - Был селтәрҙә бар биҙәктәр ҙә етешәрҙән: уртанан төшкән өс рәттә ете тәңкә, арҡыры баҫылған тәңкәләр ҙә ете рәт...*



ИНТЕРНЕТТАН



# ДАРЫУ...
## ағыуға әйләнмәһен

■ Ел, ҡар һәм түбән температура кешегә нисек тәьҫир яһай? Был турала ғалимдар ҙа уйланған һәм яңы тикшеренеү үткәргән. Белгестәр билдәләүенсә, ҡышҡы һауа торошоноң кире тәьҫире, тәү сиратта, иммунитеттың түбәнәйеүендә күренә. Ныҡ өшөүҙең дә кире йоғонтоһо бар. Ауыҙ аша һыуыҡ һауа менән тын алыу һөҙөмтәһендә үпкә мускулдарының ҡыҫылыуы, астма өйәнәге башланыуы ихтимал. Температура түбәнәйгәс, атмосфера баҫымы ла түбәнәйә, был баш ауыртыуына алып килә. Ҡояш нурҙарының кәмеүе арҡаһында серотонин гормоны аҙыраҡ бүленә, тимәк, кәйеф насарайыуы, кешенең күңел төшөнкөлөгө кисереүе бар. Әммә ғалимдар, һалҡын көндәрҙең ыңғай яҡтары ла бар, тип белдерә. Түбән температураның организмға артыҡ майҙарҙан арынырға булышлыҡ итеүе ғилми раҫланған. Был мәлдә организм йылыныу өсөн май ҡатламын әүҙем тотона. Көҙ һәм ҡыш көнө мускулдар шешеүе кәмей, аҡыл ҡеүәһе әүҙемләшә, баш яҡшыраҡ эшләй башлай, шуға ла һалҡын мәлдәрҙә уҡыуы ла, эшләүе лә еңел.

■ Дарыухананан рецептһыҙ дарыу һатып алып, баланы дауаларға кәрәкмәй, ти табиптар. Был бигерәк тә йүткереүҙе дауалай торған дарыуҙарға ҡағыла. Бала организмы өлкәндәрҙекенән айырыла, улар дарыуҙарҙың кире тәьҫирен күпкә ауырыраҡ кисерә. Дрейк университеты фармакология профессоры Эдвард Белл ата-әсәләргә ошондай кәңәш менән мөрәжәғәт итә. Бала өлкән кешегә ҡарағанда йылына 6-10 тапҡыр йышыраҡ һыуыҡ тейҙереп ауырый. Был мәлдә баланың танауы тона, ул йүткерә, температураһы күтәрелеүе лә бар һәм ғәҙәттә, ауырыуҙың дөйөм оҙайлығы 7 көндән 10 көнгә тиклем дауам итә. Шуға ла бала гел ауырый кеүек тойола. Ата-әсә тиҙ генә уны дауаларға ла тотона һәм иң тәүҙә дарыу һатып ала. Рецептһыҙ һатылған күп кенә препараттар тиҙ арала йүткереү һәм һыуыҡ тейеү билдәләренән ҡотолдорорға вәғәҙә итә. Тик 12 йәше тулмаған балаларға уларҙы биреү бөтөнләй ярамай, ти ғалим. Был препараттар тейешенсә клиник тикшереү үтмәй, тимәк, бала организмына кире тәьҫире лә өйрәнелмәй. Йәғни, дарыу бирәм, тип, балағыҙҙы ағыулап ҡуйыуығыҙ бар.

■ Иртәнге ашҡа туңдырма ашағыҙ, шул саҡта һеҙ аҡыллыраҡ буласаҡһығыҙ, ти Токио университеты ғалимдары. Туңдырма кешегә иғтибарын тупларға ярҙам итә һәм, әлбиттә, кәйефен дә күтәрә. Тикшеренеүҙәрҙә ҡатнашыусылар уянғас та туңдырма ашарға тейеш була. Бынан һуң уларҙың аҡыл кимәле компьютерҙа тикшерелә. Икенсе төркөм ғәҙәттәгесә иртәнге аш ашай. Тәүге төркөмдөң һөҙөмтәләре һәр ваҡытта та яҡшыраҡ булып сыға. Улар мәсьәләләрҙе тиҙерәк сисә. Мейе әүҙемлеген тикшереп өйрәнгәндән һуң, туңдырма ашағандан һуң юғары тирбәлештәге альфа-тулҡындар әүҙемерәк булыуы асыҡлана. Улар кеше тыныс мәлдә, зиһене асыҡ саҡта күберәк була.

■ Кишер составындағы каротиноидтар өлкән йәштәге кешеләрҙең мейе функцияһын яҡшырта. Туҡланыу рационында был матдәләр күп булғанда ҡартлыҡтан аҡыл еңеләйеү хәүефе түбәнәйә. Джорджия университеты ғалимдары үткәргән тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, олоғая барған һайын баш мейеһе эшмәкәрлеге кәмеүе тәбиғи процесс, шулай ҙа дөрөҫ туҡланып, был ауырыуҙы иҫкәртеп була.

ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

**Заман башҡа, заң башҡа, тип, заман модаһын алға һөргән бәғзеләр йәнәшендә, шөкөр, милли зауыҡты өҫтөнөрәк күргән ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙ ҙа бар. Өләсәйҙәребеҙҙең милли кейемдәрен, биҙәүестәрен тергеҙеү менән бергә, заманса күлдәктәргә һәм эшлекле костюмдарға башҡорт орнаменттарын, биҙәктәрен өҫтәп ебәреп, миллилекте үҙ зауҡына әйләндергәндәр бихисап хәҙер. Башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының тап ошо дәррәү күтәрелешен, ҡыҙыҡһыныуын иҫәпкә алып, йыл башында Республика халыҡ ижады үҙәге ҡарамағындағы "Сәсәндәр үҙәге", Башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының республика "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы "Селтәр" традицион биҙәнеү әйберҙәре бәйгеһе иғлан иткәйне. Ниһайәт, ошо көндәрҙә был күркәм конкурсҡа Өфөлә йомғаҡ яһалды.**

# СЕЛТӘР-ҠАШМАУҘАР МЕНӘН...
## ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙға ҡот ҡайта

Был бәйге көтөп алынған сара булып сыҡты. Селтәр (һаҡал, алмиҙеү, хәситә, түшелдерек, яға) эшләү оҫталығын өлкән быуындан ҡабул итеп, үҙҙәре лә ҡыҙҙарына, ейәнсәрҙәренә тапшыра килгән оҫтабикә-ағинәйҙәр бәйгегә дәррәү генә ҡушылып китте. Эштәрен "Бәйләнештә" сайтындағы "Башҡорт ҡатын-ҡыҙы", "Селтәр", "Ағинәй" төркөмдәренә һалып, алдан уҡ үҙҙәрен танытҡан йөҙҙән ашыу ҡатын-ҡыҙ баш ҡалаға конкурстың йомғаҡлау турына килеп, ырыуына, йәшәгән төбәгенә, зауығына тап килтереп эшләгән селтәр-ҡашмауҙарын күргәҙмәгә ҡуйҙы. Баш ҡала быңдай күргәҙмәне быға тиклем күргәне булмағандыр, моғайын!

Таң ҡалырлыҡ тамаша барышында оҫтабикәләрҙең күбеһе менән һөйләшеп алыу форсаты ла тейҙе. Бына, мәҫәлән, Әбйәлил районы Яңы Балапан ауылынан Рита Шәйҙуллина ун йыл эсендә 123 селтәр, 107 ҡашмау эшләгән. "Хаҡлы ялға сыҡҡас, Нәфисә апай Мәғәсүмованан өйрәнеп тотондом был эшкә. Минең ҡул эштәрем республиканың төрлө төбәктәренә таралған. Күп осраҡта күбәләк ырыуы ҡатын-ҡыҙҙарының селтәрҙәрен тегәм, улар тегелеше һәм селтәрҙәренең осонда эшләнгән тояҡтар буйынса башҡаларҙан айырылып тора. Мәҫәлән, тамьяндар селтәрҙең өҫкө өлөшөн һыпайта ғына иттереп эшләп, осон муйынға таға торған элмәк итеп тамамлап ҡуя. Ә күбәләктәрҙең селтәрендә муйынға эленергә тейешле бауы айырым эшләнә һәм иң аҙаҡтан ҡушып тегелә. Беҙҙең селтәрҙең өҫкө яғы киңерәк, дүрткелерәк, күкрәк өҫтөн тотош ҡаплап тора, аҫҡы осона эленгән тәңкәләрҙең тояҡтары ике ҡат мәрйендән була", - тип, үҙ серҙәренә ихлас төшөндөрҙө Рита Шәйҙуллина. Ағинәйҙең ырыуҙашы, Учалы районы Миндәк ҡасабаһында донъя көтөүсе Зөбәйлә Ишбирҙина ҡырҡ биш йыл ситтә йәшәп тә, үҙ төбәгенең рухи ҡомартыларын күҙ ҡараһындай һаҡлап, йәш быуынға тапшырып килеүе тураһында һөйләне: "Ун һигеҙенсе быуаттағы күбәләк ырыуы ҡатын-ҡыҙҙарының селтәре өлгөһөндә эшләнем селтәремде, - тине ул. - Был селтәрҙә бар биҙәктәр ҙә етешәрҙән: уртанан төшкән өс рәткә ете тәңкә, арҡыры баҫылған тәңкәләр ете рәт, селтәрҙең ситтәрендәге ҡушарлап баҫылған тәңкәләр ҙә ете урында тора. Башҡорт халҡында ете һанының сихри көскә эйә булыуы билдәле, шул һандағы тәңкәләр, һыҙаттар эйәһенә ҡот килтереп, яман күҙҙәрҙән һаҡлап тора ул..."

Ошо бәйгене иғлан итер алдынан Өфөлә әлеге конкурсты ойоштороусылар һәм Асия Ғәйнуллина етәкселегендәге Сибай ағинәйҙәре тарафынан селтәр эшләү буйынса оҫталыҡ дәресе үткәрелгәйне. Селтәргә һалынған һәр биҙәктең мәғәнәһе аңлатылғайны, заманса итеп эшләгәндә лә билдәле бер тәртипте һаҡлау мөһим булыуы тураһында һүҙ барғайны был егермеләп район ағинәйҙәре ҡатнашҡан оҫталыҡ дәресендә. Конкурс барышында ошо оҫталыҡ дәресенең һөҙөмтәле булыуы күренде. Бәйгелә ҡатнашыусылар араһында унар йылдан ашыу был эш менән шөғөлләнеүселәр ҙә, быйыл ғына тотоноусылар ҙа, заманса итеп үҙгәртеп эшләүселәр ҙә бар ине һәм бөтәһенең дә ҡул эшенең борондан килгән традицияларға таянып эшләнеүе күҙгә ташланды. Элекке кеүек, селтәргә ҡурай, республиканың әләмен төшөрөүселәр булманы тиерлек. "Конкурс республиканың төрлө төбәктәренән оҫта ҡуллыларҙы бер урынға йыйып, тәжрибә уртаҡлашыу, аралашыу форсаты бирҙе. Беҙҙең арала йәштәрҙе лә күрәм. Улар күберәк стилләштерелгән селтәрҙәргә иғтибар итә, уларҙы заманса кейемгә яраҡлаштырып тағып йөрөргә теләй. Шуға, стилләштерелгән алмиҙеүҙәрҙә лә боронғо башҡорт орнаменттары һаҡланыуы шарт", - тигән фекерҙә Бөрйән районынан килгән ағинәй Зәкиә Муллағолова. "Өләсәйҙәр" ҡурсаҡ коллекцияһы авторы Әлфиә Әхтәриева ла башҡорт милли кейеменең һәр детален еренә еткереп эшләү яғында. "Баш ҡалала йәшәүсе ҡатын-ҡыҙҙар өсөн Республика Халыҡ ижады үҙәге ойошторған "Хазина" түңәрәгендә шөғөлләнеп, селтәр эшләргә өйрәндем һәм ҡурсаҡтарымдың кейемен бөтә ҡағиҙәләргә ярашлы итеп тектем. Был ҡурсаҡтар, әлбиттә, балаларға уйнар өсөн тәғәйенләнмәгән. Шулай ҙа оҫта ҡуллы әсәйҙәр ҡыҙҙарының ҡурсаҡтарын үҙҙәре лә ошолай кейендерә ала. Балаға кескәй саҡтан алып рухи тәрбиә биреүҙең, милли үҙаңын үҫтереүҙең бер ысулы был", - тип һөйләне ҡурсаҡтар эшләүсе оҫтабикә.

Ғөмүмән, баш ҡалала үткән "Селтәр" күргәҙмә-конкурсында тәжрибә уртаҡлашырға теләүселәр күп булды. Баймаҡ районы Түбәнге Таһир ауы-









✓ Ҡашмауҙың ҡойроғо хужабикәһенең бөгәренә тиклем төшөп тора. Ул кешенең умыртҡа һөйәген, арҡаһын насар энергиянан, һоҡ тейеүҙән (һоҡланып ҡараусыларҙан) һаҡлай.



лынан килгән ағинәй Суфия Әсәнова селтәрҙәр өсөн тимер аҡсаларҙы дрель ярҙамында үҙе тишеп алыуын, Баймаҡ ҡалаһында һәм районында башҡаларҙы ла оҫталыҡ серҙәренә төшөндөрөүен телгә алып үтте. Бөтәһенә лә Йылайыр районы Юлдыбай ауылы ағинәйҙәренең ағас ҡоролма ярҙамында шау мәрйендәрҙән генә торған селтәрҙәр эшләүе ҡыҙыҡлы тойолдо. "Был ҡоролманы шәл һуғыу станогына оҡшатып яһаным. Шул станок кеүек үк, бында ла төрлө төҫлө мәрйен, муйынсаҡтарҙан орнаменттар, һүрәттәр сығарып, селтәр, беләҙек, муйынсаҡтар яһарға була. Бер өйрәнеп алһаң, тиҙ һәм еңел эшләнә", - тине ошо ысулды уйлап табыусы ағинәй Хафиза Амантаева. Шулай уҡ күптәр Әбйәлил районы Аҫҡар ауылынан килгән Сәхипъямал Усманова исемле 85 йәшлек ағинәйҙең зауыҡлы ҡашмауҙары тирәһендә уралды. Һәр ҡашмауҙың ҡойроғон шау мәрйендән ҡуҫҡар биҙәктәре һалып теккән ағинәй мөрәжәғәт итеүселәргә ихлас яуап бирҙе, тәжрибәһе менән уртаҡлашты.

Сара барышында Сибай ҡалаһы ағинәйҙәре үҙ тәжрибәһенән сығып, ҡашмау эшләү серҙәрен дә өйрәтеү форсаты тапты. Ҡашмауҙың түбәһе Йыһан менән бәйләнештә булыу, энергия туплау өсөн асыҡ итеп эшләнә. Башын ябыҡ итеп теккән осраҡта башҡорт халҡының боронғо әүернә биҙәге баҫылырға тейеш. Ҡашмауҙың ҡойроғо хужабикәһенең бөгәренә тиклем төшөп тора. Ул кешенең умыртҡа һөйәген, арҡаһын насар энергиянан, һоҡ тейеүҙән (һоҡланып ҡараусыларҙан) һаҡлай. Шуға күрә, ҡашмауҙың ҡойроғо башланған урынға, елкә тапҡырына ике "күҙ" баҫыла. Уны ҡояш формаһындамы, ромб итепме, эшләйҙәр. Сибай ағинәйҙәре етәксеһе Асия Ғәйнуллина әйтеүенсә, ҡашмауҙың һаҡалы - әйәк аҫтынан төшөп, башлыҡтың ике осон тоташтырған бау ни тиклем селтәрле, ҡалын булһа, шул тиклем хужабикәнең уҫаллығын, уға яҡын килергә ярамауын белдерә. Ҡатын-ҡыҙҙар шулай уҡ ҡашмауҙың башлығына тегелгән мәрйендәрҙең тәртибе, ҡойроғона төшөрөлгән биҙәктәрҙең мәғәнәһе тураһында ла мөһим мәғлүмәт алды.

Аңлауыбыҙса, был оҫталыҡ дәресе юҡҡа ғына үткәрелмәне. Республика халыҡ ижады үҙәге ҡарамағындағы "Сәсәндәр үҙәге", "Ағинәй" төбәк йәмәғәт ойошмаһы киләһе йыл тағы ла бер бәйге иғлан итергә ниәтләй. "Сәсәндәр үҙәге" етәксеһе Нәфисә Тулыбаева был хаҡта шулай тине: "Бөгөн күргәҙмәлә ҡатнашыусылар араһында ла селтәрҙе төрлөсә итеп эшләүҙәрен, һәр ырыуҙың үҙенә күрә айырмалары булыуын күрәбеҙ. Ҡашмауҙы, селтәрҙәрҙе тергеҙгән саҡта үҙ төбәгенең кейемен ентекле өйрәнергә кәрәк. Мәҫәлән, Әбйәлил районы ҡашмауын бер нисек тә Балаҡатай районында йәшәгән ҡатын-ҡыҙға кейҙереп булмай. Ул төбәк башҡорттарының таҡыялары бар. Ҡатнашыусылар бына шундай айырмаларҙы күреп, белеп, ҡайһы йүнәлештә эшләргә икәнен аңлап ҡайтһа, беҙ маҡсатҡа өлгәшер инек. Оҫталыҡ дәрестәре, бәйгеләр киләһе йылда ла дауам итергә тейеш", - тине ул.

Башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының "Селтәр" традицион биҙәнеү әйберҙәре бәйгеһенең һөҙөмтәләренә килгәндә, Гран-прины Сибай ҡалаһының "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы оҫтабикәләре алды. Уларға Башҡортостан юлдаш радиоканалы етәксеһе Тәнзилә Үлмәсбаева теген машинаһы тапшырҙы. Тағы ла ун биш иң яҡшы селтәр оҫталарына конкурс бағыусылары - РФ Дәүләт Думаһы депутаттары Зариф Байғусҡаров, Зөһрә Рәхмәтуллина, БР Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтай рәйесе урынбаҫары Йомабикә Ильясова, БР Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтайҙың комитет рәйесе Эльвира Айытҡолова, әүҙем йәмәғәт эшмәкәре, медицина фәндәре докторы Сәлиә Мырҙабаева, "Аҡ тирмә" башҡорт мәҙәни клубы етәксеһе Рәйсә Күзбәкова, билдәле яҙыусы Гүзәл Ситдиҡова, журналистар Гөлназ Ҡолһарина, Зөлфиә Рәхмәтуллина, Тамара Юлдашева, Рита Өмөтбаева, Гөлназ Ҡотоева, "Урал" башҡорт халыҡ үҙәге етәксеһе Риф Иҫәнов, эшҡыуарҙар Фәниә Йәнбирҙина, Гөлсәсәк Әлибаева, Зилә Йәғәфәрова, Зилә Аксенова, Сәймә Хәсәнова үҙенең ҡиммәтле һәм иҫтәлекле бүләктәрен тапшырҙы. Шулай уҡ, "Киске Өфө", "Шоңҡар", "Аманат" журналдары хеҙмәткәрҙәре, врачтар Рәшиҙә Йосопова, Рима Таһирова, Ишембай районы "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы етәксеһе Мәрйәм Солтанова, Өфө ҡалаһы "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы ағзалары Гүзәл Вилданова, Гөлсара Килдеғолова, Айгөл Искәндәрова кеүек изге күңелле, йомарт милләттәштәр махсус приздарын бирҙе.

-Конкурс үҙе лә, уның приздар фонды ла бына шундай энтузиастар тарафынан булдырылды, - тине сараны төп ойоштороусыларҙың береһе - Башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы етәксеһе Гөлфиә Янбаева. - Конкурста ҡатнашыусылар үҙҙәре лә - энтузиастар, милләттең ысын ағинәйҙәре. Улар үҙҙәрендә булған тәжрибәне ихлас тарата, рухи хазиналарыбыҙҙы һаҡлау эшенә иң һыҙғанып тотона, ниндәй генә сара ойошторолғанда ла үҙенең матди ярҙамын да күрһәтә. Донъябыҙҙы бына шундай энтузиастар һәм уларҙың рухы ҡотҡарырына ышанам...

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Халҡыбыҙҙың рухи ҡиммәттәрен һаҡлау, киләсәк быуынға еткереү эшен ниндәйҙер мәҙәниәт ойошмаларына, етәкселәргә генә ҡайтарып ҡалдырыу дөрөҫ түгел. Башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының "Селтәр" традицион биҙәнеү әйберҙәре бәйгеһенең йомғаҡлау тантанаһында тағы бер тапҡыр ошо фекерҙең дөрөҫлөгөнә инандыҡ. Сөнки рухи ҡомартҡыларҙы, ғөрөф-ғәҙәттәрҙе һаҡлау, тергеҙеү һәм киләсәк быуындарға тапшырыу мөмкинлеге һәр кемебеҙҙә бар. Бәйгелә ҡатнашҡан оҫта ҡуллы ағинәйҙәрҙең иҫ китмәле хазинаға тиң эштәре, асыҡ күңеле быға дәлил. Улар ҡомартҡы әйберҙәр менән бергә халыҡтың ҡотон, милли үҙаңын, рухиәтен тергеҙеүгә лә булышлыҡ итер, йәмғиәткә яңы һулыш өҫтәп ебәрер, Иншаллаһ!**

Сәриә ҒАРИПОВА.











УҢЫШ ҠАҘАН

# ҮҘ-ҮҘЕҢӘ ЫШАНЫУҘЫҢ ТӨП СЕРҘӘРЕ

Хыялығыҙҙы эшкә егегеҙ. Нисек итеп билет алыуығыҙҙы, сумаҙан тултырыуығыҙҙы, ишегегеҙҙе бикләп, көндәлек күнелһеҙ тормошоғоҙҙан ҡасыуығыҙҙы күҙ алдына килтерегеҙ. Хатта ҡыҫҡа ғына сәйәхәт планлаштырһағыҙ ҙа: "Киләһе аҙнала мин сәйәхәт итәм", - тип, уның ҡыҙыҡлы һәм мауыҡтырғыс буласағына көйләнегеҙ. Сит илгә сығырға хыялланаһығыҙмы? Старт майҙансығы - ваҡытты әрәм итмәҫкә! План төҙөгөҙ һәм йыйынығыҙ. Артыҡ бер минут та көтмәгеҙ. Ниндәйҙер мөһим нәмә башлауығыҙҙы аңлау менән ул мотлаҡ тормошҡа ашасаҡ. Сәйәхәт итеү тормошоғоҙҙоң тәбиғи өлөшөнә әйләнәсәк, ә һеҙҙә тағы ла күберәк яңы ерҙәр күреү теләге йәшәйәсәк. Хис-тойғолар - көтөү аҫҡысы. Барыһы ла алда икәнен тойоғоҙ. Һеҙ көндәлек мәшәҡәттәрҙән арынырға тейеш. Көтөү хыялығыҙҙы тормошҡа ашырыу өсөн ҡеүәтле эске көсөгөҙҙө хәрәкәткә килтерер. Ни тиклем энтузиазмығыҙ көслөрәк булһа, хыялығыҙ шул тиклем тиҙерәк ысынбарлыҡҡа әүерелер.

**Ваҡыт һеҙҙең менән түгел, һеҙ ваҡыт менән идара итегеҙ!**

Күнел ҡайтыу һәм кәйеф булмау - үҙебеҙ уйлап тапҡан ижад емеше. Бер ни тиклем фекер йөрөтөп, ваҡыт - бер ниндәй ҡамсыһыҙ ҙа яҡшы илһамландырыусы, тигән һығымтаға киләбеҙ. Беҙҙең бурыс - ваҡытты яратырға, уны килтергән файҙаһы өсөн баһаларға өйрәнеү. Кемдер, беҙҙе ваҡытты экономияларға һәм тормошто туҙҙырырға өйрәтәләр, тип бик аҡыллы әйткән. Ваҡыт тормош тәжрибәһен тәрәнәйтеүсе һәм көсәйтеүсе тәьҫораттар менән тулы булғанда ғына әһәмиәтле. Ул йә саҡ ҡыбырлай, йә хыял ҡанаттарында оса. Шуны аңлаһаҡ, ваҡыттың тормошобоҙҙа ниндәй роль уйнағанын да аңлаясаҡбыҙ һәм уны үҙебеҙ теләгәнсә планлаштыра башлаясаҡбыҙ.

Бик күптәр тормоштоң күнелһеҙлегенә зарлана. Улар нимә менән булышырға белмәй. Был бик аяныслы. Эсәләр, телевизор ҡарайҙар, видеоуйындар уйнайҙар, кәрт һуғалар - нисек тә ваҡытты үлтерергә маташалар. Әммә ваҡытты үлтерәм, тип, үҙҙәренең ижади хыялын үлтерәләр. Уларҙың уҡыуға, медитацияға һәм камиллашыуға ваҡыты ҡалмай. Тормош - ул хәрәкәт. Хәрәкәт булмауы - үлем. Сәғәт һанауынан туҡтамай, тормошто кисектереп булмай. Шуға хәҙер үк ҡыбырларға кәрәк. Үҙегеҙҙе бөтөн нәмәне шунда уҡ эшләүсе итеп күҙ алдына килтерегеҙ. Хыялығыҙҙа тыуҙырған нәмәне шунда уҡ тормошҡа ашыраһығыҙ йәки уны тормошҡа ашырыу планын эшләйһегеҙ. Әгәр ысынлап та эмоциональ яҡтан көслө, уңышлы һәм энергиялы булырға теләһәгеҙ, медитацияға, беҙ фекер алышҡан принциптар буйынса уны өйрәнеүгә ваҡыт бүлегеҙ. Уңыш ваҡыт талап итә. Аллаһы Тәғәлә биргән ваҡытты мөмкин тиклем күберәк файҙаланығыҙ. Күпселек кеше ваҡыт баһаһын белмәй һәм ул үтеп киткәс, тағы бер нисә минут ҡына булһа ла өҫтәлеүен һорай. Һуңғы 24 сәғәт эсендә вафат булыусылар тағы бер 24 сәғәт өсөн бөтөн нәмәләрен бирергә риза булыр ине. Ә һеҙ алда торған 24 сәғәттә йә эске ҡеүәтегеҙҙе асырға, йә шәхси тамуғығыҙға юл һалыуға арнай алаһығыҙ. Һайлау хоҡуғы - үҙ ҡулығыҙҙа.

Роберт ЭНТОНИ.
(Дауамы бар).



## 5 ДЕКАБРЯ ПОНЕДЕЛЬНИК

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.40 "Женский журнал".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55, 03.40 "Модный приговор".
12.00 Новости.
12.15 "Про любовь" (16+).
13.20, 14.15, 15.15, 00.50 "Время покажет" (16+).
14.00 Новости.
15.00 Новости (с субтитрами).
16.00, 02.40, 03.05 "Мужское/Женское" (16+).
17.00, 01.40 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Обратная сторона Луны". Новый сезон. 1-2 серии. Детективный сериал (16+).
23.30 "Болезни высших достижений". Сенсационное расследование (16+).
00.35 Ночные новости.
03.00 Новости.

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".
09.00 "Доброе утро, республика!"
09.55 "О самом главном" (12+).
11.00 "Вести".
11.40 "Вести-Башкортостан".
11.55, 00.55 "Сваты". Комедийный сериал (12+).
14.00 "Вести".
14.40 "Вести-Башкортостан".
14.55 "Тайны следствия". Детективный сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.20 "Вести-Башкортостан".
17.40 "Прямой эфир". Ток-шоу (16+).
18.50 "60 минут". Ток-шоу (12+).
20.00 "Вести".
20.45 "Вести-Башкортостан".
21.00 "Тайны следствия-16". "Черный список". 2 серии. Детективный сериал (12+).
22.50 "Вечер с Владимиром Соловьевым" (12+).
03.00 "Дар". Сериал (12+).

### БСТ

**07.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00"Неповторимый Эдди". Сериал (16+).**
**11.00 Новости недели.**
**11.45 "Специальный репортаж" (12+).**
**12.00 "Счастливый час".**
**13.00 "Бәхетнамә" (на башк. яз.).**
**14.00 "Автограф" (12+).**
**14.30, 18.30, 22.45 Новости (на башк. яз.).**
**14.45, 16.45, 21.00 "Интервью" (12+).**
**15.00 "Наука 102" (6+).**
**15.30 "Алиса знает, что делать".**
**16.00 "Гора новостей".**
**16.15 "Перекличка" (6+).**
**16.30, 17.30, 21.30 Новости.**
**17.15 "Квадратный метр", "Телелавка" (12+).**
**17.45 "Красная кнопка" (16+).**
**18.15 "Полезные новости" (12+).**
**19.00 Футбол. РФПЛ. ФК "Уфа" - ФК "Томь" (Томск).**
**20.45 "Малый бизнес" (12+).**
**22.00 "Спортбар" (12+).**
**23.15 "Гараж". Худ. фильм (12+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**01.30 "Бәхетнамә" (6+).**
**02.30 Ф.Асянов. "Вдова" (12+).**

## 6 ДЕКАБРЯ ВТОРНИК

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.40 "Женский журнал".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55, 03.20 "Модный приговор".
12.00 Новости.
12.15 "Про любовь" (12+).
13.20, 14.15, 15.15, 00.25 "Время покажет" (16+).
14.00 Новости.
15.00 Новости (с субтитрами).
16.00, 02.15, 03.05 "Мужское/Женское" (16+).
17.00, 01.15 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Обратная сторона Луны". 3-я и 4-я серии (16+).
23.35 "Вечерний Ургант" (16+).
00.10 Ночные новости.
03.00 Новости.
04.20 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".
09.00 "Доброе утро, республика!"
09.55 "О самом главном" (12+).
11.00 "Вести".
11.40 "Вести-Башкортостан".
11.55, 00.55 "Сваты". Комедийный сериал (12+).
14.00 "Вести".
14.40 "Вести-Башкортостан".
14.55 "Тайны следствия". Детективный сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.20 "Вести-Башкортостан".
17.40 "Прямой эфир". Ток-шоу (16+).
18.50 "60 минут". Ток-шоу (12+).
20.00 "Вести".
20.45 "Вести-Башкортостан".
21.00 "Тайны следствия-16". "Заколдованный круг". 2 серии. Детективный сериал (12+).
22.50 "Вечер с Владимиром Соловьевым" (12+).
03.00 "Дар". Драматический сериал (12+).

### БСТ

**07.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00 "Континуум". Сериал (16+).**
**11.00 "Мистический Башкортостан" (12+).**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30 Новости.**
**11.45 "Малый бизнес" (12+).**
**12.00 "Счастливый час".**
**13.00 "Бәхетнамә" (на башк. яз.).**
**14.00 "Күңелем моңдары" (12+).**
**14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**14.45, 16.45, 19.00, 21.00 "Интервью" (12+).**
**15.00 "Дорога к храму" (12+).**
**15.30 "Алиса знает, что делать".**
**16.00 "Гора новостей".**
**16.15 "Семәр".**
**17.15 "Криминальный спектр" (16+).**
**17.45 "Дознание" (16+).**
**18.15 "Полезные новости" (12+).**
**19.15 "Үткән ғүмер" (12+).**
**19.45 "Сәңгелдәк".**
**20.00 "Телецентр".**
**20.45 "Полезные новости" (12+).**
**22.00 "Уфимское "Времечко".**
**23.00 "Очень дикие штучки". Худ. фильм (18+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**01.15 "Бәхетнамә"**
**02.15 Т.Миннуллин. "Встреча с молодостью" (12+).**

## 7 ДЕКАБРЯ СРЕДА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10, 04.15 "Контрольная закупка".
09.40 "Женский журнал".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55, 03.15 "Модный приговор".
12.00 Новости.
12.15 "Про любовь" (16+).
13.20, 14.15, 15.15, 00.25 "Время покажет" (16+).
14.00 Новости.
15.00 Новости (с субтитрами).
16.00, 02.15, 03.05 "Мужское/Женское" (16+).
17.00, 01.15 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят". Ток-шоу (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Обратная сторона Луны". 5-я и 6-я серии (16+).
23.35 "Вечерний Ургант" (16+).
00.10 Ночные новости.
03.00 Новости.

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".
09.00 "Доброе утро, республика!"
09.55 "О самом главном".
11.00 "Вести".
11.40 "Вести-Башкортостан".
11.55, 00.55 "Сваты". Комедийный сериал (16+).
14.00 "Вести".
14.40 "Вести-Башкортостан".
14.55 "Тайны следствия". Детективный сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.20 "Вести-Башкортостан".
17.40 "Прямой эфир" (16+).
18.50 "60 минут" (12+).
20.00 "Вести".
20.45 "Вести-Башкортостан".
21.00 "Тайны следствия-16". "Любовь должна быть счастливой". 2 серии. Детективный сериал (12+).
22.50 "Вечер с Владимиром Соловьевым" (12+).
03.00 "Дар". Сериал (12+).

### БСТ

**07.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00 "Континуум". Сериал (16+).**
**11.00 "Наука 102" (6+).**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30 Новости.**
**11.45 "Криминальный спектр" (16+).**
**12.00 "Счастливый час".**
**13.00 "Бәхетнамә" (на башк. яз.).**
**14.00 "Тәмле" (12+).**
**14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**14.45, 16.45, 19.00 "Интервью" (12+).**
**15.00 "Мистический Башкортостан" (12+).**
**15.30 "Алиса знает, что делать".**
**16.00 "Гора новостей".**
**16.15 "Физра" (6+).**
**17.15 "Квадратный метр", "Телелавка" (12+).**
**17.45 "Это мы!" (12+).**
**18.15, 20.45 "Полезные новости" (12+).**
**19.15 "Автограф" (12+).**
**19.45 "Сәңгелдәк".**
**20.00 "Телецентр".**
**21.00 "Власть отвечает".**
**22.00 "Историческая среда" (12+).**
**23.00 "Авиатор". Худ. фильм (12+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**02.15 "Бәхетнамә" (12+).**
**02.30 Т.Гарипова. "Убежавшие в счастье" (12+).**

## 8 ДЕКАБРЯ ЧЕТВЕРГ

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10, 04.20 "Контрольная закупка".
09.40 "Женский журнал".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55, 03.20 "Модный приговор".
12.00 Новости.
12.15 "Про любовь" (16+).
13.20, 14.15, 15.15, 01.30 "Время покажет" (16+).
14.00 Новости.
15.00 Новости (с субтитрами).
16.00 "Мужское/Женское" (16+).
17.00, 02.20, 03.05 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Обратная сторона Луны". 7-я и 8-я серии (16+).
23.40 "Вечерний Ургант" (16+).
00.15 Ночные новости.
00.30 "На ночь глядя" (16+).
03.00 Новости.

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".
09.00 "Доброе утро, республика!"
09.55 "О самом главном". Ток-шоу.
11.00 "Вести".
11.40 "Вести-Башкортостан".
11.55, 00.50 "Сваты". Комедийный сериал (16+).
14.00 "Вести".
14.40 "Вести-Башкортостан".
14.55 "Тайны следствия". Детективный сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.20 "Вести-Башкортостан".
17.40 "Прямой эфир". Ток-шоу (16+).
18.50 "60 минут". Ток-шоу (12+).
20.00 "Вести".
20.45 "Вести-Башкортостан".
21.00 "Тайны следствия-16". "Тень из прошлого". 2 серии. Детективный сериал (12+).
22.50 "Поединок". Программа Владимира Соловьева (12+).
03.00 "Дар". Драматический сериал (12+).

### БСТ

**07.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00 "Континуум". Сериал (16+).**
**11.00 "Моя планета - Башкортостан" (12+).**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30 Новости.**
**11.45 "Современник" (12+).**
**12.00 "Счастливый час".**
**13.00 "Бәхетнамә" (на башк. яз.).**
**14.00 "Бай бакса" (12+).**
**14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**14.45, 16.45 "Интервью" (12+).**
**15.00 "Малый бизнес" (12+).**
**15.15 "ДОСААФ: испытано на себе" (12+).**
**15.30 "Алиса знает, что делать".**
**16.00 "Гора новостей".**
**16.15 "Йырлы кәрәҙ".**
**17.15 "Криминальный спектр" (16+).**
**17.45 "Клио" (12+).**
**18.45 Хоккей. КХЛ. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Куньлунь" (Пекин).**
**22.00 "Уфимское времечко".**
**23.00 "Подстава". Худ. фильм (18+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**01.15 "Бәхетнамә" (12+).**
**02.15 И. Юзеев. "Соловьи прилетели" (12+).**

## 9 ДЕКАБРЯ ПЯТНИЦА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.40 "Женский журнал".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости.
12.15 "Про любовь" (16+).
13.20, 14.15, 15.15 "Время покажет" (16+).
14.00 Новости.
15.00 Новости (с субтитрами).
16.00 "Мужское/Женское" (16+).
17.00 "Жди меня" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым.
19.50 "Поле чудес". Капитал-шоу (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Сегодня вечером" (16+).
22.40 "Вечерний Ургант" (16+).
23.30 "Голос". "Новый сезон". Музыкальный конкурс (12+).
02.00 "Орсон Уэллс: Свет и тени". Док. фильм (16+).
03.05 "Леди Удача". Романтическая комедия (12+).

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".
09.00 "Доброе утро, республика!"
09.55 "О самом главном". Ток-шоу.
11.00 "Вести".
11.40 "Вести-Башкортостан".
11.55, 01.40 "Сваты". Комедийный сериал (16+).
14.00 "Вести".
14.40 "Вести-Башкортостан".
14.55 "Тайны следствия". Детективный сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.20 "Вести-ПФО".
17.40 "Прямой эфир". Ток-шоу (16+).
18.50 "60 минут". Ток-шоу (12+).
20.00 "Вести".
20.45 "Вести-Башкортостан".
21.00 "Юморина" (12+).
22.30 "Торжественная церемония вручения первой Российской национальной музыкальной премии". Трансляция из Государственного Кремлевского дворца.
03.45 "Дар". Комедийный сериал (12+).

### БСТ

**07.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00 "Континуум". Сериал (16+).**
**11.00 "Это мы!" (6+).**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30 Новости.**
**11.45 "Криминальный спектр" (16+).**
**12.00 "Здоровое решение" (12+).**
**12.30 "Млечный путь" (12+).**
**13.30 "Күңелем моңдары" (12+).**
**14.00 "Хазина" (6+).**
**14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**14.45 "Вопрос+Ответ=Портрет" (6+).**
**15.30 "Алиса знает, что делать".**
**16.00 "Гора новостей".**
**16.15 "Зеркальце".**
**16.45 "Власть отвечает" (12+).**
**17.15 "Квадратный метр", "Телелавка" (12+).**
**17.45 "Специальный репортаж" (12+).**
**18.00 "Йома".**
**19.00 "Алтын тирмә" (0+).**
**19.45 "Сәңгелдәк".**
**20.00 "Бала-саға" (6+).**
**20.45 "Полезные новости" (12+).**
**21.00 "Моя планета - Башкортостан" (12+).**
**22.00 "Наука 102" (6+).**
**23.00 "Солярис". Худ. фильм (12+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**02.00 Х.Иргалин. "Вой волчицы" (12+).**

## 10 ДЕКАБРЯ СУББОТА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.20, 06.10 "Наедине со всеми" (16+).
06.00 Новости.
06.15 "Рио". Полнометражный анимационный фильм.
08.00 "Играй, гармонь любимая!"
08.45 "Смешарики. Новые приключения".
09.00 "Умницы и умники" (12+).
09.45 "Слово пастыря".
10.00 Новости.
10.15 "...И вагон любви нерастраченной". К 75-летию Виталия Соломина (12+).
11.20 "Смак" (12+).
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Идеальный ремонт".
13.15 "На 10 лет моложе" (16+).
14.05 "Татьяна Доронина. "Не люблю кино".
14.55 "Старшая сестра". Худ. фильм.
16.50 "Кто хочет стать миллионером?" с Дмитрием Дибровым" (12+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.20 "Ледниковый период".
21.00 "Время".
21.20 "Голос" (12+).
23.35 "МаксимМаксим" (16+).
00.45 "Подмосковные вечера" (16+).
01.40 "Джеймс Браун: путь наверх". Биографическая драма (16+).
04.15 "Прекрасный мир". Худ. фильм (16+).

### РОССИЯ 1

05.05 "Холодное лето пятьдесят третьего...". Худ. фильм (12+).
07.05 "Диалоги о животных".
08.00 "Вести-Башкортостан".
08.20 "Говорит и показывает Уфа" (12+).
09.20 "Сто к одному". Телеигра.
10.10 "Семейный альбом" (12+).
11.00 "Вести".
11.20 "Вести-Башкортостан".
11.40 "Евгений Петросян. Большой бенефис "50 лет на эстраде" (16+).
14.00 "Вести".
14.20 "Приговор идеальной пары". 4 серии. Мелодраматический сериал (12+).
18.00 "Субботний вечер". Развлекательная программа.
20.00 "Вести в субботу".
21.00 "Коварные игры". Драма (12+).
01.00 "Домработница". Романтическая комедия (12+).
03.00 "Марш Турецкого". Сериал (12+).

### БСТ

**07.00, 12.30, 19.00 Новости (на башк. яз.).**
**07.15 "Доброе утро!"**
**08.00 "Том Сойер". Худ. фильм (6+).**
**10.00 "Здоровое решение" (12+).**
**10.30 "Большой чемодан" (6+).**
**11.15 "Клио" (6+).**
**12.00 "Мистический Башкортостан" (12+).**
**13.00 "Бай бакса" (12+).**
**13.30 "Автограф" (12+).**
**14.00 "Дарю песню" (12+).**
**16.15 Хоккей. КХЛ. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Амур" (Хабаровск) (12+).**
**19.30 "Замандаш" (6+).**
**19.45 "Сәңгелдәк".**
**20.00 "Колесо времени" (12+).**
**21.00 "ДОСААФ: испытано на себе" (12+).**
**21.15 "Хочу жилье!" (12+).**
**21.30 Новости.**
**22.00 ФК "Уфа". День футбола (12+).**
**22.30, 02.30 Новости недели (на башк. яз.).**
**23.00 "Оҙон көй". Гала-концерт республиканского конкурса (6+).**
**00.30 "Рэмбо-4". Худ. фильм (18+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**03.00 М.Файзи. "Галиябану" (12+).**

## 11 ДЕКАБРЯ ВОСКРЕСЕНЬЕ

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

06.00 Новости.
06.10 "Старшая сестра". Худ. фильм (6+).
08.10 "Смешарики. ПИН-код".
08.20 "Часовой" (12+).
08.55 "Здоровье" (16+).
10.00 Новости.
10.15 "Непутевые заметки".
10.35 "Пока все дома".
11.25 "Фазенда".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Открытие Китая".
12.45 "Теория заговора" (16+).
13.40 "Болезни высших достижений". Сенсационное расследование (12+).
14.45 Концерт Кристины Орбакайте.
16.20 "Точь-в-точь" (16+).
19.30 "Лучше всех!"
21.00 "Воскресное "Время".
22.30 "Что? Где? Когда?" Зимняя серия игр.
23.40 "Шекспир. Предупреждение королям...".
00.45 "Воды слонам!" Худ. фильм (16+).
02.55 "Модный приговор".
03.55 "Мужское/Женское" (16+).

### РОССИЯ 1

05.10 "Неподсуден!". Худ. фильм.
07.00 "Мультутро "Маша и Медведь".
07.30 "Сам себе режиссер".
08.20 "Смехопанорама" Евгения Петросяна.
08.50 "Утренняя почта".
09.30 "Сто к одному". Телеигра.
10.20 "Вести-Башкортостан. События недели".
11.00 "Вести".
11.20 "Смеяться разрешается".
14.00 "Вести".
14.20 "Слишком красивая жена". 4 серии. Мелодраматический сериал (12+).
17.00 "Кастинг Всероссийского открытого телевизионного конкурса юных талантов "Синяя птица".
18.00 Всероссийский открытый телевизионный конкурс юных талантов "Синяя птица".
20.00 "Вести недели".
22.00 "Воскресный вечер с Владимиром Соловьевым" (12+).
24.00 "Дежурный по стране" Михаил Жванецкий".
00.55 "Ее сердце". Мелодрама (12+).
02.55 "Без следа". Детективный сериал (12+).

### БСТ

**07.00 Новости (на башк. яз.).**
**07.15 "Доброе утро!"**
**08.00 "Приключения Папируса" (0+).**
**08.30 "Мечты" (6+).**
**09.00 "Йома".**
**09.30 "Бай" (12+).**
**10.00 "Физра" (6+).**
**10.15 "Перекличка" (6+).**
**10.30 "Гора новостей" (6+).**
**10.45 "Ал да гөл" (6+).**
**11.00 "Сулпылар" (0+).**
**11.30 "Байтус" (6+).**
**11.45 "Алтын тирмә".**
**12.30 Новости недели (на башк. яз.) (12+).**
**13.00 "Тәмле" (12+).**
**13.30 "Башҡорттар" (6+).**
**14.00 "Дарю песню" (12+).**
**15.30 "Автограф" (12+).**
**16.00 "Дорога к храму".**
**16.30 "Историческая среда" (12+).**
**17.00 "Уфимская волна-2016" (6+).**
**19.00 "Бизнес-обзор" (12+).**
**19.30 "Это мы!" (6+).**
**20.00 "Байыҡ-2016" (12+).**
**21.00 "Дознание" (16+).**
**21.30 Новости недели.**
**22.15 "Специальный репортаж" (12+).**
**22.30 "Красная кнопка" (16+).**
**23.15 "Вечер.com" (12+).**
**24.00 "Свидание с джазом" (12+).**
**01.00 "Черная книга". Худ. фильм (18+).**
**03.30 М.Горький. "Дачники" (12+).**

МИЛЛӘТ БАЛҠЫШЫ

# БАШҠОРТОСТАН ФИЛАРМОНИЯЛАРЫ...

## милли ерлектән айырылманы

(Башы 11-се биттә).

➔ **Бынан бер нисә йыл элек республика филармонияларының Өфөгә Филармониялар фестиваленә йыйылыуын күңелле осор тип хәтергә алдығыҙ. Бөгөн филармонияларға үҙ-ара аралашып, тәжрибә уртаҡлашырға мөмкинлек бармы? Әллә иктисади көрсөк һеҙҙе үҙ ҡаҙаныгыҙҙа ғына ҡайнарға мәжбүр итәме?**

**Ғ. Хужахмәтов**: Стәрлетамаҡҡа ҡүптән түгел Нефтекама дәүләт филармонияһы юбилей концерты менән килеп ҡайтты. Бик оҡшаны концерт беҙгә, уларҙың тын алышын, ниндәй юҫыҡта ижад итеүен күреп-белеп ҡалдыҡ. Заманалар үҙгәрһә лә, урындарҙа филармонияларҙың эше гөрләп тора ул, шөкөр. Былтыр сибайҙар килеп ҡайтты, уларға халыҡ зал тултырып килде. Башҡа ҡалаларҙа ижад иткән хеҙмәттәштәребеҙҙең финанс хәле лә беҙҙекенән айырылмауын күрҙек.

**Р. Лоҡманов:** Сибайҙарҙың Өфөгә лә килеп ҡайтҡанын ишетеп шатландыҡ. Әгәр ҙә алдан килешеп, мәсьәләнe, улар беҙҙең концертҡа билеттар һатышһа, беҙ ҙә уларға барыр инек. Беҙ уларға был йәһәттән ярҙам итә алабыҙ. Ҡунаҡҡа йөрөшөү башҡорт халҡының иң күркәм йолаларының береһе бит инде ул.

**Г. Рәхмәтуллина:** Нефтекама менән бәйләнештәр нығынды беҙҙең хәҙер. Улар "Урал батыр" эпосы буйынса балаларға көндөҙгө һәм өлкәндәргә тәғәйенләнгән киске концерт алып килде. Беҙ уларға яҙ барырға уйлап торабыҙ. Улар концертта йәш артистарының ижадын күберәк күрһәтте, йәштәр беҙҙә лә күп, ҡыҙыҡлы ғына программа әҙерләй алырбыҙ, тип уйлайым. Өфө баш ҡала булараҡ, ауырыраҡ яулана, унда мин - һинә, һин - миңә тип һөйләшеп булмай, залды арендалау хаҡын ҡаплау мәсьәләһе лә бар. Әммә стәрлетамаҡтарҙың гастроль географияһы киң генә. "Ашҡаҙар" төркөмө Силәбе өлкәһенән тыш, быйыл Һамар өлкәһенә, Пермь крайына ла барып етеп ҡайтты. Лекторий үҙ ваҡытында Рәсәй төбәктәре буйлап күп йөрөнө. Йәй һайын Мәскәү, Санкт-Петербург, Һамар һабантуйҙарында ҡатнашабыҙ. "Ашҡаҙар"ҙың йәш артистары яңы ғына Үзбәкстанға барып, лайыҡлы сығыш яһаны. Үҙебеҙҙең зал булмағанда ситтә күберәк тә эшләй инек, хәҙер үҙ ҡалабыҙҙа ла йыш сығыш яһайбыҙ.

➔ **Меценаттар башҡорт сәнғәтен өсөн һаман ят күренешме? Ярҙам итергә теләүселәр бармы Стәрлетамаҡ филармонияһына?**

**Р. Лоҡманов:** Элек меценаттар булмаһа ла, дәүләт ойошмалары ярҙам итә ине. Стәрлетамаҡта заводтар гөрләп эшләп тора ине, бөгөн уларҙың да хәлдәре яҡшынан түгелдер, ахыры. Бер бейеүсене кейендереү өсөн генә 20 меңгә яҡын аҡса кәрәк. Ситек үҙе генә 4-5 мең тора. Шуға ла был проблемаларҙы белгәнлектән, хаҡлы ялға сыҡҡас, бейеүселәр үҙҙәре ошондай кәсептәргә тотона, мәсьәләнe, әле үҙебеҙҙә бер бейеүсе ситек тегә башланы. Бөгөн берәй грант отоп ҡына ҡайһы бер мәсьәләрҙе хәл итәбеҙ.

**Г. Рәхмәтуллина:** Рус халыҡ музыка ҡоралдары оркестры 2013 йылда Башҡортостан Республикаһы Башлығының мәҙәниәт һәм сәнғәт өлкәһендәге грантына лайыҡ булып, махсус программа әҙерләй алды. Әҡала заводтарының хужалары хәҙер йә мәскәүҙәр, йә бөтөнләй сит ил кешеләре шул. Шуға ла уларға урындағы милли сәнғәттең торошо ҡыҙыҡ та түгел. Фиҙаҡәр ярҙамды бары тик үҙ милләтең вәкиле генә эшләй алалыр, шул уҡ филармониялар асылған дәүерҙә хәтергә төшөрөгөҙ - ҡала хакимиәттәре башлыҡтарының өлөшө ҙур булды бит ул саҡта. Бөтөн филармониялар ҙа уларҙың ярҙамы менән нығынып китте һәм бөгөн дә эшләп килә. Унан һуң, халҡының иҫәбе буйынса республикала икенсе урында торһа ла, Стәрлетамаҡ бәләкәй ҡала, баш ҡаланан ситтә лә. Өфөлә әле генә эшҡыуарҙар хәйриә спектаклендә ҡатнашып, мохтажлыҡ кисергән балаларға ярҙам күрһәтте, ә беҙҙә былдай хәл мөмкин түгел. Был йәһәттән "Сарби" ансамбленә бер аҙ бәхет йылмая, уларға үҙ милләттәштәре йыш ярҙам итә. Бәлки, үҙҙәре лә уларға сығыу юлдарын эҙләй беләләр.

**Ғ. Хужахмәтов:** Беҙгә уларҙан үрнәк алырға кәрәк шул. Ялынмаған осраҡта ла, һораһаң, бирәү ҙә юҡ тимәҫ ине, моғайын. Милләтебеҙҙең менталитеты икенсерәктер инде, оялабыҙ былайтып йөрөргә.

**Р. Лоҡманов:** Стәрлетамаҡты филармониянан тыш күҙ алдына килтереүе лә мөмкин түгел хәҙер. Эйе, кемдер, филармония шоу-бизнес кеүек актуаль, заманса түгел, тиер, әммә беҙ теләһә нәмә бейемәйбеҙ, теләһә нәмә йырламайбыҙ һәм уйнамайбыҙ, беҙ милли үҙенсәлектәргә тоғробоҙ.

ШУЛАЙ ИТЕП...

**Милли мәҙәниәттәрҙе, шул иҫәптән башҡорт милли сәнғәтен үҫтереүҙә һәм һаҡлауҙа филармонияларҙың әһәмиәте баһалап бөткөһөҙ, әлбиттә. Бөтөн илдә ҡасандыр, йыраҡ XIX быуатта, музыка һөйөүселәр берләшмәһе булараҡ барлыҡҡа килгән филармониялар совет заманында дәүләт учреждениеларына әүерелеп, бөгөн дә ошо формала йәшәй бирһә лә, Башҡортостан филармонияларының бурысы башҡараҡ шул. Уларҙың эшмәкәрлеге - милли сәнғәт менән бәйле, шуның менән дә ҡәҙерле улар беҙгә, тамашасыларға.**

Ләйсән НАФИҠОВА
әңгәмәләште.

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ

### М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**3 декабрь "Мулла"** (Т. Миңнуллин), драматик хикәйә 12+
**4 декабрь "Ҡара йөҙҙәр"** (М. Ғафури, А. Абушахманов, Ш. Ғилманова инц.) 16+
**6 декабрь "Мин - ҡатын-ҡыҙ"** (Т. Миңнуллин), бишек йыры 12+
**7 декабрь "Антигона"** (Ж. Ануй), драма 12+
**8 декабрь "Яңғыҙҙар ташы"** (Ә. Ғаязов), драма 12+
**9 декабрь Гөлли Мөбәрәкованың** юбилей кисәһе 6+

### М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**3 декабрь "Ханума"** (А. Цигарели), музыкаль комедия. Башлана 18.00 12+
**7 декабрь "Йәнкиҫәккәйем"** (Т. Миңнуллин), музыкаль комедия 12+

### Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**3 декабрь "Мөхәббәт формулаһы йәки Көнсығыш нескә ҡараш талап итә"** Рәсәй киноһы йылына бағышлана. Башлана 18.00 6+
**6 декабрь** Билдәле ҡурайсы, Башҡортостандың атҡаҙанған артисы **Рушан Биктимеров "Тауҙар һулышы"** тип аталған концертҡа саҡыра. 6+
**9 декабрь "Ҡышҡы кәйеф"** концертында филармонияның артистары һәм саҡырылған ҡунаҡтар ҡатнаша. 6+

### Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**4 декабрь "Ҡурайҙан - операға"** З. Исмәғилевтың тыуыуына 100 йыл. Башлана 12.00 6+
**8 декабрь "Йыраҡ араларҙы яҡынайтып, күңелдәрҙе яҡтылыҡҡа байытып..."** Филармонияның юбилей концерты 6+
**9 декабрь "Һөйәрҙәргә ҡапҡан"** (И. Йомағолов), комедия 12+

**48-се һандағы сканворд яуаптары. Горизонталь буйынса:** Йөҙөк. Түрәлек. Күмәк. Белем. Әнкәй. Улай. Ас. Балалар. Әйтеш. Ҙурлыҡ. Ысҡын. Өй. Ҡойма. Айыу. Арэг. Рәүеш. Айҙар. Ысыҡ. Диорама. Алтын. Үкенмәҫ. Нефилим.

**Вертикаль буйынса:** Бауырһаҡ. Булдыҡһыҙ. Леонгард. Теле. Ирәүән. Мурҙа. Йөрәк. Өлгөр. Аванти. Мәйеле. Ағым. Саҡ. Кәкүк. Иҫем. Әсә. Ҡурҡа. Йоҡо. Етем. Йым. Аршын.

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1438 һижри йыл.*

| Декабрь (Рабиғел әүүәл) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 5 (5) дүшәмбе | 7:54 | 9:24 | 13:30 | 15:19 | 16:49 | 18:19 |
| 6 (6) шишәмбе | 7:56 | 9:26 | 13:30 | 15:18 | 16:48 | 18:18 |
| 7 (7) шаршамбы | 7:57 | 9:27 | 13:30 | 15:18 | 16:48 | 18:18 |
| 8 (8) кесе йома | 7:58 | 9:28 | 13:30 | 15:17 | 16:47 | 18:17 |
| 9 (9) йома | 8:00 | 9:30 | 13:30 | 15:17 | 16:47 | 18:17 |
| 10 (10) шәмбе | 8:01 | 9:31 | 13:30 | 15:17 | 16:47 | 18:17 |
| 11 (11) йәкшәмбе | 8:02 | 9:32 | 13:30 | 15:16 | 16:46 | 18:16 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

ХОККЕЙ

САЛАВАТ ЮЛАЕВ хоккейный клуб

# ЛИДЕРҘАР РӘТЕНДӘ

**25 ноябрь "Салауат Юлаев" хоккей клубы үҙенең 55 йыллыҡ юбилейын билдәләне. Башҡортостандың төп хоккей командаһы ошо дәүер эсендә республиканың ғына түгел, ә тотош илдең спорт донъяһына үҙенең тос өлөшөн индереүсе абруйлы командаларҙың береһе булып танылыу яуланы. Бөгөнгө көндә лә юлаевсылар, Рәсәй хоккейы лидерҙары рәтендә, спорттың был төрөн яратыусыларға сағыу уйын өлгөләре күрһәтә, онотолмаҫлыҡ ҡомарлы осрашыуҙар бүләк итә.**

Клуб өсөн әһәмиәтле датала юлаевсылар үҙ боҙонда Мәскәүҙең "Динамо" хоккей клубын ҡабул итте. Был көндә "Салауат Юлаев"ҡа еңелергә ярамай ине. Һәм егеттәр өмөттө аҡланы. Иҫәпте ҡунаҡтар асһа ла, Өфө уйынсылары тәүҙә уны тигеҙләргә, ә өсөнсө осорҙа алға сығырға яйын тапты. Уйын хужалар файҙаһына 2:1 иҫәбе менән бөттө.

Киләһе осрашыу ҙа ошондай уҡ иҫәп менән тамамланды, ләкин был юлы ҡунаҡтар уңышлыраҡ булып сыҡты. Ярославль ҡалаһының "Локомотив" командаһы тәүге минуттарҙан уҡ тик еңеүгә ынтылыуын күрһәтте - Андрей Гаврилов ҡапҡаһын йыш һөжүм итте. Шулай ҙа таблолағы һандар тик икенсе осорҙа ғына үҙгәрҙе - "Локомотив"тың бер-бер артлы индергән ике голына юлаевсылар бер генә гол менән яуап бирә алды. Осрашыу һөҙөмтәһе, 1:2.

Ситтәге тәүге уйынды "Салауат Юлаев" Риганың "Динамо"һы менән уҙғарҙы. Өйҙәге еңелеү юлаевсыларҙың сәмен тейгән, күрәһең, осрашыуҙы улар ҡыҙыу темпта башланы. Ригалылар ҡаты ҡыҫымға ҡаршы тора алманы һәм беренсе осорҙоң тәүге минуттарында уҡ үҙ ҡапҡаһына гол үткәрҙе. Икенсе һәм өсөнсө осорҙар ҙа юлаевсылар ҡулында булды - һәр 20 минутлыҡта улар үҙ иҫәбенә берәр гол яҙҙы. Шулай итеп, әлеге матчты "Салауат Юлаев" үҙ файҙаһына 3:0 менән тамамланы.

Гөлназ МАНАПОВА.

СӘНҒӘТ ЯҢЫЛЫҠТАРЫ

# ҠУРАЙЫБЫҘ ЕҢЕҮ ЯУЛАНЫ!

**Танылған виртуоз ҡурайсы Роберт Юлдашев үҙенең "Курайсы" төркөмө менән "Тылсым Көҙ-2016" фестивалендә сығыш яһаны. Фестивалдә этник музыка өлкәһендәге премияның бүләкләү тантанаһы булды. Сара Мәскәүҙә уҙҙы.**



"Курайсы" "Тамашасылар һөйөүе призы" номинацияһында еңеү яуланы. Төркөмгә диплом һәм премияның символы - эрбет ағасынан яһалған көмөш тапшырылды. Иҫегеҙгә төшөрәбеҙ, ҡурайсылар "Бәйләнештә" социаль селтәрендәге төркөмдә 5 мендән ашыу тауыш йыйҙы. Тауыш биреү донъяның ете иленән туғыҙ жюри ағзаһы ҡатнашлығында үткәрелде. Улар - билдәле эксперттар Йоханес Тойер (Германия), Джо Бойд (АҠШ), Юлиана Волож (Эстония), Андрей Катаев (Рәсәй) һәм башҡалар.

- "Курайсы"ның сығышы алҡыштарға күмелде, - тип һөйләне музыкант һәм продюсер Булат Әминев. - Ғөмүмән, был - Рәсәй өсөн мөһим ваҡиға, этник музыка өлкәһендәге тәүге премия. Унда бик күп өфөләрҙең ҡатнашыуы беҙҙең дөрөҫ юлдан барыуыбыҙ хаҡында һөйләй...

Гала-концертта фестивалдең махсус ҡунаҡтары Инна Желанная (Мәскәү), Authentic Light Orchestra (Швейцария-Рәсәй), Нерехта ҡалаһының борғосолар хоры (Кострома өлкәһе) сығыш яһаны. "Артистик" галереяһының (Ҡырым) Рәсәйҙәге тәүге мобиль этно стрит-арт күргәҙмәһе менән таныштырыу сараһы ҡунаҡтар һәм ҡатнашыусылар өсөн махсус бүләк булды.

"Курайсы" төркөмө - донъяла башҡорт музыкаһын башҡарған билдәле коллективтарҙың береһе. Ансамблдең репертуарында халыҡ йырҙары, классик композиторҙарҙың әҫәрҙәре бар. Быйыл төркөм үҙенең 10 йыллыҡ юбилейын билдәләй. Музыканттар Кремль һарайы, "Ла Скала" театры, "Русский Дом" концерт залы һәм башҡа ҙур сәхнәләрҙә сығыш яһаны, Гарик Сукачев, Пелагея, Владимир Спиваков менән хеҙмәттәшлек итте һәм донъяның 15 иле буйлап гастролдәргә йөрөнө. Мәскәүҙә коллектив "КазанЧайБар" ресторанында яҡташтар менән музыкаль осрашыуҙа ла ҡатнашты.

# МОҢЛО СИБАЙ...

**Баш ҡалала үткән Сибай филармонияһының "Башҡортомдоң хазинаһы - йырлы, моңло сибайҙар" концерты һуңғы осорҙағы иң сағыу тамашаларҙың береһе булды.**

"Өфөлә бөгөн ҙур байрам. Беҙ Сибай филармонияһын күптән ҡунаҡҡа көтә инек, - тип тәбрикләне артистарҙы БР Мәҙәниәт министры Әминә Шафиҡова ла. - Сибай концерт-театр берләшмәһенең төп үҙенсәлеге шунда - улар Рух менән Моңға тоғро һәм башҡорт халҡының ошо төп рухи байлығын быуындан-быуынға тапшырыу йәһәтенән оло хеҙмәт башҡара".

Нисек кенә үкенесле булмаһын, хәҙерге йырсылар сәхнәгә сығып йыр йырлауға еңел ҡарай, тере тауышҡа йырлау һирәк күренешкә әйләнде. Ә сибайҙарҙың концерты ошо йәһәттән айырылып торҙо. Башҡортостандың атҡаҙанған артистары Альберт Салауатов, Баязит Байназаров, Рөстәм Хәсәнов, төрлө бәйгеләр лауреаттары Ғаяз Ғәйетбаев, Сәмбөл Моратова, Зилә Нурлы, "Тархан" фольклор-эстрада төркөмө егеттәренең һәр береһенең үҙенсәлекле һәм көслө тауышы, "Сибай" халыҡ бейеүҙәре ансамбле бейеүселәренең, ҡурайсыларҙың сығышы һәр кемде хайран итте.

Сибай ҡала хакимиәте башлығы Хәлит Сөләймәнов үҙенең сығыышында ҡалала мәҙәниәткә ҙур иғтибар бүленеүен белдерҙе. Сибай сәнғәт колледжында хореография бүлеге асылған, сәсәндәр мәктәбе эшләп килә.

Әйткәндәй, былтыр яңғын һөҙөмтәһендә Сибай ҡалаһында филармония бинаһы ҙур зыян күргәйне. Филармонияны реконструкциялау Башҡортостандың 100 йыллығына тәҙәләсәк 100 объект исемлегенә ингән, тиҙҙән унда эштәр башланасаҡ.

# "ТАУҘАР ҺУЛЫШЫ"



**Башҡортостандың атҡаҙанған артисы Рушан Биктимеров ижадына ғашиҡ тамашасылары өсөн ҙур концерт программаһы әҙерләй. Ул Хөсәйен Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһының ҙур залында 6 декабрҙә үтәсәк.**

2000 йылдан алып бөгөнгә көнгә тиклем Рушан Салауат улы филармонияла, билдәле йырсы, Башҡортостандың халыҡ артисы Радик Вәлмөхәмәтов етәкселегендәге төркөмдә эшләй. Ҡурайсының оҫталығы республиканың ғына түгел, Бөтөн Рәсәй конкурстарында һәм фестивалдәрендә лайыҡлы баһалана килә. Шулай ҙа ул иң ҙур еңеүе тип Ишмулла Дилмөхәмәтов исемендәге һәм Ғата Сөләймәнов исемендәге республика ҡурайсылар конкурстарында беренсе урын яулауын һанай.

Рушан Биктимеровҡа Мәскәүҙә, Ырымбурҙа, Санкт-Петербургта үткәрелеп килгән Республика көндәрендә, ЮНЕСКО һәм Бөтән донъя башҡорттары ҡоролтайы эшмәкәрлеге буйынса хөкүмәт делегацияһы составында Рәсәй төбәктәренә һәм сит илдәргә сәйәхәттәрҙә сығыш яһарға ла тура килә. Донъяла тиңе булмаған башҡорт милли музыка ҡоралы - ҡурай моңо уның башҡарыуында Әзербайжанда, Хакас Республикаһында, Төркиәлә, Германияла, Испанияла, Францияла, Эстонияла ла яңғырай.

"Тауҙар һулышы" тип аталған концертта БР Халыҡ ҡоралдары милли оркестры, ҡурайсылар Азат Айытҡолов, Ришат Рәхимов, Ишморат Илбәков, филармонияның ҡурайсылар квинтеты, ҡумыҙсы Миңлеғәфүр Зәйнетдинов, йырсылар Радик Вәлмөхәмәтов, Әлфиә Юлсурина һәм йәш таланттар ҡатнаша.

# АРАЛАШЫУ МАЙҘАНСЫҒЫ



**Быйыл "ТЭФИ-Регион" Бөтөн Рәсәй телевизион конкурсының йомғаҡлау этабы Өфөлә үтте. Ул Рәсәйҙең төбәк телекомпаниялары өсөн төп телевизион сара иҫәпләнә. Ун бишенсе юбилей бәйгеһенең тантаналы өлөшөндә Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов та ҡатнашты.**

"ТЭФИ-Регион" федераль һәм төбәк киң мәғлүмәт саралары өсөн тәжрибә уртаҡлашыу, һөнәри бәйләнештәрҙе, үҙ-ара хеҙмәттәшлекте нығытыусы үҙенсәлекле майҙансыҡ. Был бәйге төбәктәрҙәге телевидениеларға үҙҙәрен күрһәтергә мөмкинлек бирә, шуға ла был сараның популярлығы йылдан-йыл арта бара. Быйыл да ул әллә күпме яңы исемдәр асты. Йомғаҡлау турына илдең 83 төбәгенән 150 журналист йыйылды. Республика журналистары ла был конкурста билдәләнде. "Башҡортостан" дәүләт телерадиокомпанияһынан Айгөл Кантюкова "Мәғлүмәти тамашалар алып барыусыһы" номинацияһында еңеүсе булды. Баһалама ағзалары шулай уҡ "Культура" төбәк каналында сыҡҡан "Культурный сезон" проектын да юғары баһаланы. Программа әҙерләгәндә ижади бригада Башҡортостандың иң матур тәбиғәт ҡурсаулыҡтарын төшөргән. "Башҡортостан" дәүләт телерадиокомпанияһы журналисы Зилә Авзалова "Каршылыктарҙы еңеү" махсус номинацияһында билдәләнде. "Спутник ФМ" мәғлүмәти-музыкаль каналы алып барыусыһы Юлия Макаровага "Иң яҡшы белем биреүсе тапшырыу" номинацияһында "Радиомания-2016" милли премияһы тапшырылды.

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ЯРҘАМ ИТӘ АЛМАҺАҢ...

## ҡамасаулыҡ итмә

Ҡатын алһаң, утын ал, тәү мәлендә ҡотон ал.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Үҙеңә ҙур ҡәнәғәтләнеү биргән эште эшләйһең икән, тимәк, һин - азат.

**(Вольтер).**

Йәшәйештең төп һорауы - "Мин нимә ала алам?" түгел, ә "Мин нимә бирә алам?"

**(Роберт Баден-Пауэлл).**

Донъяла бик күп мөғжизәләр бар, әммә кешенең үҙенән дә ҙурыраҡ мөғжизә юҡ.

**(Софокл).**

Кәрәкле ваҡытта әйтелгән һүҙ мөғжизә тыуҙыра һәм ауыр хәлдән ҡотҡара. Һүҙ ярҙамында тотош бер система тәҙәп була.

**(Иоганн Гете).**

Мин иртәгәнән ҡурҡмайым, сөнки мин кисәгене күрҙем һәм бөгөнгөнө яратам.

**(Уильям Уайт).**

Юғары әхлаҡлы кеше үҙен әхлаҡлы тип иҫәпләмәй, шуға ла ул юғары әхлаҡлы.

**(Лао Цзы).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Йыл һайын сифат конкурсында еңеүсе бер фермерҙан ул үҫтергән кукуруз уңышының серен һорағандар. Фермер, был уңыштың бар сере - үҫкән кукурузымдың иң яҡшы сортлы сәкәндәрен күршеләремә таратыуҙа, тип яуаплаған. "Нисек инде улай, - тип аптыраған кешеләр, - һуң күршеләрегеҙ ҙә яҡшы уңыш үҫтерһәс, һеҙгә конкурент булалар ҙабаһа". Шунан фермер үҙ серен тулыраҡ аңлатып биргән:"Беләһегеҙме, ел бит минең баҫыуымдағы кукуруз һеркәләрен - күршеләрҙекенә, күршеләрҙекен минекенә тарата. Әгәр күршеләрҙең баҫыуындағы кукуруз насар сортлы булһа, тиҙҙән минең баҫыуҙа ла үҫентеләр насарланасаҡ. Мин яҡшы сортлы кукуруз сәсәм икән, күршеләрҙең баҫыуында ла яҡшы сортлы кукуруз үҫеүен хәстәрләргә тейешмен. Ә үҙ сәсеүлеген кем нисек тәрбиәләй - быныһы инде икенсе мәсьәлә..."**

**Беҙҙең тормошта ла шулай бит. Уңышлы булырға теләгән кеше үҙ әйләнә-тирәһендәгеләрҙең дә уңышлы булыуы турағында хәстәрләргә һәм уларға ярҙам итергә тейеш. Кем яҡшы йәшәргә теләй, башҡаларға ла яҡшы йәшәргә ярҙам итергә тейеш. Әйләнә-тирәндәгеләр ни тиклем яҡшыраҡ йәшәһә, һиңә лә яҡшыраҡ бит. Беҙ барыбыҙ ҙа берберебеҙ менән бәйле был донъяла..."**

“Киске Өфө” гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мирасты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү танытҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**

**Мөхәррирәт:**
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Гөлназ МАНАПОВА,
Илгиз ИШБУЛАТОВ,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
Беҙҙең блог: **blog.kiskeufa.ru**
E-mail: **info@kiskeufa.ru**
**kiskeufa@mail.ru**

«ПечатниК» яуаплылығы сикләнгән йәмғиәте типографияһында баҫылды (450059, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Комсомол урамы, 27/1).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 2 декабрь 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44, 246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**

Тиражы - 4900
Заказ - 2216/12